ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

19-25 ноябрь (ҡырпағай) 2016

№47 (725)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Үҙеңдән дә юғарыраҡ...**
һикереп була икән тырышҡанда



5-6

**Беҙҙә котәләр, тигән стимул бар икән...**
тимәк, беҙ Башҡортостанға ҡайтасаҡбыҙ һәм уға хеҙмәт итәсәкбеҙ!



8-9

**Ир-егет дәрәжәһе...**
оҫталығында



9

**Ижад итер еребеҙ...**
Стәрлетамаҡ булғандыр



10-11

**ТВ-программа** 14

*Ҡурҡып йүгергәнде күргән дошман һине тағы ла ныҒыраҡ эҙәрлеклә йәсәк. Шуның һымаҡ, сир алдында ҡурҡып ҡалһаң, ул һине тағы ла ныҒыраҡ ыҙалаясаҡ. Ҡаршылыҡ булһа, йомшарасаҡ. Сиргә ҡаршылыҡ күрһәтергә кәрәк.*
**(М. Монтень).**

БАШ ҠАЛАМ

# МӘҘӘНИ ҠОМАРТҠЫЛАР...

## иғтибар үҙәгендә

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Указына ярашлы, Башҡортостан Республикаһының Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт ҡурсалауы буйынса идаралыҡ ойошторолоп, уның етәксеһе итеп Илһам Фәтҡуллин тәғәйенләнде. Яңы ведомствоға БР Мәҙәниәт министрлығының мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау, файҙаланыу, популярлаштырыу һәм дәүләт ҡурсалауы өлкәһендәге эшмәкәрлеге тапшырыласаҡ.**



Мәҙәни мираҫ объекттары Өфөлә лә бик күп һәм улар яҡынса 400 самаһы (тулы исемлек менән ҡала округы хакимиәтенең рәсми сайтында, "Документтар" бүлегендә танышырға мөмкин). Ғөмүмән, тотош Башҡортостанда ғына түгел, уның баш ҡалаһында ла мәҙәни һәм тарихи мираҫ объекттарын һаҡлауға етди иғтибар бирелә. Муниципалитет уларҙы реставрациялауҙы шәхси инвесторҙар иҫәбенә башҡарыуҙы ике йүнәлеш буйынса тормошҡа ашыра.

2013 йылдан Өфөлә мәҙәни мираҫ объектын реконструкциялағандан һуң, инвесторға бина ҡуртымға бирелә. Икенсе вариант иһә объектты инвесторҙың милке итеп күсереүҙе күҙаллай. Йәғни инвестор мәҙәни мираҫ объектын үҙ аҡсаһына реставрациялай һәм артабан уны үҙенә күсерә. Бындай алымдарҙың һөҙөмтәлелеге миҫалы итеп Сыуаш йәкшәмбе мәктәбе булараҡ билдәле Өфө губерна земство идаралығының Өйәҙ училищеһы бинаһын килтерергә мөмкин. Муниципалитет менән бизнестың бындай ыңғай тәжрибәһе һайланған юлдың дөрөҫ булыуына асыҡ миҫал. Шулай итеп, бер юлы ике мөһим мәсьәлә хәл ителә: бюджет аҡсаһы экономиялана һәм тарихи-архитектура ҡомартҡыһы һаҡлап алып ҡалына.

Әйткәндәй, мәҙәни һәм тарихи мираҫҡа донъя йәмәғәтселеге лә битараф түгел. Википедистар йыл һайын сентябрҙә "Вики һәйкәлдәр ярата" (Wiki Loves Monuments - Вики любит памятники) тип аталған халыҡ-ара конкурс ойоштора. Ҡатнашыусылар тарихи биналарҙы һәм иҫтәлекле урындарҙы фотоға төшөрөп, Викимилеккә һала. Быйыл был конкурс Рәсәйҙә алтынсы тапҡыр үткәрелде һәм унда Башҡорт Википедияһы ирекмәндәре лә беренсе тапҡыр ҡатнашып, көстәрен һынап ҡараны, тәжрибә тупланы. Киләсәктә мәҙәни һәм тарихи мираҫты һаҡлауҙың һәм донъяға таратыуҙың был ысулына баш ҡаланың фотоһөйөүселәре лә, билдәле фотографтары ла ҡушылыр, тип ышанғы килә. Ҙур эштәр бит бәләкәй аҙымдарҙан башлана.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөнгө йәштәребеҙгә ҡарап, беҙҙең киләсәк ышаныслы ҡулдарҙа, тип әйтеп буламы?

***Азамат ЮЛДАШБАЕВ, "Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррире:*** Өлкән быуын йәштәр тураһында аҡыл һатырға ярата инде ул. Йәнәһе, бына беҙ йәш саҡта... Быуындар алышына тора, төшөнсәләр үҙгәрә, тик "атайҙар һәм балалар" араһындағы дәлилле һәм дәлилһеҙ дәғүәләр кәмемәй. Әле лә бына һорау тыуа: "Йәштәргә киләсәкте ышанып тапшырырға буламы?" Беренсенән, бөрәү ҙә мәңгелек түгел, тимәк, ышанһаң да, ышанмаһаң да, киләсәк йәштәр ҡулында. Был осраҡта бер ниндәй ҙә альтернатива юҡ. Икенсенән, был һорауҙы милли яҫылыҡҡа килтереп "терәһәк", "Киләсәкте йәштәргә ышанып тапшыра алмайбыҙ", тигән һүҙ үҙенән-үҙе "беҙҙең милләтебеҙҙең киләсәге юҡ", тигәнде аңлата. Быныһы - философия. Ә хәҙер факттар:

- Әлеге йәштәребеҙ яңы заманда тыуған. Был быуын әлеге баҙар иҡтисадының бихисап кире яҡтары менән бергә ошо осорҙоң ифрат бер яҡшы ҡаҙанышы "емеше": улар азатлыҡ һауаһы һулап, ирекТеҢ нимә икәнен тойоп үҫкәндәр. Әлбиттә, йәмғиәттә йәшәп тә, йәмғиәттән азат булып булмай, әммә улар беҙҙең кеүек бер партияның генераль һыҙығы буйлап бер аяҡтан "атлап", бер үк йырҙы йырлап, бер иш кейем кейеп, бер идеяға буйһоноп етлекмәне.

- Улар азатлығы йәнә шунан ғибәрәт: улар ике стандарттарҙан ҡотолған - ағайҙары һәм апайҙары ише берҙе уйлап, икенсеһен һөйләп йөрөмәй.

- Уларҙың күбеһе "бюджетник" тигән мөһөрҙән дә азат, шуға күрә "система"ның уларға йоғонтоһо бик аҙ. "Пенсияға тиклем эшемде генә юғалтып ҡуймайым", "Хөкүмәт эшенән айырмаһын, Хоҙай", тип ҡалтыранып ултырмайҙар.

- Үҙ мөмкинлектәрен асыу өсөн уларға сиктәр ҙә бик шартлы: телә һәләр - Мәскәү, Питер, теләһәләр - бөтә донъя уларҙың аяғы аҫтында. Быныһы ла уларҙың эске азатлығының бер факторы.

- Эйе, улар өлкәндәр менән бер иш уйламай. Тик был - уларҙың ғәйебе түгел, өлкәндәрҙең бәләһе. Үткән быуаттың алтмышынсы йылдар идеологияһында тәрбиә алып, шул "аҡыл" менән ошо быуат уртаһында йәшәйәсәк быуынды тәрбиәләп маташыу - Дон Кихоттың ел тирмәненә ҡаршы көрәшеүе менән бер сама абсурд.

- Йәнәһе, улар өлкәндәрҙе ихтирам итмәй. Бәлки... Тик, нимә өсөн ихтирам итергә? Бармаҡтарҙы бөгөп һанап ҡарағыҙ әле... Донъяуи кимәлдә иң көслө мәмләкәттәрҙең береһе булған СССР тигән дәүләттең тарҡалыуы өсөнмө? Завод, фабрикалар һәм тотош илдең байлығын кешенең "кеҫәһенә" һыйған өсөнмө? Бәлки, ярты миллион милләтәшебеҙ һаман үҙ туған телендә һөйләшмәгән өсөндөр? Әллә оло ҡоролтайҙарҙа ағайҙар һәм апайҙар бер-береһен ишетмәй, бит йыртышҡан өсөнмө? Нимә өсөн? Һуңғы биш йыл ошо йәштәр менән туранан-тура аралашам һәм шуны әйтә алам:

Улар рухлылар. Улар ирекләләр. Улар милләт өсөн дә, дәүләт өсөн дә яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алырға әҙерҙәр. Улар төрлө, әммә бер-береһен ишетергә һәләтле. Улар үҙҙәрен дә, бүтәндәрҙе лә ихтирам итә, шул уҡ ваҡытта бүтәндәрҙән үҙҙәрен дә ихтирам иттерә ала. Улар зиһенле, заманса белем алып, заманса фекер йөрөтәләр.

Бөгөнгө йәштәрҙең беҙгә оҡшап етмәүе уларҙың ғәйебе түгел, киреһенсә, был - уларҙың өҫтөнлөгө. Киләсәк - улар иңендә. Уларға беҙҙән ярҙам кәрәкмәй, бары тик ҡамасауламайыҡ.

(Дауамы 2-се биттә).

12+

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ...

# ТУҒАНЫМ КЕҮЕК...

## яҡын да, ҡәҙерле лә



**Аҡыллы кәңәштәр тупланмаһы, файҙалы мәғлүмәттәр сығанағы, актуаль мәсьәләләрҙе күтәреп сығыусы, донъяуи һәм милли хәл-ваҡиғаларҙы әүҙем яҡтыртыусы, һәр кемдең көнделендә үҙ урынын табыусы гәзит ул - "Киске Өфө". Баҫма менән танышыуыма күп тә түгел, ләкин ошо ваҡыт эсендә ул минң туғаным кеүек яҡын да, ҡәҙерле лә булып өлгөрҙө.**

Ҡайһы бер баҫмаларға күҙ йүгертеп кенә сығыу ҙа етһә, "Киске Өфө" былдай исулға "бойһонмай". Уның төпләлөгө, тәрәнлеге беренсе биттә үк күренә. Гәзит уҡыусыларҙы борсоған да, уйландырған да, хәүефкә лә һалған, шатландырған да һорауҙарға яуаптар эҙләүе һәм уларға ентекле яуаптар бирә белеүе менән ота баҫма. "Киске Өфө" төрлө темаларҙы күтәреп кенә ҡалмай, ә уларға ентекле анализ эшләү алымы, теге йәки был күренешкә, ваҡиғаға ҡарата билдәле шәхестәрҙең фекер ебен бер урынға туплау оҫталығы менән дә башҡа күп матбуғат сараларынан айырылып тора.

Тарихты өйрәнеп бөтөү мөмкин түгел. Ләкин тарих менән ҡыҙыҡһыныу - кемдәлер әҙерәк, кемдәлер күберәк - бөтәбеҙҙә лә бар. Үкенескә күрә, мәктәп һәм башҡа уҡыу йорттары программалары ла бик өҫтөнлөклө тарихи мәғлүмәттәр бирә. Шуға күрә гәзиттең "Тарихнамә" битендә донъя күргән тарихи сығанаҡтар баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә. Был материалдарҙағы тулылыҡ, айыҡ ҡараш, ентеклелек һоҡландырмай ҡалмай. Шәхсән үҙем был битте ҡат-ҡат уҡыйым һәм оҙаҡ ҡына баҫылған мәҡәләләр шауҡымынан сыға алмай йөрөйөм. Республика, халҡым яҙмышында ҙур роль уйнаусы шәхестәр тураһында, милләттебеҙҙең үткәне хаҡында артабан да белешмәләр бирә барырһығыҙ, тигән өмөттә ҡалам.

Баҫманың тағы бер үҙенсәлеге - хайуандар, ҡошҡорттар донъяһына, ғөмүмән, тәбиғәткә ҡағылышлы ҡыҙыҡлы, бай мәғлүмәтле мәҡәләләргә урын биреүе. Минә ҡалһа, был мәҡәләләр беҙҙе кешелеклерәк итә, тәбиғәттә әҙәми затҡа ғына түгел, ә башҡа йән эйәләренә лә ҙур урын бүленеүе тураһында онотмаҫҡа әтәрә. Ғөмүмән, донъяла мөғжизәләр күп һәм "Киске Өфө" уларҙы аңларға ярҙам итеп кенә ҡалмай, ә һанларға кәрәклеген дә аңғарта.

Сәнғәтһеҙ тормошобоҙҙоң бер өлөшө китек булыр ине. Республикабыҙ мәҙәниәтен алға әтәреүсе, уны үҙ индәрендә күтәреүсе һәләтле сәхнә оҫталары бихисап. Ошондай таланттарыбыҙ менән уҙғарылған әңгәмәләрҙе ихлас көтөп алам. Һәм "Киске Өфө", һәр ваҡыттағыса, ышаныслымды аҡлай - әңгәмәләр ихласлығы, йәнлелеге менән айырылып тора.

Гәзиттең башҡа рубрикалары хаҡында ла тик матур фекерҙәр генә әйтергә була. "Киске Өфө"лә донъя күргән бөтә мәҡәләләр ҙа беҙҙең көнделдәргә тәрән эҙ ҡалдыра. Ә былдай һәләткә тик юғары кимәлдәге, ысын халыҡ гәзите булырлыҡ баҫма ғына эйә. "Киске Өфө" нәҡ ошондай баҫмаларҙың береһе лә инде.

**Әминә ЛОҠМАНОВА.**
**Белорет ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөнгө йәштәребеҙгә ҡарап, беҙҙең киләсәк ышаныслы ҡулдарҙа, тип әйтеп буламы?



(Башы 1-се биттә).

***Индира ШАҺИӘХМӘТОВА, Башҡорт дәүләт университеты магистранты:*** Минең фекер башҡаларҙыҡынан айырылып торор, бәлки. Шулай уҡ күптәргә бик оҡшап та етмәҫ...Һәр хәлдә, яҡын аралашҡан дуҫтарҙан (ә улар минең тормошта ла, виртуаль бәйләнештә лә бик күптәр) йыш ишетергә тура килгән һүҙҙәр шундайыраҡ йөкмәткелә: "Был уҡыу кемгә, нимәгә кәрәк булды - алған һөнәр буйынса эш табып булмай барыбер", "Көн дә таң менән тороп, эшкә йүгереүҙе күҙ алдына ла килтерә алмайым", "Ялҡауым килә", "Тәүге мөмкинлек килеп сығыу менән берәй сит илгә тайырға кәрәк..." һ.б. Ошо фекерҙәрҙе әйткәндәрҙең ҡайһылары әле бакалавр йә магистратурала уҡыһалар ҙа, эшләп тә йөрөйҙәр. Аҡса өсөн генә. Минең дә тиҙерәк эшләгем килә, тик үҙем теләгән, яратҡан һөнәр буйынса! Ваҡытында өс вузға документтар тапшырып, ҡайҙа конкурстан үттем, шунда уҡырға барҙым, йәнәһе, артабан күҙ күрер... Тик минә үҙемдең специальность оҡшамай. Хәҙер ни эшләргә? Яңынан үҙемә оҡшаған берәй ергә уҡырға инеп, кәрәкле белем алырға һуң инде. Бала-саға араһында ҡартайғансы уҡып йөрөп булмай ҙаһа. Әсәйем, берәй йүне килеп сығыр әле, тип йыуатһа ла, атайым гел битәрләй: йәнәһе, эштең яҡшыһы-насары юҡ, тик эш кенә булһын да хеҙмәт хаҡын биреп торһондар. Ә мин улай теләмәйем! Бына шундай кешегә киләсәкте ышанып тапшырып буламы икән - юҡтыр... Бәлки, хатамды төҙәтергә әле һуң түгелдер?

***Вәсилә ДӘҮЛӘТБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** Бөгөнгө йәштәребеҙгә ҡарайым да, "Ғаилә ғәрипһеҙ булмай" тигән әйтемде иҫкә төшөрәм. Йәштәрҙең яныл торған яҡшылары, белемле һәм тәрбиәлеләре лә бар, моңһоҙҙары, ялҡауҙары, наҙандары, хатта наркомандары ла байтаҡ. Бына шунан яуап биреп ҡара инде һеҙҙең һорауға. Әлбиттә, киләсәгебеҙҙе ышанып тапшыра торғандары тәғәйен үҙ урындарын алыр ҙа, ти, тик быра шуныһы ла бар бит әле: дәүләт структураларында эшләүселәр йыш ҡына туған-тумасалыҡ принцибынан сығып, йә үҙҙәре кеүек үк ярайһы шымара башлағандарҙы үҫтерә бит, ә талантттар, үҙ фекерен тура әйтеүҙән ҡурҡмаған ҡыйыуыраҡтар власть коридорҙарына яҡын да ебәрелмәй. Киләсәк чиновниктарҙан ғына тормай бит, тиерһегеҙ, бәлки. Күп нәмә барыбер уларға бәйле шулай ҙа. Власть структураларына шуның өсөн дә белемле, намыҫлы, һүҙе менән эше бер төптән булған, халҡын ихтирам иткән, яратҡан, уның тарихын, мәҙәниәтен, телен яҡшы белгән алдынғы ҡарашлы йәштәр килергә тейеш, тип иҫәпләйем. Шунда ғына киләсәгебеҙ ышаныслы буласаҡ. Ә ундай йәштәребеҙ бар беҙҙең! Һеҙ уларҙың һуңғы йылдарҙағы рухи күтәрелешен, асылдарына килеү юлдарын эҙләп, тамырҙарын барлау ынтылыштарын һиҙемләйһегеҙме икән? Шундай башланғыстарҙың бер нисәүһен генә әйтеп китеү ҙә ишара булыр аҡыллыға. Власть структураларынан һуҡыр тинлек тә ярҙам булмауына төшөнгән айыҡ тормош рәүешен пропагандалаусы егеттәребеҙҙең береһе йәштәр өсөн сәләмәтлектең башҡа, матди бойондороҡһоҙ төрөн - воркаут спортын башлап ебәрҙе, афарин! Бер төркөм йәштәребеҙ "Мәргән уҡсы"фестивалендә уҡ атыу оҫталығында көс һынаша, милли кейемдәребеҙ тергеҙелә; этно-төркөмдәр башҡорт моңон заманса яңғырата, "Шаяндар һәм тапҡырҙар" юмор аша әсә телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу уйы менән яна. Бер йүнселе башҡорт ҡымыҙын етештереү конвейерына көйләп, унан сабыйҙар ризығы сығарыу сараһын эҙләй... Йәштәрҙең үҙаллы эшмәкәрлектәренә йүнәлеш биреп, уларҙы белем һәм тәжрибә майҙансығы менән тәьмин итеүсе Йәштәр мәғариф форумы барлыҡҡа килде. Унда йыш эш башларға торған йәш эшҡыуарҙарға ғәмәли ярҙам күрһәтелә. Киләсәк быра ошо балалар ҡулында, тип уйлайым мин, тик Аллаһы Тәғәлә көс-ҡеүәт бирһен инде уларға, башҡа яҡтан ярҙам булырына өмөт самалы.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу дауам итә. 50665 индекслы гәзитебеҙгә - 485 һум 40 тингә, 50673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) 515 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ.**




Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә ике көнлөк "Ҡатындар диалогы. Сикһеҙ шәфҡәтлелек" тип аталған форум булды. Баш ҡалаға 400-гә яҡын кеше - Рәсәй төбәктәренән, яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙән, Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе, ШОС һәм БРИКС илдәренән йәмәғәт ойошмалары етәкселәре, социаль йүнәлешле коммерцияға ҡарамаған ойошмалар вәкилдәре, лидер ҡатын-ҡыҙҙар килде. "Ҡатындар диалогы"нда АҠШ, Бөйөк Британия, Германия, Көньяҡ Африка Республикаһы, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Эстония, Вьетнам, Италияның йәмәғәт, хәйриә һәм дәүләт ойошмалары вәкилдәре ҡатнашты.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Конгресс-холда үткән "Ҡатындар диалогы. Сикһеҙ шәфҡәтлелек" халыҡ-ара форумының пленар ултырышында сығыш яһаны һәм республика биләмәһендә хәйриәлек эшмәкәрлеге менән шөғөлләнгән дүрт ойошмаға рәхмәт хаттары тапшырҙы. Улар иҫәбендә - Ауыр тормош хәләндә ҡалған балаларға ярҙам фонды, Елена һәм Геннадий Тимченколарҙың фонды, "Йылмайыу операцияһы" йәмәғәт ойошмаһы, "Ғүмер һыҙаты" ауыр сирле балаларҙы ҡотҡарыу хәйриә фонды.

✓Социаль-мәҙәни башланғыстар фонды президенты Светлана Медведева һәм Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Аҡ рауза" ҡатын-ҡыҙ сәләмәтлеген тикшереү үҙәгенең эшмәкәрлеге менән танышты. Үҙәк Светлана Медведеваның тәҡдиме менән быйыл ғинуар айында 3-сө бала табыу йортоноң ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһы булеге нигеҙендә асылды. Билдәләнеүенсә, көн һайын үҙәктә 25-30 ҡатын-ҡыҙ бушлай тикшереү үтә. Уларҙы өс акушер-гинеколог, өс маммолог, ике ультратауыш ярҙамында тикшереү табибы, шулай уҡ рентгенолог, психолог һәм урта медицина персоналы ҡабул итә.

✓Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабичтың бойороғо менән Михаил Закомалдин Башҡортостан буйынса Баш федераль инспектор итеп тәғәйенләнде. Быға тиклем Башҡортостан буйынса Баш федераль инспектор вазифаһын Андрей Чечеватов биләне. 2016 йылдың сентябрендә ул Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле урынбасары итеп тәғәйенләнде.

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# ҠЫҘЫҠЛЫ КИТАПТЫ УҠЫЙҘАР УЛ!

**Халыҡ китап уҡымай, тигән һүҙҙәрҙе ҡалыплаштырып алдыҡ та, ҡайҙа ла шуны ҡабатлайбыҙ. Йәштәр интернетҡа, телевизорға ҡапланды, китапҡа иғтибар кәмене, тип тә өҫтәйбеҙ. Бының менән килешеп булмай барыбер ҙә. Китаптар һатып алған, почта аша яҙҙырған, китапханаларҙан сығышмаған, уҡығандары тураһында фекерләшергә, бәхәсләшергә ратҡан кешеләр бихисап.**



Тик шуныһы: уҡырға яратыусылар барыһын да уҡымай, ә һайлап, оҡшағанын, кеше маҡтағанын, хисләндергән йәки тетрәндергәнен эҙләп алып уҡый. Йәки үҙҙәренең электән белгән авторҙарының әҫәрҙәрен яҡын күрә, башҡаларға кәңәш итә. Тимәк, ошоларҙан сығып, яҡшы әҫәр булғанда уҡыусы табыла, тигән һығымта яһарға була.

Өлкән яҙыусыларҙан: "Хәҙерге йәш ҡәләм тирбәтеүселәр яҙа белмәй", - тигәнде йыш ишетергә тура килә. Әлбиттә, элекке яҙыусыларҙың да барыһы ла шәп яҙған, тип булмай. Уларҙың араһында ла "иң-иң"дәре һәм "уртаҡул"дары бар. Йыш ҡына элекке китаптарҙы яңынан алып уҡыйым. Ҡайһыларын рәхәтләнеп уҡып сығам, йөкмәткеһен белһәм дә, ятлап алып бөткән булһам да. Был тәңгәлдә әҫәрҙең сюжетынан бигерәк, авторҙың тел байлығы, стиле, һүрәтләүе, ваҡиғаларҙы уҡыусыға еткерә белеү һәләте арбай мине. Ә ҡайһы бер китаптарҙы элек ни өсөн уҡығанымды аңламайым. Хәйер, замандың үҙ идеологияһы бар ине бит. Һәм яҙыусылар ҙа шул идеология нигеҙендә ижад итте, уларҙы шул сәбәпле беҙ ҙә уҡыныҡ. Мәҫәлән, заводтар һәм шәп эшселәр, алдынғы колхоздар һәм колхозсылар, ауыл һәм ауыл алдынғылары, мөхәббәт һәм тик яҡшыға һәм яманға ғына бүленгән кешеләр хаҡында ине ул әҫәрҙәр. Шулай уҡ ниндәйҙер хата аҙым яһаған һәм мотлаҡ шул хатаһын аңлаған йәки яза алған шәхестәр тураһында ла күп яҙалар ине. Ана шул заман идеологияһын пропагандалаған һәм уҡыусыға һендереү процесында ҡатнашҡан өсөн ҡәләм тирбәтеүселәргә аҡса түләнде, хөкүмәт уларҙы ҡараны, фатирҙар бирҙе, яҙышһындар өсөн шарттар тыуҙырҙы, ял йорттарына ебәрҙе. Был үҙенә күрә ҡоролошҡа ярәҡлашыу булды. Нисек булғанда ла, совет заманында йәшәгән яҙыусының үҙ заманына ҡарашын белдергән, заманын һәм уның эштәрен тәнҡитләгән әҫәрен исләмәйем...

Бөгөнгө яҙыусыны әйҙәүсе лә, этәреүсе лә идеология юҡ. Ул ирекле хәрәкәттә, уй-фекерҙә. Уның ижад итеүе матди яҡтан дәртләндерелмәй ҙә. Йәш яҙыусыларҙың аҙ булыуында башҡорт телен белмәү генә сәбәпсе түгел, телләгән кеше башҡорт әҙәбиәте өсөн рус телендә лә яҙа ала. Һәм, фекерле йәштәр юҡ, тип тә әйтеп булмай. Интернет селтәрҙәрендәге фекер алышыуҙарға күҙ һалһаң, ҡайһы берәүҙәрҙең яҙышыуы ул-был әҫәр теленә алмаштырғыһыҙ. Һығымта: тимәк, йәштәрҙе был өлкә ҡыҙыҡһындырмай. Хөкүмәт тарафынан да (теге йәки был темалағы конкурстарҙан тыш) ҡыҙыҡһындырыр шарттар тыуҙырылмаған.

Ни өсөн ҡыҙыҡһыҙ әҫәрҙәр, уҡымһыҙ китаптар баҫыла һуң? Беренсенән, коммерция нигеҙендә эшләүсе нәшриәттәр артты, икенсенән, әҙәбиәт донъяһында тәнҡит тигән төшөнсә бөтөнләй юғалды, өсөнсөнән, китап булып ташҡа баҫылыу юлында ҡулъяҙмалар ентекле тикшереү үтмәй. Ошо өс сәбәп китап магазиндары кәштәләрен сүп-сар менән тултыра ла инде. Йыш ҡына ҡәләм тирбәтеүселәрҙән: "Китабым һатылмай, һатышығыҙ әле", - тигәнен ишетергә тура килә. Һуң үҙҙәре магазинға барып, кәрәкмәгән әйберҙе һатып алмайҙарҙыр бит, кәрәген, файҙалыһын ғына алалар. Шуның кеүек инде уҡыусы ла - ҡыҙыҡлыһын ала. Мин дә шулай итәм...

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА.**

Белеүегеҙсә, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең бүләктәргә лайыҡ була килә. Ноябрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән бер кеше **"Антология поэзии Башкортостана"**, 2 кеше **Рәшит Назаровтың "Ер һәм Йыһан йыры"**, 1 кеше **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 2 кеше **Әхмәр Үтәбайҙың "Сәхрә"**, 2 кеше **Рәйес Түләктең "Мең дә икенсе кис…"**, 3 кеше **"Бураҡаевтар ижады"**, 10 кеше **2017 йылға "Башҡортса дини календарь"**, 10 кеше **"Шайтан хәйләләре"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# БӨТӘ КЕШЕГӘ ЛӘ ЯРАП БУЛМАЙ




Ҡаланың үҙәк майҙанында ҙур сара бара. Алда - сәхнә, унда саҡырылған маҡтаулы ҡунаҡтар сығыш яһай. Һулда - үҙешмәкәр артистар үҙ сиратын тулҡынланып көтә. Сәхнә ҡаршыһында - төрлө йәштәге тамашасы. Иң алдан кескәйҙәр, коляска менән йәш әсәйҙәр урын алған, шунан - өлкәндәр, арттараҡ - йәштәр.

- Журналист кеше әрһеҙ була ул, иң алдан сығып, ваҡиға уртаһында йөрөргә, халыҡтан байрамға ҡарата фекерҙәрен, тәьҫораттарын яҙып алырға ла, фотоға төшөрөргә лә өлгөрөргә тейеш, - тип, бер танышым ситтән генә фотоға төшөрөп торған мине тәнҡитләп алды. Бөтә ҡыйыулығымды йыйып, алғараҡ үтеп, бер нисә фото төшөрҙөм дә яңынан ситкә боҫтом.

Ошо ваҡиғанан һуң оҙаҡ та үтмәне, бер сарала элекке хеҙмәттәштәремдең береһе төптө икенсе яҡтан тәнҡитләне.

- Хәбәрселәр сарала бөтөнләй иғтибарҙы йәлеп итергә тейеш түгел. Байрам булһынмы, кәңәшмәме, "түңәрәк өҫтәл" ултырышымы - улар бөтөнләй күренмәҫкә, ситтә генә баҫып торорға, ваҡиға барышына ҡамасауламаҫҡа тейеш. Юғиһә, ҡайҙа килһәң дә, иң беренсе гәзит, телевидение хеҙмәткәрҙәрен күрергә тура килә. Миненсә, журналист ситтән генә ҡарап, күҙенә нимә күренә, яҡшы күренешме йәки, киреһенсә, етешһеҙлекме, бөтәһен дә теҙеп яҙырға тейеш...

Алға үтеп, урын һорап йөрөй торған гәзәтем юҡ. Бөгөн дә иғтибар йәлеп итергә тырышманым, буғай. Ике тәнҡитте лә өндәшмәй генә күңелем аша үткәрҙем. Йәшермәйем, уңайһыҙлыҡ кисереүҙән бергилке һөнәремдең кире яҡтарын эҙләп, төрлө кисереш солғанышында ҡалдым.

Күптән түгел интернет селтәрендә бөтә кешегә лә ярап булмау тураһында кинәйәле хикәйә уҡып, үҙрә атап кителгән ике ваҡиғаны иҫләп, көлөп ҡуйҙым. Һөйләйем әле, гәзит уҡыусыларҙың күңеленә лә хуш килер тип уйлайым.

Йәйге эҫе көндә бер ир ишәккә ултырған да урамдан китеп бара икән. Бәләкәй улы ишәктең дилбегәһен тотоп, алдан атлай. Уларға осраған үткенсе:

- Бахыр балаң арып бөткән, бәләкәй генә аяҡтары талған, ә һин үҙең рәхәтләнеп ишәккә атланғанһың. Баланды ултыртһаң булмаймы ни?- тип әрләп киткән.

Теге үткенсе күҙҙән юғалыу менән атаһы ишәктән төшкән дә, улын ишәккә атландырған. Икенсе үткенсе быларҙы күреп, тауыш күтәргән:

- Оят түгелме ни һиңә, малай остоғо! Солтан һымаҡ ишәккә атланып алғанһың, ә атайың, бахыр, йәйәүләп бара!

Был юлы малай намыҫланып ишәктән һикереп төшкән. Атаһының да башҡа ишәккә ултырғыһы килмәгән. Икеһе ике яҡтан ишәкте етәкләп китеп барһалар, өсөнсө үткенсе уларҙы ахмаҡлыҡта ғәйепләп киткән:

- Нинә һеҙҙең ишәгегеҙ бер нәмә лә эшләмәй? Берегеҙҙе булһа ла үҙенә атландырып, файҙа күрһәтһә була бит!

Өсөнсө үткенсенең был һүҙенән һуң атаһы туҡтай ҙа улына:

- Күрҙеңме, улым? Нимә генә эшләһәк тә, беҙҙең менән килешмәгән, риза булмаған кеше табылды. Шуның өсөн ҡолағына индереп ҡуй: беҙгә нисек сәйәхәт итергә икәнен үҙебеҙ хәл итергә тейеш!

Ҡайһы берҙә кеше кәңәшен тыңламай, үҙең нисек теләйһең, шулай эшләү яҡшыраҡ булғанын һеҙҙең дә тойғанығыҙ барҙыр, шулай бит?..

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда аҙ тәьмин ителгән күп балалы ғаиләләргә өҫтәмә ярҙам күрһәтеләсәк. Республика Хөкүмәте бойороғона ярашлы, муниципаль ҡаҙналар аҙ тәьмин ителгән күп балалы ғаиләләрҙәге уҡыусыларға социаль ярҙам күрһәтеү өсөн 25,4 млн һумлыҡ субвенция аласаҡ. Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, аҡса мәктәп формаһы һатып алыуға йүнәлтелә.

✓Рәсәй Тәфтиш комитеты "Башнефть" акцияларын һатҡанда ришүәт алғаны өсөн Иҡтисади үҫеш министрлығы башлығы Алексей Улюкаевҡа ҡарата енәйәт эше ҡуҙғатты. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, енәйәт эше Иҡтисади үҫеш министрлығы ыңғай баһа биргән өсөн 2016 йылдың 14 ноябрендә министрҙың ике миллион доллар ришүәт алыуы менән бәйле. Был "Роснефть" нефть компанияһына "Башнефть" компанияһы акцияларының 50 процентын һатып алыу буйынса килешеүҙе тормошҡа ашырырға мөмкинлек биргән.

✓Көйөргәҙе районында "Хевел" компанияһы Бөгөлсән ҡояш электр станцияһының өсөнсө сиратын файҙаланыуға тапшырҙы. Хәҙер станция 15 МВт проект ҡеүәтенә сыҡты. Ул Көйөргәҙе районының электр энергияһына ихтыяжын 60-70 процентка тәьмин итә ала. "Хевел" Башҡортостанда бөтәһе һигеҙ ҡояш генерацияһы объекттарын төҙөйәсәк. Дөйөм ҡеүәте - 64 МВт. Инвестицияларҙың дөйөм күләме 6 миллиард һумдан ашыу тип баһалана. Өфөләге 42-се лицейҙың химия уҡытыусыһы Лиза Әһәҙуллина "Рәсәйҙең халыҡ уҡытыусыһы" исеменә лайыҡ булды. Маҡтаулы исем биреү тураһындағы Указға Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйған.

✓**26 ноябрҙә Өфөнөң Кустарный урамы, 17-се йорт адресындағы мәҙәниәт һарайында башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Селтәр" традицион биҙәнеү әйберҙәре бәйгеһенә йомғаҡ яһала. Ул "Башҡорт милли кейеме көнө" байрамы (кисәгә милли кейемдә килеү мотлаҡ) булараҡ үтә. Иртәнге сәғәт 11-ҙән күргәҙмәләр, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының баш кейеме ҡашмау эшләү буйынса оҫталыҡ дәресе үтә. Төп сара сәғәт 2-нән башлана.**

✓23 ноябрҙә "ТЭФИ-Тәбәк 2016" Бөтә Рәсәй телевизион конкурсы барышында Андрей Кончаловскийҙың "Ожмах" исемле яңы фильмы күрһәтелә. "Ожмах" фильмы 73-сө Венеция халыҡ-ара фестиваленең төп конкурс программаһында ҡатнашҡан. 23 ноябрҙә Леонид Якубович оҫталыҡ дәресе күрһәтә. Аккредитация (347) 246-50-75 телефоны буйынса ҡабул ителә.

✓ *Милекселәр ер участкаһы өсөн уның кадастр хаҡы буйынса һалым түләргә тейеш. Былай ҙа коммуналь хеҙмәттәрҙең артыуына аптыраған халыҡ өсөн был тағы ла бер баш ауырыуына әйләнеүе мөмкин.*



*ҠЫҪҠАСА*

# КОММУНАЛЬ ТҮЛӘҮҘӘР АРТА...

✓Өфө ҡала округы Советының сираттағы ултырышында депутаттар ҡала бюджетына үҙгәрештәр индерҙе. Хәҙер бюджеттың килем өлөшө 23,95 миллиард һум тәшкил итә. Үҫеш республика бюджетынан ике миллиардтан ашыу субвенция бүлеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. Килем өлөшө үҫеү менән бюджеттың сығым өлөшө лә артты. Әлеге ваҡытта ул 26,9 миллиард тәшкил итә. Дефицит - 2,95 миллиард һум. Өҫтәмә килем юлдарҙы ремонтлауға, Ағиҙел аша яңы күперҙе проектлауға һәм төҙөүгә, граждандарҙы авария торошондағы йорттарҙан күсереүгә, етем балаларҙы торлаҡ менән тәьмин итеүгә, бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡы түләүгә тотоноласаҡ.

✓Шулай уҡ депутаттар ҡала округында граждандарҙың коммуналь хеҙмәттәргә түләү күләме индексын үҙгәртеү тәҡдимен ҡараны. Уға ярашлы, 2017 йылдың 1 июленән коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү индексы 12,8 процент буласаҡ. Быңдай индекс билдәләү Өфө территорияһында йылылыҡ һәм һыу менән тәьмин итеү өлкәһендә ике инвестицион программаны тормошҡа ашырыу менән бәйле. Йылылыҡ селтәрҙәрен яңыртыуға 227 миллион һум аҡса һалынасаҡ, ә инде 2019 йылға тиклем был сумма 2 миллиард һумдан ашып китәсәк.

✓Ултырышта айырым эшҡыуарлыҡ төрҙәрендәге килемгә билдәләнгән берҙәм һалым күләменә лә үҙгәрештәр индерелде. Был ихтыяж иһә федераль ҡануниәттәге үҙгәрештәргә бәйле тыуған. Уға ярашлы, 2017 йылдың 1 ғинуарынан ҡайһы бер көнкүреш хеҙмәттәре күрһәтеү өлкәһендәге эшмәкәрлек өсөн һалым күләме үҙгәрергә тейеш, әммә исемлек әлегә асыҡланмаған. Шул сәбәпле, Өфө ҡала Советы депутаттары бындай хеҙмәттәрҙе берҙәм билдәләмә менән берләштерергә булған. Ҡабул ителгән ҡарар һөҙөмтәһендә көнкүреш хеҙмәте өлкәһендә эш урындары булдырған, хеҙмәткәрҙәренә страховка иғәнәләре һәм пособиелар түләгән эшҡыуарҙар өсөн берҙәм корректировкалау коэффициенты (К2) 0,6 кимәлендә билдәләнә. Бынан тыш, уларҙың эш урыны һәм территорияһына ҡарап, түбәнәйтеү коэффициенттары ла ҡаралған. Ә инде хеҙмәткәрҙәренә тейешле түләүҙәрҙе башҡармаусы эшҡыуарҙар өсөн К2 1 кимәлендә билдәләнә.

✓ Әлегә тиклем халҡы миллиондан ашыу булған ҡалалар араһында социаль реклама өсөн түләүҙәр Өфөлә иң түбәне булып тора. Сираттағы ултырышта депутаттар түбәнәйтелгән коэффициентты 0,005-тән 0,01-гә тиклем арттырырға ҡарар сығарҙы. Бындай күрһәткес бары тик Новосибирскиҙа ғына бар. Башҡа миллионлы ҡалаларҙа эшмәкәрлектең был төрөнә түбәнәйтеү коэффициенттары бөтөнләй юҡ.

✓ Руслан Солтанов Өфө ҡала Советы рәйесенең беренсе урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Ул Валерий Трофимов булмағанда йәки вәкәләттәрен башҡара алмағанда уны алыштырасаҡ. Элекке саҡырылышта бындай вазифа юҡ ине. Әлеге ваҡытта Руслан Солтанов Республика клиник онкологик диспансерҙың баш табибы булып эшләй.

*КӘҢӘШМӘЛӘ ҠАРАЛДЫ*

# КҮК КҮКРӘМӘЙ ТОРОП...

**Урыҫтарҙа шундай әйтем бар: "Пока гром не грянет, мужик не перекрестится". Был бер ҙә юҡтан килеп тыумаған, сөнки тормошта сир муйындан быуып алмай, эш алҡымға килеп тығылмай, нимәлер эшләү өсөн ниндәйҙер фажиғә йәки афәт булмай тороп, был хаҡта уйларға йәки алдан иҫкәртеү саралары тураһында хәстәрләргә кәрәклеген бик йыш "онотабыҙ", йәки оҙайлы "йәшниккә" һалып ҡуябыҙ, ваҡытты һуҙырға тырышабыҙ. Әгәр мәктәп уҡыусыһы Виолетта Токарчукты бер маньяк белем усағы эргәһендә тиерлек гараждар араһында көсләп, үлтереп китмәһә, ихаталарҙан уларҙы алыу мәсьәләһе үҙ яйы менән барыр ине, моғайын. Әммә күк күкрәне...**



"Өфө ҡалаһының торлаҡ хужалығы идаралығы" МБУ-һы директоры Раил Мирхәйҙәров Өфө ҡала округы хакимиәте етәксеһе эргәһендәге сираттағы оператив кәңәшмәлә килтергән мәғлүмәттәргә ярашлы, баш ҡалалағы тимер гараждарҙың 80 проценты рөхсәтһеҙ ҡуйылған, йәғни 6 меңдән ашыу объекттың ни бары 887-һенең хужаһында ғына рөхсәт документы бар. Ул ғына ла түгел, инвентаризация барышында рөхсәтһеҙ төҙөлгән 573 ағас ҡоролма, 515 - мөгәрәп, 81 күгәрсен ояһы булыуы, шулай уҡ гараждарҙың 70-80 процентының тәғәйенләнеше буйынса түгел, ә иҫке әйберҙәрҙе һаҡлау өсөн файҙаланылыуы асыҡлана.

Әлеге ваҡытта Өфөлә ихаталарҙы һәм башҡа территорияларҙы законһыҙ урынлаштырылған гараждарҙан таҙартыу эше алып барыла. Былтырҙан алып, бер йыл эсендә 2936 тимер гараж алынған. Улар күбеһе уҙған быуаттың 80-се йылдарына тиклем төҙөлгән йорттарҙың ихаталарында нигеҙҙә "хрущевка"ларҙа урынлаштырылған. Бөгөн иһә йорттар комплекслы ҡараштан сығып төҙөлә һәм уларҙың территорияһында шунда уҡ паркингтар, парковка урындары билдәләнә. Тимәк, "хрущевка"ларҙың ихатаһын да киләсәктә балалар майҙансығына әйләндерергә, күп кимәлле парковка төҙөү өсөн файҙаланырға була. Ләкин йорт эргәһендә парковка булдырыу тағы бер проблеманы тыуҙыра - халыҡ үҙ белдеге менән шәхси парковка урыны эшләй ҙә, уны сылбыр менән кәртәләп ҡуя. Бөгөнгә идара итеү ойошмалары тарафынан шундай 976 урын асыҡланған. Әммә бындай башбаштаҡлыҡ та закон талаптарына тап килмәй. Был мәсьәләне хәл итеү өсөн йорттағы милекселәр ихатаны межалап, уға кадастр номеры һәм территорияны дөйөм йорт милке итеп алырға тейеш. Ер участкаһының сиктәрен һәм күләмен билдәдәп, уға тейешле документтар тултырылғандан һуң ғына милекселәр үҙҙәренең дөйөм йыйылышында участканы файҙаланыу мәсьәләһен хәл итә. Бында шуны ла онотторға ярамай - ҡануниәткә ярашлы, милекселәр ер участкаһы өсөн уның кадастр хаҡы буйынса һалым түләргә тейеш. Был, бер яҡтан, яҡшы, сөнки бюджет тулылана, икенсе яҡтан, былай ҙа коммуналь хеҙмәттәрҙең артыуына аптыраған халыҡ өсөн тағы ла бер баш ауырыуына әйләнеүе мөмкин. Ғөмүмән, Өфө райондарының Торлаҡ хужалыҡтары ҡарамағында 4943 күп фатирлы йорт булып, уларҙың ихата территориялары дөйөм алғанда 15 миллион квадрат метр тәшкил итеүенән сығып фекер йөрөткәндә, һалымдарҙың түңәрәк кенә сумма килтереүе ихтимал.

Ләкин гараждарҙан таҙартылған майҙандарҙы тик парковка йәки паркинг өсөн территория итеп кенә ҡарарға ярамай, сөнки муниципалитет йорт ихаталарын төҙөкләндереүгә ҙур иғтибар бирә. Мәҫәлән, һуңғы биш йылда барлығы 338 балалар спорт-уйын комплексы урынлаштырылған, 1416 йорт ихатаһына асфальт һалынған, тупраҡ килтерелеп, ағастар һәм ҡыуаҡтар ултыртылған.

Шуға күрә, майҙанды нисек файҙаланыу, тәү сиратта, халыҡтың ихтыярына бәйле. Паркинг, парковка кәрәк икән, рәхим ит! Уйын, балалар майҙансыҡтарымы йәки ял зонаһымы - һайла! Бары тик кемдер килеп, беҙ йәшәгән ерҙе матурлар, эшләр, хыялдарыбыҙҙы тормошҡа ашырыр тип көтөп ултырырға ғына ярамай.

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# СОЦИАЛЬ ӨҪТӘМӘ - ЯҢЫ КҮЛӘМДӘ

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырышында 2017 йылда пенсияға социаль өҫтәмәне билдәләү өсөн республикала пенсионерҙың йәшәү минимумы күләме быйылғы 7842 һум урынына 8015 һум күләмендә булырға тейеш, тип раҫланды.**

Республиканың 161 мең эшләмәүсе пенсионеры киләһе йылдың 1 ғинуарынан пенсияларына яңы күләмдә федераль социаль өҫтәмә ала башлаясаҡ. Шуларҙан 5 меңгә яҡын граждан федераль өҫтәмәгә хоҡуҡты тәүләп аласаҡ.

Эшләмәгән пенсионерҙарға өҫтәмә түләүҙең был төрө 2010 йылдың 1 ғинуарынан тәғәйенләнгәйне. Социаль өҫтәмә күләме һәр кемдең төрлөсә, йәғни пенсияны һәм башҡа түләүҙәрҙе лә индереп, уларҙың күләме пенсионерҙың йәшәү минимумы күләменән күпмегә түбәнерәк булыуына бәйле.

2017 йылдың 1 ғинуарынан пенсияға социаль өҫтәмә тәғәйенләү өсөн ғаризаны бындай хоҡуҡҡа тәүләп эйә булыусылар ғына яҙырға тейеш, уны пенсия алған урын буйынса Пенсия фонды идаралығына ошо йылдың декабрендә тапшырырға кәрәк, сөнки социаль өҫтәмә ғариза биргән ай һуңынан килеүсе айҙың 1-се числоһында тәғәйенләнә.

Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантимеров әйтеүенсә, быйылғы 10 ай эсендә федераль ҡаҙнанан социаль өҫтәмә түләүгә киткән сығымдар 2 млрд 620 млн һум тәшкил иткән.

**РФ Пенсия фонды БР буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Октябрь айында Башҡортостанда ҡулланыусылар хаҡы индексы сентябргә ҡарата 100,3 процент тәшкил иткән. Был - Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында иң түбән күрһәткес. Үткән айҙа иткә, һөт ризыҡтарына, йомортҡаға, шәкәргә хаҡтар үҫеше темпы округка ҡарағанда кәмерәк. Социаль әһәмиәтле аҙыҡ-түлеккә хаҡтар кимәле буйынса республика ил субъекттары араһында 75-се урында килә.

✓Өфөлә Республика балалар клиник дауаханаһында сираттағы "Йылмайыу операцияһы" хәйриә акцияһы башланды. Акция барышында яңаҡ-йөҙ хирургияһы өлкәһе белгестәре, шул иҫәптән АҠШ һәм Вьетнамдан табиптар тыумыштан йөҙ-яңаҡ кәмселектәре булған балаларға бушлай һәм сифатлы медицина ярҙамы күрһәтәсәк. Статистика мәғлүмәттәренә ҡарағанда, йыл һайын Башҡортостанда яңаҡ-йөҙөндә кәмселектәре булған 200 самаһы сабый тыуа. Әле ике меңдән ашыуы Республика балалар клиник дауаханаһында диспансер иҫәптә тора.

✓Мәскәүҙең Дәүләт Кремль Һарайында үтәсәк Яңы йыл шыршыһына Башҡортостандан 114 уҡыусы бара. 25 декабрҙә балалар махсус рейс менән Мәскәүгә юллана, 27-дә иһә Өфөгә ҡайта. Быйыл төп Яңы йыл тамашаһы 26 декабргә билдәләнгән. Корпустары кадеттары саҡырылған. Ғәҙәттәгесә, делегация "Измайлово" ҡунаҡхана комплексына урынлаштырыла. 20 ноябргә тиклем байрамда ҡатнашыусыларҙың исемлеге төҙөләсәк.

✓"Рәсәй радиоһы Башҡортостан" 89,5 FM йышлығында эфирға сыға башланы. Хәҙер уны теләһә ниндәй ҡоролмала тыңларға мөмкин. Әйткәндәй, "Рәсәй радиоһы" элеккесә ультра ҡыҫҡа тулҡындарҙа ла эшләй, Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиокомпанияһы филиалының рәсми порталында тапшырыуҙар тәүлек әйләнәһенә алып барыла. Әле FM йышлығында "Рәсәй радиоһы" һынау режимында эшләй. Тулҡһан йыллыҡ тарихы булған радио тәүге тапҡыр ошо форматҡа күсте.

✓Башҡортостанда 2017 йылға байрам көндәре билдәләнде. 1, 2, 3, 4, 5, 6 һәм 8 ғинуар - Яңы йыл каникулдары, 7 ғинуар - Христос Раштыуаһы, 23 февраль - Ватанды һаҡлаусылар көнө, 8 март - Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө, 1 май - Яҙ һәм хеҙмәт байрамы, 8, 9 май - Еңеү көнө, 12 июнь - Рәсәй көнө, 25 июнь - Ураҙа байрамы, 1 сентябрь - Ҡорбан байрамы, 11 октябрь - Республика көнө, 4, 5 ноябрь - Халыҡтар берҙәмлеге көнө яңы йылда Башҡортостанда ял көндәре булып тора.

✔ *Ылаҡ уйыны "Заратустра" тәғлимәте заманынан уҡ билдәле, ҡырғыҙҙарҙа традицион, милли уйын төрҙәренән һанала, алтайҙарҙа, башҡорттарҙа һәм Урта Азия халыҡтарында киң таралған, тиелә унда.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**3-8 сентябрҙә Ҡырғыҙстанда үткән Икенсе бөтә донъя күсмә халыҡтар уйындарында Башҡортостандан барған команда составында сығыш яһаусы Баймаҡ районы ылаҡ уйынсылары 8 команда араһынан 4-се урынға лайыҡ булғайны. Уйындарҙа Башҡортостан исеменән сығыш яһаусы көрәшселәр һәм уҡсылар тураһында бәйән иткәйнек инде, бөгөн ылаҡсылар тураһында һүҙ алып барасаҡбыҙ, ғөмүмән, ылаҡ уйыны менән танышасаҡбыҙ. Был уйындың тарихы, килеп сығышы, халҡыбыҙ тарихына бәйле булыу-булмау мәсьәләһе беҙҙе генә түгел, күптәрҙе ҡыҙыҡһындыралыр, тип ышанабыҙ. Әңгәмәселәребеҙ - билдәле көрәшсе, Баймаҡ ылаҡсыларының тренеры, "Баһадир" физкультура-һауыҡтырыу комплексы директоры Илшат ХӘМИТОВ һәм ылаҡ уйынында Башҡортостан исеменән сығыш яһаусы егеттәребеҙҙең береһе - Баймаҡ районы Темәс ауылынан Фуат ХАРИСОВ.**

# ҮҘЕҢДӘН ДӘ ЮҒАРЫРАҠ...

## Һикереп була икән тырышҡанда



**➔ Илшат Нуриәхмәт улы, тәүге һорауҙы һеҙгә йүнәлтәбеҙ, ылаҡ уйынының килеп сығышы, "ылаҡ" һүҙенең мәғәнәһе нимәне аңлата? Башы ҡырҡылған кәзә өсөн тартҡылашыу уйынын ҡырғыҙҙар ни өсөн "көк бөрү" (беҙҙеңсә - күк бүре) тип атаған һуң?**

**И. Хәмитов:** "Ылаҡ" - төрки халыҡтарында киң таралған һүҙ, "кәзә бәрәсе" тигәнде аңлата. Йондоҙлоҡта русса "козерог" тигәнгә тап килә. Ылаҡ һүҙенең башҡорттоң ауыҙ-тел ижадында, эпостарыбыҙҙа, йырҙарыбыҙҙа таралыу-таралмауы тураһында мәғлүмәттәргә эйә түгелмен. Егеттәрҙе уйындарға әҙерләгән ваҡытта үҙебеҙҙең ҡул аҫтындағы мәғлүмәттәргә - интернет сығанаҡтарына күберәк таянырға тура килде. "Википедия"ла ылаҡ уйынының ҡырғыҙ варианты - "көк бөрү" тураһында бәйән иткән мәғлүмәттәр бар. Ҡырғыҙ телендәге мәҡәләлә әйтелеүенсә, "көк бөрү" - ҡырғыҙ иленең ат өҫтөндә уйнала торған уйындарының береһе. Уларҙың "Манас" эпосында ла был уйын тураһында юлдар бар. Рус телендәге мәҡәләлә иһә, уйындың тарихына, ҡағиҙәләренә һәм бөгөнгө таралышына ҡағылышлы бихисап мәғлүмәт бирелгән. Ылаҡ уйыны "Заратустра" тәғлимәте заманынан уҡ билдәле, ҡырғыҙҙарҙа традицион, милли уйын төрҙәренән һанала, алтайҙарҙа, башҡорттарҙа һәм Урта Азия халыҡтарында киң таралған, тиелә унда.

Һорауығыҙҙың икенсе яртыһына килгәндә, баҡтиһәң, уйын бик боронғо дәүерҙәрҙән баш ала икән. Һыбайлы егеттәрҙең ҡышын көрттә бүре ҡыуып, суҡмар менән бүре һуғып алғандан һуң, кире ҡайтыу юлында шаярып, табыш өсөн тартҡылашыу ғәҙәтенән ҡалған икән "күк бүре" уйыны атамаһы. Ваҡыт үтә килә, был ғәҙәт уйынға әүерелгән. Уйындың маҡсаты - яугирҙар тәрбиәләү, уларҙың ат өҫтөндәге сослоғон арттырыу.

**➔ Киләһе һорауҙы, Фуат, һиңә юллайыҡ. Башҡортостандан барған 12 ылаҡсы араһында һин дә бар...**

**Ф. Харисов:** Эйе, үҙемде белә-белгәндән бирле ат өҫтөндәмен, шуның өсөн был уйында ҡатнашыу минең өсөн әллә ни ауырлыҡ тыуҙырманы. Йылҡысылыҡ олатайҙарыбыҙҙан күскән. Олатайым да ғүмере буйы йылҡы тотто, ата-бабаларҙан ҡалған ғәҙәтте ныҡ һаҡланы. Атайым, тынғыһыҙ эштә эшләүенә ҡарамаҫтан (ул тиҙ ярҙам машинаһын йөрөтә), хәҙер ҙә йылҡы тоторға мөмкинлек, көс таба. Беҙҙең ғаиләбеҙҙә бер нисә йылҡыбыҙ, менге атыбыҙ бар. Мин үҙем вахта ысулы менән төҙөлөштә эшләйем. Сибай политехник колледжында алған "оҫталыҡ" танытмам бар. Әле Учалы менән Магнитогорск ҡалалары араһында туристик база төҙөйбөҙ. Ҡырғыҙстандан ҡайтҡаны бирле ат менгәнем юҡ, һағындырҙы.

**➔ Уйын тәртибенә килгәндә, уның талаптары, ҡағиҙәләре ниндәй?**

**И. Хәмитов:** Ылаҡты (күк бүрене) элегерәк йөҙәрләгән, меңәрләгән һыбайлы бер юлы уйнаған булһа, хәҙер иһә, ике яҡтан 4-әр уйынсы уйнай. Бер командала 12 кеше, улар майҙанға алмашлап сыға ла, башы ҡырҡылған кәзәне (уның ауырлығы 32-35 килонан артмаҫҡа тейеш) ҡаршы яҡтың "ҡаҙанына" индерергә тырыша. Дәғүәселәр уға ҡағиҙәләр рөхсәт иткән юлдар менән ҡамасаулай. Ылаҡ уйынының тәртибе хоккей уйыныныҡына бермә-бер тап килә, тиһәк, арттырыу булмаҫтыр. Майҙандың иңе-буйы ла, ҡағиҙәләр ҙә шул сама. Дәғүәселәрҙе һырт менән этергә ярай, уларға һуғырға, ялтанырға, тура барып бәрелергә ярамай. Тағы, дәғүәсегә ҡамсы менән һуғыу, уның атының йүгәнен тотоу, ылаҡты (кәзәне) эйәргә бәйләп һалыу тыйыла. Уның ҡарауы, кәзәне ат бауырына, тояҡтары араһына төшөрөп торорға ла була. Атты үрәпсетергә ярамай. Ҡапҡа ролен ҡалынлығы 80 см булған ҡаҙандар үтәй. Ул ҡаҙандарҙың радиусы - 2 метр, бейеклеге - 1,2 метр. Ҡапҡасылар юҡ - ике һаҡсы, ике һөжүмсе. Уйын тамамланғас, еңеүсе командаға кәзә бирелә. Команда уны бешереп ашау хоҡуғына эйә була...

**(Дауамы 6-сы биттә).**

АЛДАНМА!



# АҠСАҢ КАРТАЛАМЫ?

**Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығы банк карталарының именлеге буйынса инструкция сығарған. Полиция хеҙмәткәрҙәре мутлыҡтарҙың төрлө төрҙәре менән көрәш буйынса тәжрибәләрен дөйөмләштереп, карта хужаларына ябай ҡағиҙәләр тәҡдим итә:**

1. ПИН-кодты бер кемгә лә әйтмәгеҙ һәм уны картағыҙға яҙмағыҙ. Бары тик хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ һәм бер кемгә лә белдермәгеҙ. Хатта ниндәйҙер ойошманан шылтыраталар йәки электрон почта аша хат алаһығыҙ һәм карта реквизитығыҙҙы, Пин-кодты әйтеүегеҙҙе үтенәләр икән, был үтенесте үтәргә ашыҡмағыҙ. Ойошмаға кире шылтыратып, хәл-торошто асыҡлағыҙ. Электрон почтаға килгән хаттағы һылтанма буйынса күсергә тырышмағыҙ - улар күсермә булыуы мөмкин. Картаның ПИН-кодын сер итеп тотоу - уның хужаларының бурысы һәм яуаплылығы.

2. Картағыҙҙы икенсе кешегә бирмәгеҙ. Магазинда йәки ресторанда карта менән иҫәпләшһәгеҙ, был ғәмәл күҙ алдығыҙҙа башҡарылырға тейеш. Кире осраҡта мутлашыусылар реквизиттарығыҙҙы алып, уны артабан ялған карта эшләү өсөн файҙаланырға мөмкин.

3. Банк телефонын бәйләнеш исемлегенә индерегеҙ. Картағыҙ юғалһа, банк менән бәйләнешкә сығып, уны тиҙ генә блоклағыҙ.

4. Күҙәтеү системаһы менән йыһазландырылған хәүефһеҙ урындағы - учреждениеларҙа, банктарҙа, эре магазиндарҙа - банкоматтар менән файҙаланығыҙ. Карта менән эш иткәндә, ПИН-код йыйғанда сит кешеләр бармы-юҡмы икәнен ҡарап, клавиатураны ҡулығыҙ менән ҡаплағыҙ.

5. Банкоматта артыҡ ҡулланмалар булырға тейеш түгел. Әгәр аппарат оҙаҡ көттөрә йәки үҙ аллы ҡайтанан тейәй башлай икән, операция башҡарыуҙан баш тартығыҙ һәм картағыҙҙы алығыҙ - банкоматтың ҡайтанан программаланыу ихтималлығы бар.

6. Банкомат менән эш иткәндә сит кешеләрҙән ярҙам йәки кәңәш һорамағыҙ. Проблема килеп тыуа икән, банкка шылтыратығыҙ - ундағы хеҙмәткәрҙәр һеҙгә карта менән эш итеү буйынса консультация бирер.

**Ошо кәңәштәрҙе тотҡанда, мутлашыусыларҙың ҡулына эләгеү ихтималлағын күпкә кәметерһегеҙ.**

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Экзема

❖ Тигеҙ күләмдә үҫемлек майы, йөҙөм йәки алма һеркәһе алып болғатырға, даими рәүештә экземаға һөртөргә.

### Авитаминоз

❖ 600 мл һалҡын һыуға 4 стакан шыршы энәһе, 1 лимон һуты өҫтәргә, 2 көн ҡараңғы урында торорға, көн һайын 1-әр стакан эсергә.

### Гастрит

❖ Был сара ашҡаҙан һутының әселеге юғары булыуы һөҙөмтәһендәге гастриттан яфаланыусыларға. Ярты килограмм гөлйемешкә 3,5 литр һыу ҡойоп, 30 минут төнәткәндән һуң талғын утҡа ҡуйып, ҡайнатып сығарырға, тағы ла 2 сәғәт төнәтергә. Гөлйемеште ағас ҡалаҡ менән иҙеп, тағы ла талғын утта 5 минут ҡайнатырға. 100 грамм шыршы ылыҫы өҫтәп, тағы ла 5 минут ҡайнатырға. Бер аҙ һыуынғас, 3 ҡалаҡ бал ҡушырға, көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң 1/3 стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай.

### Ҡарабойҙай

❖ Ҡарабойҙай төнәтмәһе ҡан тамырҙарын, иммунитетты нығыта, организмды шлактарҙан таҙарта. Ҡарабойҙай сәскәләре һәм ваҡланған һаламын бер тигеҙ күләмдә алып болғатырға, 1 балғалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Һыуынғас, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 40-ар мл (балаларға - 20-шәр мл) эсергә. Көн һайын яңы төнәтмә әҙерләргә. Дауаланыу курсы - 1 ай. 3 аҙна ял иткәндән һуң, 3 ай буйына араларында 3-әр аҙна ял ойоштороп, 21-әр көн дауаланырға. 90 көндән тағы ҡабатларға.

### Барбарис

❖ Барбарис емешен ҡан баҫымын төшөрөү, ҡан тамырҙарын һәм йөрәк мускулдарын нығытыу, склерозды дауалау өсөн ҡулланалар. 1 балғалаҡ туралған барбарис емешенә 1 балғалаҡ бал, 1 стакан ҡайнар һыу өҫтәргә, 40 минут төнәтергә һәм эсергә. Көнөнә бер нисә тапҡыр эсергә кәрәк булыр. Дауаланыу курсы - 1 ай. 7 көн ял иткәндән һуң курсты тағы ҡабатларға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*✓ Тренер булараҡ, һығымтам шул: был уйынға егеттәрҙе атта йөрөү оҫталығынан сығып та, кәүҙә бейеклегенән сығып та һайлап алырға кәрәк. Ҡаҙағстан командаһында, мәҫәлән, дәү-дәү егеттәр генә тупланған.*



*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

Һәр кеше, бигерәк тә балалар һаулығында дөрөҫ һәм ваҡытында ял итеүҙең мөһим роль уйнағанлығы һәр кемгә билдәле. Борон башҡорттар баланың йоҡоһона айырыуса иғтибар биргән, бала ни тиклем йәшерәк булһа, ул шул хәтлем оҙағыраҡ йоҡларға тейеш, тип иҫәпләгәндәр. Ә бала ҙурайыу менән йоҡо ваҡыты сикләтелә. Самаһыҙ күп йоҡлауҙы ялҡау һәм булдыҡһыҙ кешеләргә хас сифат тип иҫәпләгәндәр.

Имсәк баланы атлай башлағанға тиклем бишектә йоҡлатҡандар. Баланы уң яҡ ҡабырғаға ятып йоҡларға өйрәткәндәр. Мендәрҙе үтә текә итеп тә, үтә түбән итеп тә һалырға тырышмағандар. Был баҫлығып һәм хырылдап йоҡлауға килтерә, тип иҫәпләгәндәр.

Башҡорттарҙа кешене ҡысҡырып йәки ҡапыл уятырға ярамаған. Йоҡоға киткәндә кешенең йәне осоп сығып китә, имеш. Кешене ҡапыл уятһаң, йәне ҡайтып өлгөрмәй. Шуға күрә баланы уятҡанда тәүҙә исеме әкрен генә әйтелә. Был, әлбиттә, мистик ҡараш. Шул уҡ ваҡытта ошолай һаҡлыҡ менән уятыуҙың үҙ мәғәнәһе бар. Сөнки ҡапыл уятып, кешене ҡурҡытып, нервы-психикаһын ныҡ ҡаҡшатырға мөмкин. Белеүебеҙсә, балаларҙың, бигерәк тә кесе йәштәгеләрҙең, үҙәк нервы системаһы нығынып етмәгән була. Шуға күрә ҡапыл уятыу улар өсөн бигерәк хәүефле.

Башҡорттар йәшәр өсөн урынды елдәр йүнәлешен иҫәпкә алып, ҡалҡыуыраҡ ерҙән һайлаған. Ундай урын йышыраҡ бейек ярлы йылға буйҙарына тура килгән. Бындай һайлауҙа гигиеник мәғәнә булғанына шик юҡ. Сөнки яҡшы микроклимат тәьмин ителгән: һауа дымлы булмаған, тимәк, тапма биҙгәге кеүек ауырыуҙар һирәк күҙәтелгән.

Йәшәр өсөн урын һайлағанда эстетик яҡ та иҫәпкә алынған. Л. Толстой, Д. Мамин-Сибиряк башҡорттар йәшәү өсөн ғәҙәттә тәбиғәттең матур урынын һайлай тип яҙған. Башҡорт халҡын яҡшы белгән күренекле музыка белгесе С. Рыбаков: "Башҡорттар үҙ рухы менән ҙур шағир", - тигән. Ул башҡорттарҙың йәшәр өсөн ғәҙәттә тәбиғәттең һоҡланғыс мөйөшөн һайлауы, уларҙың йәйләүҙәре алдын мотлаҡ рәүештә гүзәл таулы ер биҙәп тороуы хаҡында әйтә.

Башҡорт халҡында торлаҡтың ике төрө билдәле. Ваҡытлы торлаҡ йылы миҙгелдә йәйләүҙә төҙөлгән. Төҙөлөш материалы булып ағас, ә урманға ярлы ерҙә саман һәм тупраҡ хеҙмәт иткән. Тирмә, япмалы арба, ҡыуыш йәйләүҙә ваҡытлы торлаҡ булған. мал инмәһен өсөн торлаҡ кәртә менән уратып алынған.

Элек башҡорт халыҡ торлағы бүлмәләргә бүленмәгән. Боронғолар фекеренсә, торлаҡ иркен булырға тейеш. Өйҙө ҡойма менән уратыу һәм бейек ҡапҡа ҡуйыу ҙа һирәк булған. Бында халҡыбыҙҙың быуаттар буйы бер ни менән сикләнмәгән күсмә тормошта йәшәүенең сағылышы барҙыр.

Башҡорт ауылдарында элек ағас үҫтермәгәндәр. Быны аңлап була. Йылдың байтаҡ өлөшөн - яҙ менән йәйҙе халыҡ йәйләүҙәрҙә, бай тәбиғәт ҡосағында үткәргән, шуға ла ауылда ағас ултыртып тормаған. Йылы миҙгелдә йәйләүҙә йәшәүҙең тағы бер ыңғай яғы бар: был осорҙа башҡорт ауылдары биологик яҡтан таҙарыу кисергән.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы".**
**(Дауамы бар).**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ҮҘЕҢДӘН ДӘ ЮҒАРЫРАҠ...

## һикереп була икән тырышҡанда

**(Башы 1-се биттә).**

**➔ Ә ул тапалып, иҙелеп, бысранып бөткән кәзәнең ите сифаттарын юғалталыр бит инде? Был беҙгә ҡырағайлыҡ булып тойола бит барыбер. Был йәһәттән ҡырғыҙҙар нимә ти?**

**И. Хәмитов:** Ҡырғыҙҙар ул иттең шундай таҙа, йомшаҡ булыуын әйттеләр. "Ҡаны ҡойолоп бөтә, ит тапалып, сүкеш менән иҙгеләнгән һымаҡ булып ҡала", - ти улар. Уйын башланыуға 5 минут ҡалғас, кәзәне матур итеп, "Бисмилла" итеп, мосолманса салалар. Әйткәндәй, уйынға башҡа мал түгел, ә кәзә тәкәһе генә һайланыуы ла осраҡлы түгел, тип аңлатты ҡырғыҙҙар. Баҡтиһәң, кәзәнең, ҡуй малының тиреһе кәзә тәкәһенекенән йоҡараҡ була, уйын барышында йыртылырға мөмкин икән. Ә кәзә тәкәһенеке - ҡалын, йөнөнөң оҙон булыуы арҡаһында уны тотоу ҙа уңайлыраҡ.

**➔ Башҡорттарҙа ылаҡ уйыны элек тә булғанмы? Ахырҙа, бөгөн ул уйын беҙгә берегеп китерме, киң таралыу алырмы?**

- Был уйын беҙҙә лә булған, тиҙәр. Әле мин Белоретта, Учалыла командалар бар, тип ишеттем. Беҙҙең ойошҡанлыҡты күреп, сибайҙар ҙа "янып" ҡайтты. Иң күп йылҡы малы Башҡортостанда, тиҙәр. Һыбай йөрөү традицияһы ла тап беҙҙә тергеҙелә. Ылаҡ уйынын башлап ҡына торабыҙ бит, киләсәге өмөтлө булыр, тип уйланыла.

Ҡырғыҙстан территорияһы буйлап үткәндә бик һоҡланғыс күренештәр шаһиты булдыҡ. Беҙҙә һәр ауыл һайын тиерлек футбол майҙансыҡтары булһа, уларҙың һәр ауылы эргәһендә ылаҡ уйыны өсөн эшләнгән майҙандар ҡоролған. Ҡырғыҙҙар ылаҡ уйынын туйҙарҙа ла, байрамдарҙа ла рәхәтләнеп уйнайҙар, тинеләр. Был уйын спорт төрө булараҡ, реестрҙарына ла ингән, оҫталарына "спорт оҫтаһы" дәрәжәһен дә бирәләр, уны үҫтереүгә дәүләт тә ныҡ ярҙам итә.

**➔ Ҡырғыҙстанға үҙ аттарығыҙҙы алып бара алмағанһығыҙ бит инде. Чолпон-Ата ҡалаһында һеҙ ҡуртымға алған аттар нисегерәк ине һуң? Ғөмүмән, уйындағы хәүеф, уны булдырмау саралары тураһында ла әйтеп үтһәгеҙ ине...**

**Ф. Харисов:** Ҡырғыҙстандың Чолпон-Ата ҡалаһында беҙ ҡуртымға алған аттарҙың был уйын өсөн махсус өйрәтелгән, махсус көрәйтелгән икәнен белдек. Барыһы ла бейектәр, тостар. Беҙҙең башҡорт аттары ла сыҙамлыҡ яғынан уларҙан ҡалышмай, әлбиттә, ләкин беҙҙекеләр тәпәшәгерәк.

Уйында аттар бер-береһе менән һырттарын ышҡышып айҡашҡан саҡта һыбайлыларҙың аяҡтары иҙелеп ҡалыу ҡурҡынысы барлығы һәр кемгә мәғлүмдер. Шунлыҡтан, кешеләрҙең һаулығын, именлеген һаҡлау маҡсатында, уйынды ойоштороусылар мотлаҡ үтәлә торған талап ҡуйған: һәр кем балтырына һаҡлағыс әйбер кейергә тейеш. Беҙ был талап барлығын, был әйбер кәрәклеген белмәгәнгә күрә, "үҙҙәре теләп, үлемгә барыусылар" тигән ҡушамат та алдыҡ. Шулай ҙа майҙанға сыҡҡанда башҡа командалар егеттәре аяҡты һаҡлай торған ҡулайламаларын биреп торҙо. Был аяуһыҙ уйында ни генә булмаҫҡа мөмкин икәнлеген үҙ күҙебеҙ менән күрҙек инде. Ҡаҙағстан командаһынан бер таныш егетебеҙҙең аты уйын ваҡытында һөрлөгөп китеп, егет ат аҫтында ҡалды. Бик аяуһыҙ уйын, әлбиттә, һәм ул ныҡлы әҙерлек талап итә. Был уйында кеше факторы ла, мал факторы ла ҙур роль уйнай. Шуға ла беҙҙең командаға бала саҡтан ат өҫтөндә үҫкән егеттәр һайланды. Лайыҡлы сығыш яһаныҡ, ат өҫтөндә үҙен ышаныслы тотоусы халыҡ икәнебеҙҙе күрһәттек.

**И. Хәмитов:** Ҡырғыҙҙар беҙгә аттарын тәғәйенләне тәғәйенләүгә, ләкин улар тәүҙә беҙҙе атта йөрөй белмәйҙәрҙер, тип уйлаған. Егеттәр атта сабып күрһәткәс, ҡараштары ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе. "Ат өҫтөндә яҡшы йөрөйһөгөҙ бит", - тинеләр. Хәүеф тураһында дөрөҫ әйтелде. Ныҡлы иғтибар талап итә был уйын. Яңылышлыҡты ғәфү итмәй. Махсус кейемһеҙ ҡурҡыныс. Артабан беҙ ҙә махсус кейем тектереп, ике йылдан һуң үтәсәк Уйындарға команданы ныҡлы әҙерләп алып барырбыҙ, тигән ниәт менән ҡайттыҡ.

Тренер булараҡ, һығымтам шул: был уйынға егеттәрҙе атта йөрөү оҫталығынан сығып та, кәүҙә бейеклегенән сығып та һайлап алырға кәрәк. Ҡаҙағстан командаһында, мәҫәлән, бейек-бейек егеттәр генә тупланған. Ылаҡты атта ултырған килеш ергә эйелеп алыр өсөн буй оҙонлоғо ла кәрәк. Уларҙың аттары ла бик эре. Дончак, инглиз-ғәрәп тоҡомдары ҡушылмалары. Улар беҙҙең башҡорт тоҡомло аттарҙан бейегерәк тә, ҙурыраҡ та. Танк һымаҡ, төкөйҙәр ҙә ҡуялар. Хатта аттарҙы йыға төкөйҙәр. Хоккей уйынсылары һымаҡ, тип, ҡабатлап әйтәм...

**➔ Һүҙҙең аҙағында Уйындарҙа алған тәьҫораттарығыҙ тураһында ишетке килә...**

**Ф. Харисов:** Ҡырғыҙстанда үткән Икенсе бөтә донъя күсмә халыҡтары уйындарында ҡатнашыу бик оҡшаны. Уйын барышында барлыҡҡа килгән дәрт, сәм, ҡомар хистәре әле лә хәтергә төшөп-төшөп, һағындырып ала. Был ярышта илебеҙ өсөн сығыш яһауҙы барыбыҙ ҙа оло мәртәбә һананыҡ. Илшат ағай беҙҙе лайыҡлы әҙерләүгә бар көсөн һалды. Уға рәхмәтлемен. Республика башлығы Рөстәм Зәки улының Темәскә килгән сағында әйткән наказы ла, район хакимиәте башлығы Илшат Хәмит улы Ситдиҡовтың ярҙамы, теләктәшлеге, ҡурсыуы ла дәртләндерҙе беҙҙе...

Әйтеүҙәренсә, беҙҙе төрөктәр икенсе йыл үҙҙәренә ылаҡ уйынына саҡырып ҡайтҡан. Беҙҙе алып барған етәксе ағайҙар был яңылыҡты бик хуплап ҡабул итте, ҡыуаныстарын йәшермәне. Беҙ, уйынсылар, уларҙың төрөк коллегалары менән эшлекле бәйләнештәрен нығытып, үҙ кимәлендә сәфәр мәсьәләһен хәл итеренә ышанабыҙ.

Ҡаршы яҡ команда үҙенсә аралашҡанда, беҙ егеттәр менән: "Миңә ташла!", "Кәзәне эләктереп ал!", "Әйҙә, әйҙә!" тип, башҡортса аңлаштыҡ. Милли уйын ниндәй дәрт, рух бирә икәнен шунда үҙ булмышыбыҙҙа тойҙоҡ, аңланыҡ. Профессиональ уйынсылар - ҡаҙаҡтар менән ҡырғыҙҙарҙан тактика хәйләләрен өйрәндек.

**И. Хәмитов:** Тәьҫораттар бик яҡшы. Күреп, өйрәнеп ҡайтырға, тигән ниәт менән барғайныҡ бит. Күңелдә шундай ҙур кимәлдәге сарала лайыҡлы сығыш яһағы килеүҙән тыуған ниндәйҙер һағайыу, хафаланыу тойғоһо ла бар ине. "Нисек булыр? Ҡайһылай сығыш яһарбыҙ? Нисек ҡаршы алырҙар? Аттарыбыҙ көр булырмы?" тип тә уйландыҡ. Әммә халҡыбыҙҙың әйтемендә әйтелгәненсә, ҡурҡҡан эш хәйерле була икәнен ҡырғыҙҙар үҙҙәренең йылы мөнәсәбәте менән төшөндөрҙө. Ҡырғыҙҙар башҡорттарҙы яҡшы беләләр булып сыҡты, туғандаш халыҡ булыуыбыҙҙы хәтергә төшөрөп кенә торҙолар. Тәүге тапҡыр шундай кимәлдәге ярышта 4-се урын алыуыбыҙҙан һуң "Үҙебеҙҙән бер нисә башҡа юғарыраҡ һикерҙек", тигән һығымта яһаныҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Илшат Нуриәхмәт улының һүҙенә өҫтәп: "Тимәк, үҙегеҙҙән дә юғарыраҡ һикерер өсөн нигеҙегеҙ ҙә, рухығыҙ ҙа, сәмегеҙ ҙә булған", - тип өҫтәйек. Ә баштараҡ ҡуйылған "Ылаҡ уйыны беҙҙең халыҡҡа хасмы?" тигән һорауға яуапты гәзитебеҙҙең әүҙем авторы, философия фәндәре кандидаты, башҡорт тарихын энәһенән-ебенә тиклем өйрәнгән ғалим Зәкирйән Әминев нығытып ҡуйҙы: "Халҡыбыҙҙа ул уйын булған, был хаҡта шикләнмәй яҙығыҙ!"**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**



*Башҡорт егеттәре Ҡытай командаһы менән уйында.*

*✓ Беҙ үҙебеҙ генә ошо феноменды баһалап бөтөрмәйбеҙ һәм милләтебеҙҙең ырыу-ара никах потенциалын файҙаланыу урынына, милләт-ара никахтарға өҫтөнлөк бирәбеҙ. Милләт-ара никахтар иһә, һәр осраҡта ла беҙҙең файҙаға түгел.*

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ҺӨЛДӘЛӘРҘЕҢ ТЕЛЕ БУЛМАҺА ЛА...

## тарихҡа тел асҡысы улар



### Ырыуҙар, йәғни күп төрлөлөк феномены

Һәр бер халыҡтың генетик мәғлүмәтен ҡыҙ-ҡатындар йөрөтһә лә, генетик популяция ирҙәр арҡаһында ҡеүәт йыя. Шул уҡ ваҡытта ирҙәр аша күскән иң көслө үҙенсәлекте, генетик мәғлүмәтте ҡыҙ-ҡатындар үҙҙәрендә алып ҡала. Тап ошо рәүешле көсәйеү арҡаһында беҙҙең башҡорт халҡында биш антропологик тип формалашҡан. Быны 1967 йылда Мәскәү антропологы Мария Степановна Акимова иҫбат итеп: "Башҡорт халҡының генетик фонды төбәктә иң көслөһө, сөнки улар үҙҙәренең ата-олаталарының, сарматтарҙың, савроматтарҙың, уғыҙҙарҙың, ҡыпсаҡтарҙың һәм башҡаларҙың генофондын үҙҙәрендә берләштергән", - тип белдерҙе. Беҙҙең халыҡтың милләт булараҡ көсө лә тап ошонда, сөнки төрлө климат шарттарында йәшәгән төрлө халыҡтарҙың, ҡәбиләләрҙең генетик үҙенсәлектәре беҙҙең халыҡтың генофондын тәшкил итә. Ундай үҙенсәлек төрҙәре беҙҙең ирҙәрҙә йәшәй, ҡыҙ-ҡатындарыбыҙҙа иһә асылда ике генә - Урал һәм боронғо Урта Азия тибы һаҡлана. Ә ирҙәребеҙҙә иһә, ошо ике типтан тыш, көньяҡ Себер, понтик, Алтай, Каспий, Алғы Азия һәм башҡа типтар йыш осрай. Типтарҙың төрлө-төрлө булыуы тоҡомдо көсәйтә, генофондты арттыра.

Аҙаҡҡы өс йөҙ йыл эсендә, бигерәк тә башҡорттарҙың ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, төркмән халыҡтары менән элеккесә киң һәм даими аралашыу мөмкинлеге юҡҡа сыҡҡас, күберәген этник берәмек эсендә генә ҡан аралашыуы күҙәтелә. Шулай ҙа боронғо сарматтар, савроматтар йәшәгән ерҙәрҙә йәшәүсе башҡорттар һаман да иң боронғо генетик кодты йөрөтөүселәр булып иҫәпләнә. Шул уҡ бөрйән, үҫәргән, түңгәүер ырыуҙары башҡорттары көньяҡ Европа расаһының понтик тибына ҡарай. Шулай уҡ ҡыпсаҡтар менән тамъяндар ҙа күберәген европеоид расаһына ҡарай. Көньяҡ Себер тибы, йәғни монголоид расалылар беҙҙең халыҡҡа Алтын Урҙа заманында килеп ҡушылған.

Беҙҙең милләттә ырыуҙарҙың күплеге һәм уларҙың донъяның дүрт тарафы менән бәйле булыуы башҡорттоң этник тотороҡлоғон барлыҡҡа килтереүсе фактор ҙа булып тора. Башҡорт милләте донъялағы бик күп халыҡтарҙың, ҡәбиләләрҙең иң көслө һәм күркәм сифаттарын үҙендә берләштерә алған. Беҙ үҙебеҙ генә ошо феноменды баһалап бөтөрмәйбеҙ һәм милләтебеҙҙең ырыу-ара никах потенциалын файҙаланыу урынына, милләт-ара никахтарға өҫтөнлөк бирәбеҙ. Милләт-ара никахтар иһә, һәр осраҡта ла беҙҙең файҙаға түгел, сөнки милләт-ара никахлы ғаиләләрҙә ҡала шарттарында башҡорт позицияһы көслө түгел. Беҙҙең милләттең милләт эсендәге ырыу-ара никах потенциалы милләтебеҙгә яңы һулыш бирер ине. Бер типҡа ҡараған халыҡтар ҙа бар, уларҙа беҙҙеке кеүек никах потенциалы бөтөнләй юҡ, шуға ла, бигерәк тә Себерҙәге аҙ һанлы халыҡтар араһында, яҡын туғандарҙың өйләнешеүе арҡаһында уларҙың кәгезләнеүе күҙәтелә.

### Антропология нимәгә һәләтле?

Хәҙерге Башҡортостандың административ сиктәре тарихи факторға ҡарап билдәләнмәгән. Бында шундай бер үҙенсәлек хаҡында әйтеп китергә кәрәк: тарихи Башҡортостан ерендә хәҙерге Башҡортостан Республикаһынан ситтә йәшәгән башҡорттарҙың урыҫ халҡы менән сиктәш йә күршеләш булғандары үҙ телен һәм милли рухын һаҡлап ҡала ала, ә Татарстанға күрше һәм Ҡаҙан йоғонтоһонда булғандары яйлап үҙ милли асылынан ситләштерелә. Төрлө сәбәптәр арҡаһында кешенең теле, менталитеты, ғөрөф-ғәҙәттәре, милли аңы үҙгәрергә мөмкин, тик бына антропологик күрһәткестәре үҙгәрешһеҙ ҡала. Ошо факторҙарға ҡарап, антропология фәне, бер ниндәй яҙма сығанаҡтарға таянмайынса ла, ҡайһы төбәктә ниндәй халыҡ вәкилдәре йәшәгәнен аныҡ билдәләй ала. Минең әле ике аспирантым Минзәлә башҡорттары проблемаһы менән шөғөлләнә. Киләсәктә, Алла бойорһа, улар үткәргән ғилми тикшеренеүҙәр аныҡ һөҙөмтәләрен күрһәтәсәк. Уларға ҡарап, саралар проектын да төҙөргә була. Беҙгә, ғалимдарға, боронғо башҡорттарға ҡараған понтик йә Урал тибындағы башҡорттарҙың үҙ асылдарынан ситтә йәшәүен һәр яҡлап аңлатыу, үҙ асылдарына табан юл башлатыу фарыз. Беҙ башҡа милләттәр өлөшөнә дәғүә итмәйбеҙ, бары милли асылын юғалтҡан халҡыбыҙҙың ҙур бер өлөшөнә үҙ тарихын аңлатырға ғына теләйбеҙ. Ысынлап та, баш һөйәгенең теле булмай, әммә күп кенә ғилми асыштар яһарлыҡ, сер ишектәрен асырлыҡ тел асҡыстары була.

Әйтергә кәрәк, көнсығыш Татарстан районларында башҡорт милләтенең боронғо тоҡомдары Минзәлә башҡорттары исеме менән һаман булһа ла йәшәй. Уларҙы үҙ милли асылына ҡайтарып булмаған хәлдә лә, беҙ был тарихи факттан баш тарта алмайбыҙ. Яңыраҡ билдәле тарихсы Әнүәр Әсфәндийәровтың Минзәлә башҡорттары хаҡында бик төплө һәм кәрәкле китабы баҫылып сыҡты. Унда көнбайыш башҡорттары тураһында етди һәм тулы тарихи мәғлүмәт тупланған.

90-сы йылдар башында Палдиски ҡалаһы портында ремонт эштәре барған саҡта төрлө йәштәрҙәге ике кешенең һөлдәһе табылған. Уларҙың аяҡ-ҡулдарында бығау эҙҙәре һаҡланған һәм һөлдәләрҙең Салауат Юлаев менән атаһы Юлай Аҙналиндыҡы булыу ихтималлығы ла әйтелде. Был хаҡта Салауатты өйрәнеүсе ғалимә Инга Михайловна Гвоздиковаға Палдискиҙа хеҙмәт иткән 1-се ранг капитаны әйткән. Ул саҡта Советтар Союзы тарҡалып, элекке союздаш республикаларҙа сыуалыш барған заман ине. Беҙгә был хаҡта еткерҙеләр, миңә лә әйттеләр, тик эстондар беҙҙе унда индерергә теләмәне. Ул һөлдәләрҙе ҡайҙа иткәндәрҙер, берәү ҙә белмәй. Әгәр ҙә ул һөйәктәр табылһа, уның тибын, йәшен билдәләп, М. М. Герасимов ысулы менән һындарын да, йөҙҙәрен дә асыҡларға мөмкин булыр ине. Бығa тиклем бөйөк шағирыбыҙ Шәйехзада Бабичтың баш һөйәген табып, шундай уҡ эштәрҙе башҡарып, уның, ысынлап та, Бабичтыҡы икәнлеген иҫбат иттек бит инде. Был йәһәттән антропологияның мөмкинлектәре бик күп.

### "Башҡорт" атамаһы ҡайҙан?

XX быуат башында Сергей Иванович Руденко башҡорттар араһында ғилми тикшеренеүҙәр үткәреп йөрөгән. Шул ваҡыттан ул төшөргән бик күп фотоһүрәттәр һаҡланып ҡалған. Ғилми күҙәтеүҙәрендә ғалим башҡорттар араһында төрлө антропологик типтар билдәләп үтә һәм был типтарҙы ул фотолар ярҙамында дәлилләй. Шул фотоларҙы ҡарап, ул саҡтағы башҡорттарҙың бөгөнгөләре менән антропологик яҡтан айырылмауы асыҡ беленә. Айырма шунда ғына: йөҙ йыл элек йәшәгән башҡорттар кәүҙәгә бик ҙур, физик яҡтан һау һәм ғәйрәтле булған. Боронғо һөйәктәрҙе өйрәнеү ҙә ошоно раҫлай. Былдай айырмалыҡтарҙың төп сәбәбе, әлбиттә, бар кешелек үҫешенә хас булғанса, боронғо башҡорттарҙың тәбиғәткә яҡын тороуында, экологик яҡтан таҙа тәбиғәт шарттарында үҫеп, меңәр йылдар буйы күнегелгән сифатлы милли ризыҡ менән туҡланыуында.

Сарматтар, савроматтар дәүерендә Дәүҙәр (беҙҙеңсә - алпамышалар) ырыуы йәшәгән. Дәүҙәр, йәғни Дағтар күбеһенсә хәҙерге Төркмәнстанда, Арал диңгеҙе буйында һәм көньяҡ Уралда көн күргән. Уларҙың йылғаһы Яйыҡ (Дәү-ыҡ) булған. Дәүҙәр антропологик яҡтан башҡорттар кеүек каспий, понтик тибына ҡараған. Һәр бер халыҡтың боронғолоғон понтик тибы күрһәтә. Минең фаразым буйынса, беҙҙең милләттең атамаһы төрки яңғырашҡа тиклем "башгурд" булғандыр. Фарсы телендә "бача" бала, тоҡом тигәнде аңлатһа, "гурд" баһадир тип тәржемә ителә. Әгәр ошо ике атаманы ҡушып әйтһәк, "башгурд" "баһадирҙар тоҡомо" тигән төшөнсәне аңлата булып сыға. Башҡорт - баһадирҙар тоҡомо булғас, тимәк, улар Дәүҙәр тоҡомо ла. Дәүҙәрҙе Дағтар-Дактар тип тә атағандар, тинек. Шулай булғас, "иштәк" атамаһы беҙҙең милләттең боронғо атамаһы булып сыға. "Иштәк", тимәк, "Дағтарға иш" йәғни Дәүҙәрҙең, Дағтарҙың тоҡомо. Тимәк, бер үк боронғо дәүерҙә (сарматтар заманы) башҡорттарҙың бер йөкмәткеле ике атамаһы "иштәк" менән "башгурд" төрки дәүергә тиклем бергә йөрөгән.

**Ринат ЙОСОПОВ, тарих фәндәре кандидаты.**

**(Дауамы. Башы 46-сы һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

## БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

Ҡытай сығанаҡтарындағы башҡорттар тураһындағы мәғлүмәттәр боронғо ҡәбиләләрҙең атамаларын "Башҡорт" атамаһына яҡынайтырға тырышыу ғына булып тора. Диҡҡәт менән ҡарағанда, беҙ жуань жуаней тарҡалғандан һуң Урта Азияла төрки ҡәбиләләрҙе берләштереү ваҡытында туған теле ырыуының мөһим роль уйнағанына шаһит булабыҙ. Ҡайһы бер Ҡытай сығанаҡтарында был ҡәбиләне Дили тип атайҙар, көньяҡ Ҡытай диалектында был атама Тиелэ йәғни теле-дили тип әйтелә (И.Бичурин. Халыҡтар тураһында мәғлүмәттәр йыйынтығы... 214-се бит; П.Б.Коновалов. "Үҙәк Азияның этник аспекттары: боронғолоҡ һәм урта быуат". Улан-Удэ, 1999, 92-93-сө биттәр). Бында һүҙ Урта Азия ҡәбиләләре хаҡында бара. Мәҫәлән, төрки ҡәбиәләләр "тие-ле" берлеге араһындағы бер ҡәбилә"башу-ки-ли" тип атала. Профессор Чанг бында башҡорттар хаҡында һүҙ бара тип иҫәпләй. Төрки ҡәбиләләре араһында "башҡорт" этнонимын йөрөтөүселәр иң боронғоһо булып иҫәпләнә. Улар хаҡында тәүге яҙмалар "Суй-шу" Ҡытай хроникаһында һаҡлана. Төрөк ҡағанатының көнбайышында йәшәүсе теле (тегрег) уғыр ҡәбиләләре конфедерацияһында ба-шу-ки-ли ырыуы барлығы атала (З. Вәлиди, "Башҡорттарҙың тарихы"). Бөйөк башҡорт ғалимы З.Вәлиди беҙҙең эраның VII быуатынан башлап ҡыпсаҡ һәм һун ҡәбиләләре составына төрки телдә һөйләшеүсе тиеле-телестар ҙа инеүен дәлилләй.

Тимәк, башҡорттар Гектөрөктәр дәүерендә "толос" ҡәбиләһенә инеп һундарҙың вариҫтары һаналған. "Толос" ҡыпсаҡ ҡәбиләләре Алтай-Иртыш төбәгендә тупланғән. Хәҙерге башҡорттар ҡыпсаҡ төркөмөндәге төрки халыҡ һанала, әммә уларҙың телендә уғыҙ һөйләшенең рефлекстары һаҡланған (А.Б.Моратов, "Ҡытай хроникаһында башҡорттарҙың теле, ата-бабалары", 2012, № 3, 250-252-се биттәр); 207, 81-се бит). Әммә башҡорттарҙың килеп сығышын бер генә тамырға бәйләп аңлатырға тырышыу бәхәсле.

Европаның боронғо тарихсылары: "Башҡорт Урал тауҙарының көньяғында, Иртышҡа яҡын ерҙә йәшәгән", - тип яҙа. Ә Әбелғәзи тарихында башҡорттарҙы уғырҙарға индерәләр. Башҡорттар үҙҙәрен унғарҙар тип атаған. Башҡа фекерҙәр ҙә булған. Ибн Халдундың "Был халыҡ араһында алан, бөрйән, ҡаңлы, бәшәнәк, ҡыпсаҡ, дыуан, әйле, табын һәм башҡа ҡәбиләләрҙең булыуы, һуңынан барыһы ла басжарт тип атала башлауҙары" хаҡында һүҙҙәре иғтибарға лайыҡ. "Был халыҡ Сыңғыҙхандан алдараҡ йәшәгән һәм уның хандары булған. Бер мәлдә башҡорттар Болғар ҡалаһына буйһонған..."

Артабан күренекле башҡорт ғалимы М. Өмөтбаев: "Хәҙерге башҡорт ерендә бик боронғо заманда бөрйән, ҡыпсаҡ ырыуҙары йәшәгән, һуңыраҡ төрөкмән, һарт, үзбәк һәм башҡа ырыуҙар, ҡәбиләләр килгән. Күрәһең, шуның өсөн дә уғырҙар йәғни боронғо башҡорттар, ырыуҙарҙың ошондай күсенеүе барған, етмәһә, Болғар империяһы составында булған саҡта үҙҙәренең милли йөҙөн һаҡлап ҡалыу маҡсатында үҙҙәрен Баш унғар йәки баш уғыр, һуңыраҡ башғур, тағы ла һуңыраҡ башҡорт тип атай башлаған... Ҡырғыҙ-ҡаҙаҡтар, башҡорттарҙың бер ырыу башлығының исеменә бәйләп, уларҙы истәк (иштәк) тип атап йөрөткән".

**(Дауамы бар).**

*✓ Әгәр мәғлүмәткә эйәһең һәм уны ала беләһең икән, ул саҡта инде башҡаларҙан алдараҡ сығаһың. Улай ғына ла түгел, ниндәйҙер ғәмәлдәргә тиҙ һәм һөҙөмтәле яуап бирә алаһың.*

# БЕҘҘЕ КӨТӘЛӘР, ТИГӘН СТИМУЛ БАР ИКӘН...

## тимәк, беҙ Башҡортостанға ҡайтасаҡбыҙ һәм уға хеҙмәт итәсәкбеҙ!

**Бөгөнгө әңгәмәбеҙ геройы Шамил МОТАЛОВ һөнәре буйынса - геолог. Әлеге көндә ул төньяҡ баш ҡалала - Санкт-Петербургта эшләп йөрөй. Беҙ уны Өфөлә ялға ҡайтҡан сағында тап итеп, редакциябыҙға саҡырҙыҡ. Әңгәмәбеҙ, әлбиттә, Санкт-Петербургта уҡып һәм йәшәп ятҡан башҡорт йәштәренең тормошо, уй-фекерҙәре, пландары юҫығында барҙы.**

**▸ Шамил, һинең республикабыҙҙың танылған геологы Минниәхмәт Ғилметдин улының ике туған ҡустыһы икәнеңде белеп ҡалдыҡ. Шундай ғалимдың туғанынан, әлбиттә, ни өсөн ошо һөнәрҙе һайланың, тип һорау урынһыҙҙыр, ләкин үҙеңдең яуабыңды ишетке килә...**

- Дөрөҫөн әйткәндә, геологияға артыҡ ынтылышым юҡ ине, Минниәхмәт олатайым шылтыратып, имтихан алырға киләләр, яҡшы вуз, ҡыҙыҡлы специальностар бар, төплө белем бирәләр, теләгең булһа, имтихан тапшырып ҡара, тип, артыҡ ныҡышмай ғына тәҡдим итте. Мин бер үк ваҡытта документтарымды Өфө дәүләт авиация техник, Өфө дәүләт нефть техник университеттарына тапшырғайным. Күрәһең, олатайым мине үтәнән-үтә күргәндер, барыбер яҙмыш мине ул тәҡдим иткән Санкт-Петербург дәүләт университетына алып китте. Уҡый-уҡый, һайлаған һөнәрем дә оҡшаны. Бәлки, ысынлап та, геологияға ынтылыш беҙҙең ҡанда барҙыр, асылыбыҙҙа яталыр. Бөгөн геология факультетын, төҙөлөш өсөн тупраҡты тикшереүсе инженер геологияһы һөнәрен һайлауыма һис үкенмәйем. Вуз тамамлағас, Санкт-Петербургта ҡалырға тәҡдим иттеләр. Инде алты йыл һөнәрем буйынса эшләп йөрөйөм.

**▸ Һөнәреңдең асылы нимәнән ғибәрәт?**

- Мин эшләгән шәхси компания быраулау, топография менән шөғөлләнә, төҙөлөш өсөн ерҙәрҙе тикшерә. Ошо эшмәкәрлекте алып барған лабораторияла етәксе урынбаҫарымын. Төҙөлөш алып барыласаҡ урындың ентекле анализын эшләйем, төҙөлөш алыр барыу рентабеллеме, түгелме икәнен асыҡлайым.

**▸ Йәштәр өсөн Мәскәү, Питер кеүек ҙур мегаполистарҙа эшләп алып китеүе ауырмы, әллә йәшлек романтикаһы менән тойолмаймы?**

- Ҙур ҡалаларға башҡа төбәктәрҙән күп киләләр, шуға, унда ситтән килгән, урындағы тигән төшөнсә юҡ. Урын алыштырыу, өйрәнеп китеү буйынса проблемалар тыумай. Әлбиттә, бында үҙеңдең тырышлығыңды, маҡсатҡа ынтылышыңды ла оноторға ярамай. Уҡымайһың, һәлкәүләнәһең икән - бер кем дә ғәйепле түгел, барыһы ла үҙеңдән тора. Курсташтарымдың да күптәре икенсе курстан һуң уҡыуын ташланы. Беренсе курсҡа килгәндә егерменән артыҡ кеше инек, уҡыуҙы тамамлағанда 8 кеше тороп ҡалдыҡ. Мәктәпте нисек тамамлауыңа ҡарамаҫтан, вузда уҡыу барыбер ҙә яңы нигеҙҙән башлана. Шуға, бында белемең уҡытыусы өсөн түгел, ә үҙеңә кәрәк икәнен аңлау зарур. Мәктәптә уҡытыусы, уҡы инде, тип артыңдан йөрөй, вузда, киреһенсә, үҙең уҡытыусы артынан йөрөйһөң.

**▸ Ата-әсә ҡуйынында ғына иркәләнеп үҫкән бала ҡапыл сит ергә сығып китһә, ҡаушап та ҡалыуы мөмкин. Сит ҡалаларға уҡырға барған йәштәргә яңы урында адаптация үтеүҙе еңелләштереү буйынса нимәлер эшләргә мөмкинме?**

- Кәләшем Эльвира менән Питерҙа таныштыҡ. Баймаҡ районы Йомаш ауылынан ул сығышы менән. Ул Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатын тамамлаған. Беҙ килгән ваҡытта Питерҙа башҡорт йәштәре әҙ ине, хәҙер яйлап күбәйә башланылар. Шуға, "Аманат" башҡорт йәштәре ассоциацияһын ойоштороп, башҡорттарҙы бергә туплап, саралар уҙғарып, ижтимағи тормоштарын йәнләндереп, әүҙемләштереп ебәрҙек. Сөнки ситтә туған телдә һөйләшеү ҙә, аралашыу ҙа һағындыра. Шулай уҡ йәштәребеҙҙе зыянлы, кире йоғонтоларҙан аралап ҡалырға ла кәрәк. Ә инде ниндәйҙер ярҙам, хуплау булһа, хатта ул рухи ярҙам ғына булғанда ла, икенсе мөхиткә өйрәнеп китеү еңелерәк. Хәҙер инде ойошмаға ете йыл, бергәләшеп эшләп, аралашып йәшәйбеҙ. Спорт саралары - волейбол, футбол, мәҙәни саралар - йыр кисәһе, брейнг-ринг кеүек интеллектуаль уйындар ойошторабыҙ, концерттар ҡуябыҙ, экскурсияларға йөрөйбөҙ. Элек бында Башҡортостандың вәкиллеге була торғайны, хәҙер уны яптылар. Люция Буканова ойошторған яҡташтар ойошмаһы, "Ирәндек" ансамбле, "Башҡортостан" йәмәғәт ойошмаһы менән берлектә эшләйбеҙ.

**▸ Питерҙа өйҙә генә ултырып эшләргә лә мөмкин, Мәскәүҙә тормош ашығып үтһә, Питерҙа ул яйыраҡ бара, тиҙәр. Был ни кимәлдә ысынбарлыҡҡа тап килә?**

- Эйе, Питерҙа тормош темпы бер ни тиклем тынысыраҡ һәм яйыраҡ. Мин ошо йылдар эсендә ошо темпҡа өйрәнгәнмен, Мәскәүгә килһәм, ундағы ығы-зығы бөтөнләй оҡшамай. Ә инде өйҙә эшләүгә килгәндә, фриланс - заманса хеҙмәт баҙарында эшләүҙең яңы режимы ул. Фрилансер - даими офиста ултырыуы талап ителмәгән һәм эш көнө нормаланмаған ситтән тороп эшләүсе хеҙмәткәр. Был ысулды иң элек консультанттар, тәржемәселәр, журналистар, мөхәррирҙәр, фотографтар һәм рәссамдар ҡулланһа, яйлап ул башҡа хеҙмәттәргә лә тарала башланы. Әммә өйҙә эшләү өсөн ҡаты тәртип кәрәк. Аш бүлмәһендә ултырып эш башҡарып булмай, үҙеңдең эш зонаң булырға тейеш. Һәм эш башлар алдынан офисҡа барған кеүек кейенеү, үҙеңде эшкә көйләү мөһим шарт булып тора. Сөнки өйҙә кейеп йөрөгән спорт костюмы һәм өй тапочкалары менән бер нисек тә етди эшкә көйләнеү мөмкин түгел.

**▸ Төҙөлөш өлкәһендә эшләүсе булараҡ, Питерға ниндәй баһа бирер инең - ул күберәген ниндәй менталитетҡа ҡарай?**

- Архитектура буйынса ул Европаға тартым, сөнки Петр Беренсе уны Европа образына тап килтереп төҙөткән һәм ул башҡа ҡалаларҙан айырылып тора. Мәҫәлән, әлеге ваҡытта ла үҙәктә билдәле бер бейеклектән бейегерәк йорттар төҙөмәйҙәр, был закон менән тыйылған. Шуға унда Мәскәү, башҡа ҙур ҡалаларҙағы кеүек, күҙгә бәрелеп торған контраст юҡ. Йәғни, бәләкәй биналар араһынан ниндәйҙер шпиль сығып, панораманы боҙмай. Шуға күрә Питерҙа ниндәйҙер аристократик, үҙенә генә хас аура бар, тип әйтергә лә ҡурҡмайым.

**▸ Башҡоростанда эш юҡ, уныһы юҡ, быныһы юҡ, тигән зарланыуҙар йыш ишетелә. Ә бына ситтә башҡорттарҙы ҡолас йәйеп ҡаршы алып торалармы?**

- Әгәр һин яҡшы, кәрәкле белгес икән, бер ваҡытта ла эшһеҙ ҡалмаясаҡһың. Әгәр ҡулыңдан ҡара эш кенә килә икән, ул саҡта инде берәүҙе лә ғәйепләп булмай, урамда XXI - яңы технологиялар, нанотехнологиялар быуаты. Питерға эшкә килеүселер бик күп, әммә Урта Азиянан эшкә килеүселәр иҫәбенә эшсе һөнәрҙәренә һорау булғанда ла, түләү хаҡы түбәнәйә. Сөнки гастарбайтерҙар арзанараҡ хаҡҡа эшләргә лә риза. Әгәр шундай эшкә дәғүә итәһең икән - мөнәсәбәт тә шундай буласаҡ. Эшең квалификациялы, заман талаптарына тап килә, эш тәжрибәң бар икән, тимәк, юғары баһаға дәғүә итәһең.

**▸ Башҡорттар үҙ баһаһын беләме, әллә бик белеп еткермәйме? Ғөмүмән, башҡорт тип аталған милләттең баһаһы ниндәй булырға тейеш?**

- Үҙ баһаңды белергә тейешлегеңде кешегә бәләкәйҙән һеңдереп үҫтерергә кәрәктер. Ә беҙҙе атай-әсәйҙәр тыйнаҡ булырға өйрәткән, шуға күрә күптәр үҙҙәренең мөмкинлеген баһалап еткермәй. Улай ғына ла түгел, хатта ғәмәлдә мөмкинлегенең сикһеҙ булыуын белмәй ҙә. Был инде талаптарҙың түбәнәйеүенә килтерә. Хатта кеше үҙенә нимә кәрәк икәнен, үҙенең талабын әйтергә лә ҡурҡа, кешеләр араһында ниндәйҙер барьер барлыҡҡа килә. Ғәмәлдә, кеше мөмкинлектәренә бер ниндәй ҙә сиктәр юҡ, сик бары тик беҙҙең мейелә генә. Шуға күрә, үҙеңде иркен тоторға, балала азатлыҡ тойғоһо тәрбиәләргә кәрәк. Был тыйнаҡһыҙ булырға кәрәк, тигәнде аңлатмай, ә баҫылып ҡалырға ярамай. Әгәр баҫылып йәшәһәң, эшеңдең һөҙөмтәһен күрмәҫкә лә мөмкиндәр.

*ШАМИЛ МОТАЛОВ:*

*Заман башҡортона милли рух, тел, дин һәм ошоларҙы тулыландырып тороу өсөн тыуған ер кәрәк. Хатта беҙ, ситтә йәшәгән башҡорттар ҙа, тыуған еребеҙгә ҡайтып, ниндәйҙер көс алабыҙ.*



**▸ Заман башҡорто, һинеңсә, ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш һәм ул сифаттар башҡорттарҙа бармы?**

- Минеңсә, тәү сиратта ул һөҙөмтәле һәм мәғлүмәтле булырға тейеш. Сөнки бөгөн мәғлүмәт бик күпте хәл итә. Мәҫәлән, нимәнелер белмәйһең икән, тимәк, бер аҙым артта бараһың. Әгәр мәғлүмәткә эйәһең һәм уны ала беләһең икән, ул саҡта инде башҡаларҙан алдараҡ сығаһың. Улай ғына ла түгел, ниндәйҙер ғәмәлдәргә тиҙ һәм һөҙөмтәле яуап бирә алаһың. Шуға күрә, мәғлүмәткә эйә булырға һәм уның менән эш итә, уны үҙ файҙаңа ҡуллана белергә кәрәк.

Заман башҡорто үҙен һәм эшен күрһәтә белергә тейеш. Сөнки ниндәйҙер проектың

✓ *Үҙ ҡаҙанында ҡына ҡайнау ҙа насар, сөнки һәр төбәктең үҙ кимәле була. Башҡортостан вуздарында белем алыуҙың билдәле бер кимәле бар, шунан артыҡты алып булмай. Мәскәүҙә һәм Питерҙа - был кимәл юғарыраҡ.*



булһа йәки ул тыуып ҡына килһә, уны башҡаларға матур итеп күрһәтеү зарур. Бында ла мәғлүмәт ҙур роль уйнай. Әммә бөтә өлкәлә лә яҡшы белгес булып булмай икәнен күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Ләкин үҙең кешегә тәҡдим иткән хеҙмәт өлкәһендә яҡшы белгес булыуың мотлаҡ. Әгәр үҙ өлкәңдә иң яҡшы белгес икәнһең, был бөтөн нәмәне лә аҙаҙлап белгәнгә ҡарағанда, күпкә һөҙөмтәлерәк һәм яҡшыраҡ.

Шулай уҡ заман башҡортона милли рух, тел, дин һәм ошоларҙы тулыландырып тороу өсөн тыуған ер кәрәк. Хатта беҙ, ситтә йәшәгән башҡорттар ҙа, тыуған еребеҙгә ҡайтып, ниндәйҙер көс алабыҙ. Сарсағанда һыуһап килеп йәншишмә һыуын эскәндәй, тын етмәгәндә саф һауа һулағандай булабыҙ. Туғандар менән аралашыу, тәбиғәткә сығыу алға барыу өсөн импульс бирә. Башҡорт теле, тарихы һ.б. тураһында әйтеп тормағанда ла була, сөнки был төшөнсәләр һәр башҡорттоң ҡанында ятырға тейеш. Беҙгә бары тик үҙ телебеҙҙә һөйләшергә, уны балаларыбыҙға өйрәтергә, тарихыбыҙҙы башҡа халыҡтарға танытырға, ер йөҙөндә башҡорт тигән милләт тә булыуын иҫтәренә төшөрөп торорға кәрәк.

Сит илдәрҙә генә түгел, хатта Санкт-Петербургта ла башҡорттарҙы, Башҡортостанды белмәйҙәр, ул ҡайҙа урынлашҡан, Рәсәй составындамы, юҡмы тип һорайҙар. Ә бит Рәсәйҙә башҡорттар халыҡ һаны буйынса дүртенсе урында тора, әммә башҡорттар тураһында бик аҙ беләләр. Шуға ла беҙ мөмкин тиклем халҡыбыҙҙы күрһәтергә-презентацияларға тейешбеҙ һәм шуға ынтылабыҙ ҙа...

**▸ Элегерәк башҡорттарҙын һанын арттырыу, уларҙы күбәйтеү өсөн ауылдарҙы һаҡларға, саҡ ҡына һуңыраҡ йәштәрҙе ҡалаға ылыҡтырырға, тигән фекерҙәр йәшәй ине. Бөгөн йәштәр ситкә китергә, сит илдәргә сығырға, белем алғандан һуң сит ҡалаларҙа ҡалырға тырыша. Ниндәйҙер кимәлдә аҡылдың ситкә ағылыуы күҙәтелә. Был беҙҙең милләтебеҙгә, Башҡортостанға зыян итмәйме?**

- Үҙ ҡаҙанында ҡына ҡайнау ҙа насар, сөнки һәр төбәктең үҙ кимәле була. Башҡортостан вуздарында белем алыуҙың билдәле бер кимәле бар, шунан артыҡты алып булмай. Мәскәүҙә һәм Питерҙа - был кимәл юғарыраҡ, сөнки уҡытыусылар ҙа, мөмкинлектәр ҙә, үҙ өлкәһендә алдынғы булған кешеләр ҙә күберәк. Һәм һин унда тап ошо юғарыраҡ, артығыраҡ, күберәк белем артынан барыуыңды белеп, аңлап юлланаһың. Әгәр үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнаһаң, кимәл шул бер урында ҡатып ҡаласаҡ. Шуға күрә, ситкә китеүҙә бер ниндәй ҙә хилафлыҡ күрмәйем, иң мөһиме - кире ҡайтыу һәм Башҡортостанға хеҙмәт итеү өсөн стимул булһын. Ундай стимул юҡ, бер нәмә лә тартып тормай, уҡыған ереңдә ныҡлы урынлашҡанһың һәм бында ҡайтып, яуланған ҡаҙаныштарыңдан түбәнерәк һөҙөмтә алаһың икән - был ысынлап та проблема. Әгәр кире ҡайтыу һәм республиканы күтәреү стимулы бар - һине көтәләр, һине ҡабул итергә әҙерҙәр, һиңә әлеге ваҡытта яулаған уңыштарың кимәлендә эш тәҡдим итәләр, шарттар насар түгел икән - йәштәр шул ваҡытта кире ҡайтасаҡ. Әлеге ваҡытта йәштәр ситтә ҡалыуҙы хуп күрә һәм бында бер ниндәй зыян күрмәйем, сөнки яҡшы белгестәр ситтә лә республика, милләт данын күтәрә, уны таныта, яҡшы фекерҙәр ҡалдырыуы менән реклама яһай.

**▸ Ололарҙа рух өҫтөнлөк итһә, йәштәр барыбер прагматик, улар үҙҙәренә баһаны белә һәм аҡылын бушҡа йәки идея өсөн "һатмай", тигән фекергә ҡарашың нисек?**

- Шулай булырға, хеҙмәт лайыҡлы баһаланырға тейеш һәм был дөрөҫ тә. Әгәр үҙеңдең хеҙмәтеңде түбән баһалайһың, ә ғәмәлдә ул ҡиммәт тора икән, тимәк, һин үҙең зыян күрәһең. Хеҙмәтеңде тәңкәләштерә, йәғни тейешле хаҡ ала алмаһаң, был һинең үҙең өсөн насар. Ҡыҫҡаһы, үҙеңде, ғаиләңде ҡарай алмайһың икән, 11 йыл мәктәптә, 5 йыл вузда уҡып, ваҡыт әрәм итеп кенә йөрөгәнһең, булып сыға бит. Бында ике генә сәбәп булыуы ихтимал: йә һин шул тиклем насар уҡығанһың, хатта ҡулыңдан бер эш тә килмәй, йә һинең эшеңде бигерәк түбән баһалайҙар.

Мәктәп, вуз белеме - улар нигеҙ белем генә, артабан инде һин бөтөн йүнәлештәрҙә лә үҙ аллы үҫергә, үҙеңде камиллаштырырға тейешһең. Шәхес булараҡ та, финанс йәһәтенән дә, ғаилә мөнәсәбәттәрендә лә. Әгәр ғаиләңдә даими низағтар сығып торһа, үҙ-ара аңлашыу булмаһа, был да шәхси үҫешкә генә түгел, финанстарға ла йоғонто яһай. Бөгөнгө тормошта шәхес булараҡ үҫеш-финанстар - ғаилә өсмөйөшө бер-береһенә тығыҙ бәйләнгән. Әгәр ошо звеноның ҡайһылыр өлөшө аҡһай икән, ошо өс өлкәлә лә проблемалар башлана. Финанс өлкәһендә проблемаң тыуһа, - ғаиләңдә проблемалар барлыҡҡа киләсәк, ғаиләңдә проблемалар башланһа, үҙеңде шәхес булараҡ үҫтерә алмаясаҡһың. Ошоларҙың барыһын да нормаль ағымға һалмайынса, алдыңа ҡуйған маҡсаттарыңа өлгәшеү мөмкин түгел. Ә маҡсаттың иң ҙурын ҡуйырға кәрәк, ул артабан үҫергә стимул булып торорға тейеш. Әгәр маҡсатың бар икән, һин ағым ыңғайына бармаясаҡһың, ә планға ярашлы үҫәсәкһең, тренингтарға йөрөйәсәкһең, ошо өлкәләге иң яҡшы белгестәр менән аралашасаҡһың. Шул ваҡытта ғына үҫеш күҙәтеләсәк, шул ваҡытта ғына баһа артасаҡ, шул ваҡытта ғына үҙеңде күрһәтә аласаҡһың һәм һине күрәсәктәр...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һуңғы ваҡытта республиканан ситкә китеп белем алған йәштәребеҙ күбәйҙе. Был хәл менән риза булмау, ситкә китәләр һәм яңынан әйләнеп ҡайтмайҙар, тигән юҫыҡтағы хәбәрҙәр ҙә ҡуйырып тора. Әлеге әңгәмәсебеҙ Шамил Моталовтың һүҙҙәре был хәүефләнеүҙәргә яуап та булып яңғырай шикелле: "Әгәр кире ҡайтыу һәм республиканы күтәреү стимулы бар - һине көтәләр, һине ҡабул итергә әҙерҙәр, һиңә әлеге ваҡытта яулаған уңыштарың кимәлендә эш тәҡдим итәләр, шарттар насар түгел икән - йәштәр шул ваҡытта кире ҡайтасаҡ..." Йәштәр бына шулай уйлай...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

*ЕТМЕШ ҺӨНӘРЛЕ...*

# ИР-ЕГЕТ ДӘРӘЖӘҺЕ...

## оҫталығында

**Бөгөнгө етмеш һөнәрле ир-егет - Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылында тыуып үҫеп, әлеге көндә Сибай ҡалаһында йәшәүсе, интернат-гимназияла уҡыусыларға физкультура серҙәрен төшөндөрөүсе уҡытыусы, тренер, көрәшсе Хөрмәт Зөбәйер улы Таһиров булыр. Гәзитебеҙҙең 46-сы һанында Күсәрбай Аҡсулпанов кубогына үткәрелгән республика мәргәндәре турниры тураһында яҙылған "Мәргән уҡсылар тағы майҙан тотто" исемле мәҡәләбеҙҙә алдағы һандарҙа Хөрмәт Зөбәйер улы менән әңгәмә вәғәҙәләгәйнек. Вәғәҙә - иман.**



- Уҡты бала саҡтан атабыҙ уны, - тип, тәмләп, алыҫтан башланы һүҙен Хөрмәт Таһиров. - Һаҡмар буйынан ҡайтышмай торғайным: йә яр буйлап барам-барам да, осоп үткән ҡыр өйрәктәренә тап булһам, уларға атып ятып ҡалам. Тейһә - тейә, теймәһә - юҡ. Йә, ҡамышлыҡ араһында барҡылдап йөрөгән өйрәктәргә ипләп кенә яҡынлайһың, йә бер урында тик кенә ултырып, уларҙы аңдыйһың - уңайы сығыу менән атып ебәрәһең. Минән күреп, ҡайһы бер иптәш малайҙар ҙа уҡ атыу менән ҡыҙыҡһына торғайны. Ләкин минең һымаҡ ныҡлап ылығыусылар булманы.

Был эштә ныҡышмаллыҡ та кәрәк - һынған, иҫкергән ян урынына яңынан эшләү хәстәрен күрмәһәң, булмай. Һөҙөмтәле атыу өсөн яныңдың бөгөлөүсән дә, ныҡлы ла булыуы шарт. Ағас кипһә, һына башлай. Бала саҡтан ошо уҡ-ян юна-юна, ағас эшенә лә ҡыҙыҡһыныуым барлыҡҡа килгәндер. Хәҙер ҙә уҡ-ян эшләйем мин. Уҡ башаҡтарын - тимерҙән, янды - ҡайындан да, муйылдан да, имәндән дә, хатта ҡоростан да эшләгәнем булды. Һаҡмар буйында ҡыр өйрәктәренә йөрөүем эҙһеҙ үтмәгәндер, хәҙер арҡама ҡалъянымды артмаҡлап, ат менеп, урман-тауҙар ҡыҙырырға, һаҙағыма алыуға уңайлы ғына итеп һалынған уҡтарҙы берәм-берәм алып, атырға яратам. Хәтәр күренеш ул. Шул саҡта боронғо ата-бабаларыбыҙҙың ниндәйерәк хистәр кисереүен аңлағандай булаһың. Бер сығып китһәм, алыҫ араларҙы бер итеп, йөрөп әйләнәм. Атҡа ла - хәрәкәт, миңә лә - хөрриәт.

Әйткәндәй, уҡ бик көслө ҡорал ул. Барып сыҡһаң, ҡыуа-ҡыуа арытып, төлкөһөн дә, бүреһен дә алырға була. Әлеге януарҙарҙы минең дә алғаным булды. Һунарҙа һиҙҙермәй һөжүм итеү уңыш килтерә. Бының өсөн мин бейек, төҙ ағасҡа менеп, русса "лабаз самолаз" тип аталған һәндрә формаһындағы махсус ҡоролмаға аяҡты һәлендереп ултырып алам да, ҡош-ҡорт аулайым. Баяғы "ултырғыс"ты интернеттан өйрәнеп, тимерҙе иретеп-йәбештереү юлы менән үҙем эшләп алғайным. Магазиндан алғансы, ундай кәрәк-яраҡты үҙем эшләү яғындамын. Хаҡы ла кеҫәгә һуҡмай, ныҡлы ла килеп сыға - сифаты өсөн дә борсолмайһың.

Минең мылтыҡ менән түгел, ә уҡ менән генә һунарға йөрөүемә ҡайһы берәүҙәр ышана һалып та бармай. Һүҙҙәремдең дөрөҫлөгөн бер генә факт менән дәлилләй алам: быйыл сентябрҙә Ғафури районында үткән "Мәргән уҡсы" традицион уҡ атыусылар фестивалендә икенсе урын яулауымды һеҙ ҙә яҙып сыҡҡайнығыҙ. Омскиҙан килгән егетте лә еңер инем - аҙ ғына ҡабаланыңҡыраным шул. Унан ҡалышыуымды бик ауыр кисерҙем... Ошондай уйындар, бөгөнгө шәп яндар берәй мәл беҙгә лә килеп етер, тигән ышанысым бөгөн аҡланып тора. Бик һәйбәт башланғысҡа теләп ҡушылдым. Гимназияла уҡ атыу түңәрәге ойоштороп ебәрҙек. Балаларға күнекмә үткәрәм. Быға саҡлы көрәш түңәрәген алып барған булһам, уҡ атыу түңәрәген башлап ебәргәс, көрәшселәремдең күбеһе уҡ атыу менән ҡыҙыҡһынып китте. Өфөгә әлеге ярышҡа алып килгән Шәйнур Баймырҙин, мәҫәлән, көрәш буйынса Рәсәй чемпионы. Быйыл мартта Ҡаҙанда үткән Рәсәй беренселегендә чемпион титулын яулап ҡайтты.

Рубрикағыҙҙың үҙенсәлеген иҫәпкә алып, үҙемдән йәнә өҫтәйем әле: көрәш менән дә ныҡлап ҡыҙыҡһындым мин. Ике тапҡыр "Бөрйән батыры" республика ярышында еңеп сығырға тура килде. Свердловск өлкәһенең Үрге Пышма ҡалаһында үткән Урал чемпионатында республика данын яҡлап, чемпион булдым. 2-3 йыл рәттән республика йыйылма командаһы составында булдым, бер тапҡыр - Рәсәй чемпионы, 3 тапҡыр Рәсәй призеры булдым. Республика чемпионаттарында гел тәүге урындар яулау бәхетенә ирештем. Көрәшселәрем менән бәйле бер ҡыҙыҡ хәлде лә һөйләп үтәйем. Беҙҙең менән ярыштарҙа йөрөгән бер көрәшсе ағай йыш ҡына миңә шылтыратып: "Хөрмәт, эргәләге егеттәргә минең һине берҙе еңеүем тураһында әйт әле, атыу егеттәр ышанмай", - тип, минән дәлил һорап, бер була. Эш шунда: мин унан берҙе генә лә еңелгәнем юҡ. Шунлыҡтан гел: "Еңелмәгәс, ҡайһылай тип әйтәйем инде", - тип ҡотола киләм. Ағай үпкәләп китә. Хәйер, ағайҙың үҙенә бер үпкәм дә юҡ. Был һүҙе менән ул минең дәрәжәне күтәрә бит.

Дәрәжә тигәндәй, ир-егеттең дәрәжәһе уның майҙан батыры булыуында бер һыналһа, ҡулының оҫталығында - мең һынала. Эш тигәндә, ҡурҡып торған эшем юҡ, Аллаға шөкөр. Нимәгә тотонһам да, килтереп сығарырға тырышам: мейесен дә сығарам, ҡыйығын да ябам, тигәндәй...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө ҡыҫҡа ғына әңгәмәлә Хөрмәт Зөбәйер улының бөтөн һөнәрҙәрен һанап бөтөү мөмкин булмауы һәр кемгә мәғлүмдер. Беҙҙең маҡсат - геройыбыҙҙың һөнәрҙәренең етмешен дә түгел, ә етеһен һүрәтләп, башҡорт ир-азаматының милли һыҙаттарын асыу ине. Хөрмәт Таһиров йөҙөндә ысын башҡорт ир-уҙаманы сағылыш табыуына гәзит уҡыусыларыбыҙ ҙа инанғандыр.**

**Илгизәр БУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

***✓ "Күңелле йәшәйбеҙ", уның режиссеры Руслан Юлтаев беҙҙең театр өсөн оло табыш. Егәрле егет, проекттары ла күп, әле бына яңы ғына Мәскәүҙә, "Лучезарный Ангел" Халыҡ-ара кинофестивалендә махсус призға лайыҡ булды.***

# ИЖАД ИТЕР

## Стәрлетамаҡ

**Театрына ҡарап, милләттең мәҙәниәт кимәле тураһында һүҙ йөрөтөргә мөмкин, тиҙәр. Был йәһәттән республикабыҙ тамашасылары бәхетле, һәр төбәктең үҙенең генә күҙ төбәп торған театры бар. Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театры ла күптән инде тамашасының яратҡан мәҙәниәт усаҡтарының береһенә әүерелгән. Ошо көндәрҙә үҙенең 25 йыллыҡ юбилейын билдәләгән театр бөгөн ниндәй уйҙар менән йәшәй? Ошо хаҡта театрҙың художество етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Илһам РӘХИМОВ, Башҡортостандың халыҡ артисы Рафиға ҒӘЛИНА, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Азамат ХӘЛИЛОВ менән әңгәмәләшәбеҙ**

**➔ Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрының ишеген тәүге тапҡыр асып ингән көнөгөҙҙө хәтерләйһегеҙме?**

**Р. Ғәлина:** Мин Салауат дәүләт башҡорт театрынан кескәндә театрҙа Гөлдәр Ильясова менән Кинйәбикә Исламғолова ғына бар ине. Автобуста Гөлдәр Мозафар ҡыҙын күрҙем дә, Стәрлетамаҡта театр асып йөрөүҙәрен белеп: "Берәй әбей роле булһа, саҡырығыҙ", - тип шаярттым. Әбей ролен һорауымдың этнәкәһе шунда: оҙаҡ ҡына сирләп алғайным. Табиптар бер аҙ ауырлыҡ йыйырға кәрәк, тигәс, мин бер мәл һимерей киттем. Шуға ла артабан ҡыҙҙар роле тураһында хыялланыу ҡайҙа! Уйлап ҡараһаң, миңә бары 39 йәш кенә булған. Гөлдәр Ильясова һүҙендә торҙо, уҡып сығырға тип пьеса ебәрҙе. Ысынлап та, ҡаҙаҡ драматургы Дулат Исабековтың "Көтәр кешем бар минең" тигән әҫәрендә миңә әбей роле тәҡдим итәләр ине. Миңә бик оҡшаны Сәлиха әбей роле.

Ул мәлдә шундай күңел күтәренкелеге кисереп йөрөнөк эшкә. Мин иртән Салауаттан киләм, кис Салауатҡа ҡайтып китәм. Актерҙар етешмәһә лә, репетицияларҙы башлап ебәрҙек. Тора-бара Стәрлетамаҡҡа Өфөнән Илшат Йомағолов күсеп килде. Ул беҙгә әллә күпме һабаҡтар бирҙе. Беренсе спектаклдә актер Таһир Искәндәров, "Стәрлетамаҡ эшсеһе" гәзитенән журналист Фаяз Йомағужин, Рәмил Ғимрани, режиссер ярҙамсыһы булып килгән Ләйсән Кәримова, Гөлдәр Мозафар ҡыҙы үҙе уйнаны. Ләйсән аҙаҡ Салауат театрында уйнап йөрөп, төрлө исемдәргә лайыҡ булып, кире беҙҙең театрға ҡайтты. Минең тормош иптәшем, Башҡортостандың халыҡ артисы Рауил Гәлин бер миҙгел Салауатта уйнаны ла, шулай уҡ Стәрлегә күсте. Премьерабыҙ 1991 йылдың 7 апрелендә, рус драма театры сәхнәһендә булды, сөнки беҙҙең театрыбыҙ ҙа ошо бинала төпләнгәйне. Рус театры директоры Анатолий Полянкин күп ярҙам итте беҙгә. Шунда студия асып ебәреп, артабан үҫеп киттек, унан йәштәр йыйыла башланы.

**И. Рәхимов:** Беҙ Азамат менән Өфө дәүләт сәнғәт институтын 1991 йылда тамамланыҡ, Башҡорт академия драма театры өсөн әҙерләйҙәр ине беҙҙе. Һуңғы курста уҡып йөрөгәндә беҙ күмәкләшеп Салауат башҡорт драма театрының Флорид Бүләков әҫәре буйынса ҡуйылған "Атылған өйөр" спектаклен барып ҡараныҡ. Илшат Йомағоловтың уйнауы, режиссер Гөлдәр Ильясованың үҙенсәлекле алымдары ныҡ оҡшаны, бер асыш кеүек ҡабул ителде. 1991 йылда Стәрлетамаҡта башҡорт театры асылды. Һәм беҙ, сығарылыш курс студенттары, Стәрлетамаҡ театрына эшкә барыу теләге менән янып йәшәнек. Ҡулыбыҙға диплом алып төрлөбөҙ төрлө яҡҡа таралып, курстан бер үҙем тәүҙә театрға килеп төшһәм дә, айлап Фәим Әхмәтйәнов, Зөлфиә менән Азамат Хәлиловтар, Физәлиә менән беҙ ғаилә ҡороп, Стәрлетамаҡта төпләнеп алдыҡ. Ейәр ризығыбыҙ, эсер һыуыбыҙ, ижад итер еребеҙ ошонда булғандыр ине. Беҙҙең өсөн бөйөктән бөйөк артист Илшат Йомағоловтың абруйы ла тартты. Һуңғараҡ театрҙан китһә лә, гел беҙҙең арала йөрөр ине. Стәрлетамаҡ мәҙәниәт техникумында махсус курс уҡытып сығарҙы. Уларҙың дүртәүһе - Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Айгөл Зөбәйҙуллина, Гөлнара Йәрмиева, Таһир Фәтҡуллин бөгөн дә театрҙа, уның иҫтәлеге, аманаты булып эшләп йөрөйҙәр.

**А. Хәлилов:** Минең дә бында эшкә килеүемдең сәбәпсеһе - Илшат Йомағолов. М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында эшләп йөрөйөм, бер килде был, ике килде, барыһы ете тапҡыр килде - ҡоҙалай Стәрлетамаҡ театрына. Һуңынан фатир асҡысы тоттороп, Таһир Искәндәровты миңә яусы итеп ебәрә башланылар. Заманы шулай ине бит инде. Өфөлә прописка юҡ, бар нәмә талон менән һатыла. Зөлфиә Салауат театрында эшләй ине, шуға ла, ҡайҙа төпләнергә, тигән һорау килеп сыҡҡас, Стәрлетамаҡты һайланыҡ. Тура фатирға килеп инеп йәшәп китеү йәш ғаилә өсөн ҙур бәхет ине. Шулай итеп, Өфө йәйләп сит ҡалаға әүерелде. Стәрле театрына өйрәнеп китеүгә ролдәр ҙә булышлыҡ иткәндер инде. 90-сы йылдар күңелле бер дәүер булып хәтерҙә ҡалған, спектакль артынан спектакль сығара инек. Академтеатрҙан Шәүрә Дилмөхәмәтова менән Әхмәр Әхмәҙуллин, Әхәт Хөсәйенов, Хәмит Яруллин килделәр. Өфөнө һағыныу тигән нәмә онотолдо, сөнки ундағы шәхестәр менән ундағы ижади мөхит үҙе күсеп килгәндәй булды.

**Р. Ғәлина:** Салауат театрынан Ниса менән Фларид Бакировтар, һуңғараҡ - 1996 йылда Сибай башҡорт дәүләт драма театрынан Рәмзиә Ҡудашева менән Әсғәт Йәнбәков килделәр һәм беҙ ғаилә парҙары эшләгән театрға әйләндек. 1992-1993 йылдарҙа актерҙар составы тулыланып бөткәс, театр тағы ла яңы һулыш кисерҙе. 1994 йылда "Театр яҙы" республика фестивалендә Флорид Бүләковтың "Онотолған доға" спектакле Салауат Юлаев дәүләт премияһына лайыҡ булды. Унан һуң төрлө йылдарҙа Башҡортостан, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Төркиәлә үткән фестивалдәрҙә ҡатнашып, юғары баһалар алдыҡ.

**➔ Ысынлап та, асылған көнөнән үк Стәрлетамаҡ башҡорт театры үҙенә генә хас ижади йөҙө, ижади атмосфераһы менән йәлеп иткәйне тамашасыны. Театрығыҙ тағы ла ғаиләләр күплеге менән дә айырылып тора, ахыры?**

**И. Рәхимов:** Эйе, беҙҙең театр коллективында ғаиләле парҙар күп. Беҙҙең балалар ҙа ошо театр мөхитендә үҫеп, театрҙың гәзиз балалары булып бөткән. Мәҫәлән, Азамат менән Зөлфиәнең өлкән ҡыҙы Зилиә бөгөн Башҡорт дәүләт академтеатрында эшләп йөрөй, уны беҙ үҙебеҙҙең ҡыҙыбыҙ кеүек күрәбеҙ, уның өсөн шатланабыҙ. Ул да беҙҙе шул тиклем яҡын күрә.

**А. Хәлилов:** "Кәләш менән тәүлегенә 25 сәғәт бергәбеҙ", тип шаяртһам да, был беҙҙең икебеҙ өсөн дә ҡулай. Беребеҙ театрҙа, икенсебеҙ икенсе өлкәлә эшләһә, аңлашып йәшәүе ауыр булыр ине, тип уйлайым. Балалар менән бергәләшеп гастролдәрҙә йөрөүе, бергәләшеп эшкә сығып китеп, бергәләшеп ҡайтып инеүе үҙе бер ғүмер бит ул. Ғөмүмән, театр урынында ғына ултырырға тейеш түгел, ул халыҡ араһында булырға тейеш. Ярай, беҙҙең быуынға ҡунаҡханалар эләкте, гастролдәрҙә лә улай айҙар буйына йөрөмәйбеҙ. Ә бына өлкән быуын артистарына һәйкәл ҡуйырға кәрәк.

**Р. Ғәлина:** Әсғәт Йәнбәков Стәрлетамаҡҡа эшкә килгәс, нишләп гастролгә сыҡмайбыҙ ул, тип аптырай торғайны. Әлек бит ҡара яҙҙан ҡара көҙгә тиклем өҙләкһеҙ гастролдәр булды. Баланы коляскаға һалып, ике ултырғыс араһына ҡуйыбыҙ ҙа, гастролгә сығып китә инек. "Уралец" автобустарына пырылдап саң инә, етмәһә. Бала менән фатирға төшөрмәскә тырыша халыҡ. Бигерәк тә Сибай театры менән Салауат театры күп йөрөнө халыҡ араһында. Бында ла ҡала бәләкәй, беҙҙең ижадыбыҙ ҙа, тормош-көнкүрешебеҙ ҙә халыҡтың күҙе алдында. "Күңелле йәшәйбеҙ" тигән проект актерҙарҙы билдәле итте. Берәй ҡайҙа спектакль менән барып төшһәң, унда уйнаусыларҙы танып торалар.

**И. Рәхимов:** Ауылдарҙа беҙҙе яҡынса ошолай ҡаршы алалар: "Тәк, быны таныйым, быны таныйым, быны таныйым, ә ниңә һине "Күнелле йәшәйем"гә төшөрмәйҙәр, бына һине танымайым?" Ысынлап та, "Күңелле йәшәйбеҙ", уның режиссеры Руслан Юлтаев беҙҙең театр өсөн оло табыш. Юлтаевтар театрыбыҙҙың тағы бер ғаилә пары, актрисабыҙ Зиләрә Юлтаева менән ғаилә ҡороп, беҙҙең театрҙа төпләнеп ҡалдылар. Егәрле егет, проекттары ла күп, әле бына яңы ғына Мәскәүҙә, "Лучезарный Ангел" Халыҡ-ара кинофестивалендә "Өс хат" фильмы "Милли кинематографты үҫтергән өсөн" тигән махсус призға лайыҡ булды. Үҙе лә ялҡауланмай, беҙгә лә ялҡауланып китергә ирек бирмәй, үҙебеҙ ҙә һиҙмәй ҡалабыҙ нисек итеп уның идеяларына ҡушылып киткәнебеҙҙе.

**➔ "Күңелле йәшәйбеҙ"ҙә лә ирле-ҡатынлы булып, ғаилә менән уйнауҙың берәй сере бармы?**

**И. Рәхимов:** Бында беҙҙең киностудия юҡ, тимәк, эшләү өсөн майҙандар юҡ. Ә проекттар тиҙ-тиҙ эшләй торған, уларҙы оҙон-оҙаҡҡа һуҙып булмай,



# ЕРЕБЕҘ...

## булғандыр

тимәк, ниндәйҙер уңайлыҡтар эҙләп йөрөргә мөмкинлек юҡ. Мөмкинлек булһа, икенсе ергә барып төшөр инек. Былай ҙа театрҙағы грим бүлмәләрен, кабинеттарҙы ҡулланабыҙ, әммә бында фатир ҡороп булмай бит. Шуға ла был режиссерҙың бер хәйләһе тиергә лә була. Ә проекттың әһәмиәтенә килгәндә, уларҙы күргәс, халыҡ иң тәүҙә, әһә, башҡорт телендә төшөрөлгән сериалдар бар икән дә, тип уйлай. Унан ғына унда күтәрелгән темаларға, уларҙың тәбиғәүи-әхлаҡи әһәмиәтенә иғтибар итә башлайҙар. Шуға ла "Күңелле йәшәйбеҙ", башҡа сериалдар тамашасыға ла, беҙҙең театрға ла кәрәк һәм әлегә ошондай шарттарҙа булһа ла уны төшөрөүҙе дауам итеү мөһим, тип иҫәпләйем. Унан һуң, сәнғәттә баш ҡала, төпкөл тигән төшөнсәләр юҡ, сөнки сәнғәттең сиктәре юҡ. Беҙ үҙ ҡалабыҙҙың патриоттары һәм беҙ үҙ эшебеҙҙе күрһәтергә тейешбеҙ.

**А. Хәлилов:** Сәнғәттең бер төрө булараҡ, милли театрҙарыбыҙ күп икән, халыҡтың мәҙәни кимәле лә күтәрелә. Шуның кеүек, башҡорт телендәге кино ла мәҙәниәтебеҙҙе үҫтерә. Башҡортостан юлдаш каналынан киске туғыҙҙан һуң сит ил киноһы ҡарап ултырһа ултыра ул кеше, тик башҡорт киноларынан ек табып, көлөргә генә тора. Сит ил кинолары өсөн телевизорҙа тағы ла 300 канал бар.

**➔ Үткән быуаттың 90-сы йылдар башында тотош ил мәҙәни көрсөк кисергән мәлдә Стәрлетамаҡта башҡорт театры асылыуы оло батырлыҡ булғандыр. Бөгөн театр менән филармония берләшеп көн күрергә мәжбүр. Был сәнғәт усаҡтарына ҡыйынлыҡтар тыуҙырмаймы?**

**И. Рәхимов:** Беҙҙең берләшеп эшләүгә хәҙер өс йыл үтте, баштағы ҡытыршылыҡтарҙы енеп сыҡтыҡ һәм хәҙер үҙ-ара аңлашып ижад итә торған мәл тыуҙы, тип иҫәпләйем.

**А. Хәлилов:** Һәр театрҙың үҙенең юғарыға күтәрелгән, түбән төшкән дәүерҙәре була, тормош бит был. Касандыр беҙ ҙә балҡып киттек, спектакль өҫтөнә спектакль эшләнек, ниндәй генә фестивалдәрҙә булманыҡ һәм быларҙың барыһына ла аҡса табыла ине. Артист ҡыҙыҡ кеше бит ул. Мәҫәлән, завод эшсеһе эштән эш аҙыраҡ тәтегәненә ҡыуанып ҡайта, йәки эшкә барғанда уҡ, бөгөн эш булмаһа ярай ине, тип теләй. Артист иһә, минә эш, роль бирегеҙ, тип даулап йөрөй. Быйыл спектакль ҡуймайбыҙ, аҡса юҡ, тигәнде аңлауы ла ҡыйынылраҡ ине. Тамашасы ла аңламай быны. Шуға ла яҡты киләсәккә ышанабыҙ.

**Р. Ғәлина:** Театрыбыҙға йәштәр ҙә күп килгәйне, хәҙер улар кәмей бара - шул да борсой мине. Театр асылғанда актерҙарҙы фатир әҙерләп көтөп тора алһалар, хәҙерге йәштәргә ятаҡ та табып булмай. Шуға ла йәштәребеҙ таралып бөтөп бара. Уларҙы алып ҡалыр мөмкинлектәребеҙ юҡ.

**А. Хәлилов:** Театр өсөн бөтөн быуын артистары ла кәрәк. Мәҫәлән, минең һаҡал йәбештереп, ҡартты уйнауым - бер, ә өлкән артистың уйнауы бөтөнләй икенсе. Былай ҙа юғалтыуҙар күп кисерҙек, Рәмзиә Ҡудашева, Әсғәт Йәнбәков, Илдар Сафин, Илшат Йомағолов, Хәмит Яруллин, Фларид Бакиров был донъяла юҡ - бер театр өсөн улар ҙур юғалтыу булды. Һәр быуын ҡәҙерле беҙҙең өсөн. Беҙгә, ярай, рәхәтерәк хәҙер, фатир бар, балалар үҫеп етте. Ә йәштәргә бөтөн нәмәне яңынан ҡорорға, ғаиләһен ҡарарға кәрәк. Беҙ республика театры иҫәпләнәбеҙ, шуға ла муниципаль кимәлдә ҡала ла артыҡ ярҙам итә алмай.

**➔ Хәҙерге йәш быуын актерҙары һеҙҙең быуын актерҙарынан айырыламы?**

**Р. Ғәлина:** Бәлки, уҡып бөтөп кенә килгән саҡтарында айырылаларҙыр. Тик үҙ һөнәренең асылына төшөнөп алһалар, беҙҙә бөтөнләй айырып булмай. Көсәгилешлек тә бар, кемдең арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырлайһың, ти бит халыҡ та. Һәр театрҙың үҙенә генә хас уйнау манераһы ла бар ул. Шәүрә Дилмөхәмәтованы бер тапшырыуҙа күреп ҡалдым да, ҡалай минә оҡшаған, тип ҡарап ултырҙым. Тәс минеңсә әбей булып ултыра, кейенеүе лә, һөйләшеүе лә оҡшаған. Стәрлетамаҡта эшләгәнендә уның йәштәрҙе уйнаған сағы ине, шулай ҙа беҙҙең образдарҙы ла күнеләнә һеңдерәп йөрөгәндер, күрәһең. Сибай театрынан Шәмсинур апай Сиражетдинова-Хановаһың уйынын мин Рәмзиә Ҡудашевала күрә торғайным, хатта һөйләшеүҙәре лә Шәмсинур апай ине. Тимәк, характерлы образдарҙы эшләгәндә нимәләр ҡулланылырға кәрәклеген ул унан өйрәнгән. Әле Зифа Баязитовала ла күреп ҡалам Шәмсинур апай һыҙаттарын. Салауат театрында мәрхүмә актрисалар Ғәзизә апай Насирова менән Зәкиә Әхмәрованың уйнау манераһы һаман йәшәй һәм киләһе быуындарға күсә. Һәр театр ошо күсәгилешлеге менән дә ҡиммәт ул.

**➔ Әлеге көндә театр ниндәй уйниәттәр менән йәшәй? Репертуарға яңы спектаклдәр өҫтәләсәкме?**

**И. Рәхимов:** Яңы ғына театрҙың юбилейын үткәреп ебәрҙек, бөтөн көс шуға һалынды. Яңы йылға тиклем Гөлдәр Ильясова яңы премьера әҙерләй. Ғәҙәттәгесә, Яңы йыл әкиәте лә буласаҡ балалар өсөн. Режиссерыбыҙ Айҙар Зарипов Мөнир Ҡунафиндың "Люксембургға барам әле" тигән драмаһы өҫтөндә эшләйәсәк. М. Ҡунафин беҙҙең өсөн яңы драматург түгел, уның "Тынлайыҡ ваҡыт аҡҡанын" исемле спектакле беҙҙә бара. Уның теле, яҙыуы беҙгә лә, тамашасыға ла оҡшай. Авторҙар төрлө була, кемдер яҙған әйберен режиссерға алып килеп бирә лә, ҡабаттан уның өҫтөндә эшләмәй. Ә Мөнир Ҡунафин режиссер менән берґәләп эшләй белә. Элек драматургтар репетицияларҙа ҡатнашҡан, кәрәк булһа, ҡайһылыр сәхнәләрҙе яңынан да яҙған. Драматург булырға бер ҡайҙа ла уҡытмайҙар, быға театрҙа ғына өйрәнергә була. 2017 йыл Илшат ағайҙың юбилей йылы, уға 85 йәш тулған булыр ине. Шул датаға арнап, уның "Һөйәрҙәргә ҡапҡан" комедияһын сығарҙыҡ. Быйыл шулай уҡ Стәрлетамаҡ мәҙәниәт техникумын тамамлаған махсус курс килде эшкә, 5 ҡыҙ ҙа, 1 егет өҫтәлде актерҙар рәтенә. Уларҙың диплом эшен - Аккермандың "Хыялдар тормошҡа ашыр ер" йәштәр комедияһын репертуарыбыҙға алдыҡ.

**➔ Репертуар төҙөгәндә тамашасының теләгән иғтибарға алаһығыҙмы?**

**Р. Ғәлина:** Бөгөн театрҙар тулы залдар йыя алмай тиһәләр ҙә, беҙҙең театрға тоғро тамашасыларыбыҙ бар. Ула күберәк классик әҫәрҙәрҙе - "Ғәлиәбаныу"ҙы, "Аҫылйәр"ҙе, "Зәңгәр шәл"де күргеләре килә. Шуға ла был спектаклдәр репертуарҙан төшмәй уйнала.

**А. Хәлилов:** Ҡолаҡ һалырға тура килә инде, шунһыҙ булмай. Бөгөнгә көндә тамашасыңды юғалтмайым тиһәң, уларҙың теләгән үтәргә лә мәжбүр булаһың. Дөрөҫөн әйткәндә, тамашасы бөгөн комедияға һәм мелодрамаға йөрөй. Минеңсә, театр замандан артта ҡалырға ла, ныҡ алға китергә лә тейеш түгел. Ул халыҡ менән тиң барырға тейеш. Берәү ҙә ҡысҡырып әйтмәһә лә, донъялағы хәл ныҡ киҫкен, бына-быына һуғыш башланып китмәҫ, тимә, кемдәндер осҡон сәсрәтеп ебәреү генә көс. Башҡортостан тигән бәләкәй генә республикала йәшәп ятһаҡ та, былар беҙгә лә ҡағыла, сөнки Рәсәйҙең уртаһында ҡайнайбыҙ. Инфляциялар, оптималләштереүҙәр һөҙөмтәһендә халыҡ баҫылғандан баҫыла. Ошондай ваҡытта тамашасы ниндәй спектаклгә киләсәк? Берәүҙең дә сәхнәлә үлтереш-ҡырылыш ҡарағыһы килмәй. Ике сәғәт буйы милли әйбер ҡарап, көлөп, хистәрен сығарып ҡайтыуҙы өҫтөн күрәсәктәре билдәле. Шуға ла бөгөн тамашасы нимәгә өҫтөнлөк бирә, тигән һорауға яуап биреүе лә еңел түгел. Тик бер нәмәгә мин инанғанмын - театр халыҡҡа хеҙмәт итергә бурыслы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Театрҙы шәхестәр бар итә һәм йәшәтә, тиҙәр. Был театрҙың төп үҙенсәлеге лә, төп байлығы ла - уның актерҙары, тигән һығымтаға киләһең улар менән аралашҡандан һуң. Ә тамашасы һәр ваҡыт актерға эйәрә. Данлы үткәне, лайыҡлы бөгөнгөһө булған театрға артабан да уңыштар, тоғро тамашасылар теләйек. Геройҙарыбыҙ үҙҙәре әйтмешләй, ижад өсөн сиктәр ҙә, кәртәләр ҙә юҡ. Тәүге башҡорт театры тыуған ерҙән береһенән-береһе матур яңылыҡтар ишетелеп торор әле киләсәктә лә.**

*Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.*

ШАҢДАУ



# ЙОЛОП АЛ ДА...

## һыуға һал

**"Киске Өфө"нөң 21-се һанында Сибай ҡалаһынан Гөлкәй Сәмерханова халҡыбыҙҙың "Боҙҙо оҙатыу" йолаһын иҫебеҙгә төшөргәйне. Минең тыуып-үҫкән ауылым - Күгәрсен районы Үрге Бикҡужа Ағиҙел буйында, хозур тәбиғәт ҡосағында ике урам булып ултыра. Ауылда башҡорт, сыуаш, урыҫ, татарҙар дуҫ һәм татыу йәшәне. Байрамдарҙы, йолаларҙы ла бергә үткәрә инек. Уларҙың иң ҡыҙығы, гөрләп үткәне "Боҙҙо оҙатыу" йәки "Йолоп ал да, һыуға һал" тигәне була торғайны.**

Был байрамға мартта уҡ әҙерләнеп бөтәләр: яңы күлдәк тегелә, уйында енеүселәргә ҡыҙҙар ҡулъяулыҡ сигә, бүләккә тигән түбәтәйҙәр, таҫтамал, төмле ризыҡтар йыйыла. Ағиҙелгә төшкән тыҡрыҡ һайын 15-20 йорт кешеһе йыйыла, 4-5 төркөм хасил була. Иң тәүҙә хәҙрәт Ҡарый бабай, мулла Ғарифулла бабай, мәзин Яҡуп бабай һәр төркөмдә доғалар уҡый, боҙло Ағиҙелгә ҡарап өшкөрә һәм фатихаларын бирә, унан колхоз, мәктәп етәкселәре ҡотлау һүҙе әйтә.

Еткән егет-ҡыҙҙар бер-береһенә шунда күҙ һала, "Наза" көйөнә бейейҙәр, бәләкәйерәктәр "Аҡ тирәк, күк тирәк" уйнай. Ағайҙар көрәшәләр. Әле лә Нуриәхмәт ағай менән Зәки ағайҙың көрмәкләшеүе күҙ алдында тора. Юныс бабай ҡурайҙа һыҙҙыра, уларҙа фатирҙа торған уҡытыусы Нурый ағай клоун булып кейенгән, кешеләрҙе көлдөрөп йөрөй. Бәләкәй малайҙар унлаған һалам көлтәһен берәмләп боҙға ырғыталар ҙа, уларға ут төртәләр. Үҙҙәре Нурый ағай өйрәткәнсә ҡабатлай:

*- Ағиҙелем, Ағиҙел,*
*Ағиҙелемдең боҙо,*
*Ауырыуҙарҙы йолоп ал,*
*Ҡайғыларҙы йолоп ал,*
*Яуыздарҙың яуызлығын йолоп ал,*
*Ҡараҡтарҙың харам малын йолоп ал.*
*Йолоп ал да, һыуға һал,*
*Улар шунда тонсоҡһон,*
*Бөтә халыҡ тынсыһын!*

Үкенес, бүтән һамаҡтарҙы онотҡанмын. Йыр, бейеү, ҡара-ҡаршы әйтештәр, ҡумыҙ сиртеүҙәр, урыҫ, сыуаш йәштәренең балалайкала уйнауы башлана. Ул арала ҙур боҙ киҫәгендә эре генә ултырып ағып килгән ҡара этте күреп, малайҙар ҡысҡырыша. Уны, тулҡын ярға һуҡҡан ерҙә сығарып алып, этһеҙ малайға бирәләр.

Байрам аҙағында көрәштә, йыр-бейеүҙә, әйтештә енеүселәргә алдан әҙерләнгән бүләктәрҙе тараталар. Хәҙрәт, мулла, мәзин бабайҙарҙың иңенә матур таҫтамал һалалар. Бала-сағаға Ғәлиә инәй бешергән эре сәк-сәк, өләсәйҙең көҙҙән үк ваҡ ҡына итеп киптергән түңәрәк ҡоротон, икмәк бешереү оҫтаһы Хәмдениса инәйҙең ат күҙендәй генә бешерелгән ҡумаҫтәрен, баҡса үҫтереүсе Мәликә инәйҙең ҡыҙҙырылған эре көнбағышын өләшәләр. Ул мәлдә хәҙергеләй әйбер юҡ ине бит.

Боҙ оҙатып ҡайтҡас, бер нисә өй бергә сәй эсә, һәр кем шат, ҡыҙыҡ табып көлөшәләр. "Йолоп ал да, һыуға һал" атамаһы бөтә насар ҡылыҡты, сирҙе, яман һүҙҙәрҙе, дошманлыҡты ағыҙып ебәреү, таҙарыныуҙы аңлатҡандыр инде ул. Был байрам хәҙер ишетелмәй, үткәрелмәйҙер ҙә инде.

Өләсәйем гел генә: "Үҙен бысратыуҙан, тәбөнә ҡыйҡыпыр ташлауҙан, яр ситендәге ағастарҙың ағыу юлын тарайтыуҙан, бәндәләрҙең әрпешлегенән арыған дарьялар, бер көн килеп, асыулы арыҫландай ажғырып, ярҙарынан сығыр ҙа, ауыл-ҡалаларҙы баҫыр, мин күрмәм, һеҙ күрерһегеҙ", - тиер ине. Әллә алдан күрә белгән, әллә осраҡлы хәлме, тип һаман баш ватам, әйткәне тап килә. Хәҙер инде ул байрамда ҡатнашҡан ауылдаштарҙың да күбеһе әйтә донъяла юҡ. Гөлкәй һылыуға рәхмәт, уның яҙыуынан һуң мин күпме кешеләрҙе күҙ алдыма килтерҙем, бала сағыма әйләнеп ҡайттым, һағышлы кинәнес кисерҙем.

*Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.*

✓ *Башҡорт икәнлегемде белгәс, йөҙө яҡтырып китте. Баҡһаң, уны фашист пуляһынан башҡорт һалдаты күкрәге менән ҡаплап һаҡлап алып ҡалған. "Был яҡты донъяла йәшәүем менән башҡорт халҡына рәхмәтлемен", - тине ул.*



ИНТЕРНЕТТАН



# НЫҠЛЫ НИКАХ ФОРМУЛАҺЫ

■ Икмәк, маргарин, тәм-том һәм башҡа аҙыҡтарға өҫтәлгән киң билдәле өҫтәмәләр эсәк яман шешенә килтереүе бар, тип иҫкәртә ғалимдар. Эшкәртелгән күпселек ризыҡтың һаҡлау ваҡытын оҙайтыу өсөн тәғәйенләнгән был эмульгаторҙар эсәк микрофлораһын үҙгәртә. Һөҙөмтәлә ялҡынһыныу барлыҡҡа килә, был иһә яман шеш үҫеүенә шарттар тыуҙыра. Джорджия университеты ғалимдары лаборатор сысҡандарға ике төр эмульгатор ашата. Уларға полисорбат 80 йәки карбоксиметилцеллюлоза биргәндәр. Был микрофлораны ныҡ үҙгәрткән, шешеү барлыҡҡа килгән һәм һөҙөмтәлә ямаш шеш ҡуҙанәктәре күберәк буленгән.

■ Магазинда һатылған сағыу ҡаплы ризыҡ иң файҙалыһы тип уйлай күптәр. Әммә сағыу ҡапҡа төрөлгәс, был ризыҡтың тәме насарҙыр, тип фекерләүселәр ҙә бар икән. Киль университеты ғалимдары билдәләүенсә, ҡаптың төҫө һатып алыусының һайлауына тәьҫир итә ала. Экспериментта 179 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың барыһына ла ике төрлө ҡапҡа төрөлгән бер үк сырҙы күрһәткәндәр. Сырҙы тәмләп ҡараҡан алда, улар уның тәме тураһында нимә уйлауҙарын әйткән. Һуңынан ашап ҡараған. Бәктинһәң, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыуға өҫтөнлөк биреүселәр асыҡыраҡ төҫтәге ҡаптарҙы һайлай икән. Был ҡаптағы ризыҡ тәмһеҙерәк, тик файҙалыраҡ, тигән фекергә килгән ҡатнашыусылар.

■ Британия, Швеция, АҠШ ғалимдары ныҡлы никахтың формулаһын сығарған. Эксперттар иҫәпләүенсә, иң идеаль схема шундай: ир ҡатынынан өлкәнерәк һәм ғаиләләге төп проблемаларҙы ул хәл итә. Шул уҡ ваҡытта ир ҙә, ҡатын да финанс йәһәттән бер-береһенән ирекле булырға тейеш икән. Был уларға ғаиләлә тиң булырға мөмкинлек бирә, ти ғалимдар. Әйткәндәй, тағы бер тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бәхетле ғаиләләрҙә үҫкәндәр үҙҙәре ҡорған ғаиләлә лә бәхетле була белә.

■ Баш ауыртыуының сәбәптәре төрлө булыуы ихтимал. Ғалимдар фекеренсә, баш ауыртҡанда көслө дарыуҙар ҡулланмаҫҡа ла мөмкин. Бары тик майһыҙ диета тотоу ҙа етә. Бындай диета баш ауыртыуы хәүефен түбәнәйтә, шул уҡ ваҡытта артыҡ ауырлыҡтан ҡотҡара. Бындай диета мөлендә май көндәлек ҡулланылған энергияның 20 проценты күләмендә булырға тейеш.

■ Америка ғалимдары билдәләүенсә, һалҡын һауа сәләмәтлеккә файҙалы. Тышта саф һауала йәйәү йышыраҡ йөрөргә кәрәк, сөнки ҡышҡы һауала кислород 30 процентҡа күберәк һәм тирегә һыңғай йоғонто яһай. Был шөғөлдө кискелеккә, урамда машиналар әҙерәк йөрөгән мәлгә ҡалдырырға кәңәш итә ғалимдар. Йөрәк-ҡан тамырҙары, баш ауыртыуы менән яфаланыусыларға ла саф һауа кәрәк.

■ Ҡатын-ҡыҙҙың балалары ни тиклем күберәк, улар шул тиклем яйыраҡ ҡартая. Күп балалы әсәйҙәрҙә хромосоманы һаҡлап тороусы оҙон теломерҙар күберәк була. Күҙәнәк бүленгән һайын теломер ҡыҫҡара бара. Ә ҡыҫҡарған теломер хроомосоманы яҡлай алмай һәм күҙәнәк эшләү һәләтен юғалтып, ҡартая. Саймон Фрейзер университеты профессорҙары билдәләүенсә, һәр бала тапҡан һайын теломерҙар оҙоная. Ғалимдар быны эстроген гормоны менән бәйләй. Ҡатын кеше ауырлы саҡта был гормон кимәле юғары була. Ә эстроген - антиоксидант, ул теломерҙарҙы ҡыҫҡарыуҙан һаҡлай.

ӘРМЕ ЯҘМАЛАРЫ

# ХЕҘМӘТТӘШТӘРЕМ ХӘТЕРЕНДӘ...

## милли геройыбыҙ исеме менән иҫтә ҡалғанмындыр

**Әрме сафында хеҙмәт иткән элекке һалдаттар йыш ҡына унда булған хәл-ваҡиға хаҡында бәйән итергә ярата. Ә хеҙмәткә бармағандар "тормош мәктәбе"ндә нисек ситтән тороп "уҡыу"ҙары менән маҡтана. Беҙҙең заманда хәл башҡасараҡ була торғайны. 18 йәше тулған егет өсөн ике йыл Тыуған илен һаҡлау мөҡәддәс бурыс ҡына түгел, ә үҙендең туғандарыңдың, яҡындарыңдың абруйын күтәреү ҙә ине. Хеҙмәткә алынмаған кешегә, нисектер, ышанмай ҡарайҙар төҫлө ине.**



Бынан ҡырҡ йыл элек тормош миңә ундай мөмкинлекте үҙе бирҙе. Күмертау тау-механика техникумын тамамлағас, юллама буйынса Мәскәү өлкәһенә эшкә ебәрҙеләр. Ул ваҡытта предприятиеның исеме бик ҡыҫҡа ине: п/я №... Йәғни, беҙҙенсә әйткәндә, ябыҡ объект. Унда эшләгәндәрҙе Ҡораллы Көстәр сафына бик алып бармайҙар, сөнки предприятие үҙе хәрби объекттарҙы хеҙмәтләндерә. Әммә армияға алыуҙарын һорап, ҡатҡат комиссарға барыуым һөҙөмтәһен бирҙе. Ноябрь аҙағында Руза хәрби комиссариатынан бер төркөм егет теәйләгән автобус Мәскәү өлкә хәрби йыйылыу пунктына юл тотток. Шул кис беҙҙе поезға тейәп, Төньяҡ баш ҡалаға оҙаттылар.

Ике аҙналыҡ йәш һалдат курсы үткәс, Ленинградтың үҙәк урамдарының береһендә урынлашҡан айырым ротаға әләктем. Хәрби подразделение 11 ҡатлы экспериментал йорттоң фундаментын төҙөй башлағайны. 5 декабрҙә, ул ваҡытта СССР Конституцияһы көнөндә, хәрби ант ҡабул иткәс, эшкә сығарҙылар. Төҙөлөш участкаһы начальнигы подполковник Иван Русских ине. Башҡортостандан бер мин генә. Бер көн саҡырып һөйләшкәс, үҙенә ярҙамсы итеп күсерҙе. 9 ай хеҙмәт иткәс, августа отпускыға ҡайтарҙы.

Тыуған яҡта, атай-әсәй, туғандар араһында ял итеп барғас, Иван Николаевичты идаралыҡҡа үрләткәндәрен ишетеп, ҡайғырҙым. Уның урынына башҡорт йәшлө Сергей Краснов исемле капитанды тәғәйенләгәндәр. Баҡһаң, ул Күгәрсен районындағы Красный Яр исемле сыуаш ауылынан булып сыҡты. Мәләүеҙҙә урта мәктәпте тамамлаған. Башҡортса, яҙыусылар әйтмешләй, һиу кеүек эсә.

Хеҙмәттәштәр беҙҙең үҙебеҙсә һөйләшкәнде ишетеп аптырайҙар, әлләһеҙҙә урыҫтар ҙа башҡортса беләме, тип һорашалар.

Шулай бер көн иртән төҙөлөш объектына майор Сергей Краснов (ул ваҡытта ошо дәрәжәгә еткәйне) яҡынлаша. Бер хеҙмәттәшем йүгереп килдә: "Һеҙҙенсә "здравия желаю" нисек була?" - тип һораны. Мин уға: "Иптәш майор, аҡса бармы?" тип өндәш", - тип өйрәтеп ебәрҙем. Һалдат майорҙан шулай тип һорағас, ул кеҫәһенән өс һум сығарып бирҙе, үҙе миңә йоҙроҡ күрһәтә.

Икенсе ваҡыт идаралыҡ начальнигы килде. Сергей Красновты эҙләтә. Ә уныһы иртән киске ҡунаҡтан һуң башы ауыртып килеп, төҙөлөш вагончигында хәлһеҙләнеп ултыра ине. Йүгереп барған һалдат минән һорай: "Һеҙҙенсә "Һеҙҙе саҡырталар" нисек була?" Мин әйттем. Шунан һалдат вагончик ишеген шаҡыны ла: "Иптәш майор, баш ауыртмаймы?"- тип һораны. Бына шулай аралашты̧ беҙ хеҙмәттә яҡташтар менән.

Бер хәрби институт биләмәһендә оҫтахана төҙөйбөҙ. Мин мастер булараҡ, проектҡа индергән үҙгәрештәрҙе етәкселектән раҫлатам. Институт директоры урынбаҫары бер полковник менән әңгәмәләшеп киттек. Элек ҡырыҫ ҡына һөйләшкән офицер милләтемде һораны. Башҡорт икәнлегемде белгәс, йөҙө яҡтырып китте. Баҡһаң, Бөйөк Ватан һуғышында уны фашист пуляһынан башҡорт һалдаты күкрәге менән ҡаплап һаҡлап алып ҡалған. "Шуға күрә мин был яҡты донъяла йәшәүем менән башҡорт халҡына рәхмәтлемен. Һинә, был милләт вәкиленә, ишегем һәр саҡ асыҡ", - тине ул. Һәм һүҙендә торҙо.

Иртәнсәк рота командиры саҡыртып алды ла, мин һинең менән объектыңды тикшерергә барам, тине. Килдек. Командирҙы объектҡа индермәйҙәр. Минән ярҙам һораны. Телефондан полковникҡа шылтыраттым. Уныһы аҫҡа уҡ төшөп, капитандың ни эшләп йөрөгәнен һорашты ла, "Башҡорттоң эшен тикшереп йөрөмәһәң, башҡа эшең юҡмы?" тип асыуланып ҡуйҙы. Рота командиры бик оҙаҡ ваҡыт минән был һүҙҙәрҙең нимә аңлатҡанын һорашып йөҙәтте.

Быҙа шулай, сит ерҙәргә сығып, ҡайҙа ғына барһам да, башҡорт икәнемде белһәләр, миңә ҡарата шунда уҡ яҡшы мөнәсәбәт тыуҙы. Был һис тә арттырыу түгел. Шуға ла бик йәштән

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ТЬФҮ, КҮҘ ТЕЙМӘҺЕН!



**Ололар һәр ваҡыт күҙ тейеүҙең зарары барлығын белеп: "Мал-тыуарҙы, ҡош-ҡортто, бала-сағаны маҡтамағыҙ", - тип тыя торғайны. Уны-быны уйламай, ысынлап та, "Ҡалай матур ғына!" тип һөҡланғандан һуң, себештәрҙең тәгәрәп ятып үлгәнен, аттарҙың ҡолап китеүен, баланың ҡыпыл ауырып китеүен ишетеп, белеп торабыҙ.**

Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм: "Күҙ тейеү - хаҡ. Минең өммәтемдән булғандарҙың күбеһе, тәҡдирҙе һанамағанда, күҙ тейеүҙән үләсәк", - тип әйткән. "Күҙ тейеү - ул кешенең күңеле менән бәйләнгән. Күңелендә тыуған көнсөллөк, күрә алмаусанлыҡ, йыландың ағыуы кеүек: уның һүҙе, ҡарашы, доғаһы (теләге), һөйләшеүе аша кешеләргә ағыу таралған кеүек", - тигән Ибн Ҡаййим.

Ҡыҙҙар үҙенең иң матур фотоларын интернетҡа ҡуя. Уларҙы кем генә ҡарамай, яратып, яратмай ҡарағандар ҙа табыла. Был ҡыҙҙар шуны белһен ине: күҙ тейеү бик йыраҡтан да зыян килтерә ала. Кешенең йә холҡо үҙгәрә, йә ябыға башлай, битендә йә төнендә тимгел-тимгел таптар барлыҡҡа килергә мөмкин, йә булмаһа һаулығы ҡаҡшай. Көҙгөгә ҡарап, үҙенә-үҙе һөҡланған кешенең дә үҙ-үҙенә күҙ тейҙереүе бар. Йәшәгән йортҡа ла күҙ тейеүе ихтимал: йә бөжәктәр, йә ҡорт тулып китә. Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм күҙ тейеүсән кешеләргә асыуланып: "Ниңә уны маҡтайһығыҙ? Аллаһы Тәғәләне маҡтап, Уға рәхмәт әйтергә кәрәк, Уның матур итеп барлыҡҡа килтергән мәхлүктәре өсөн", - тигән.

Кешене, малды һәм бөтөн нәмәне маҡтау урынына "Собханалла", "Әлхәмдулиллаһ", "Мәәшаллаһ" тигән һүҙҙәр әйтелһә, бер нәмәгә лә зарар килмәй. Әгәр ҙә инде күҙ тейгәнен белһәң, йә һиңә һөҡланғандарын, һине кемдер ныҡ маҡтағанын, йә көнсөл ҡырын ҡараш ташланғанын һиҙһәң, тиҙ генә дауалау сараларын ҡулланырға кәрәк. Бер ҡатындың күҙ тейеүҙән аяҡтарында ҡыҙыл таптар барлыҡҡа килә. Ете аҙна буйы кесе йома һайын икенде намаҙынан һуң етмешәр тапҡыр "Йә Аллаһу, йә Хәсбуллаһу Хәсибу" тип әйтеп, һыуға өрөп, һуңынан шул һыуҙы эсеп һәм ауыртҡан ерҙәренә һөртөп йүнәлеүен беләм. Ауыртҡан ергә ҡулды һалып "Ихлас", "Фәләҡ", "Нәс" сүрәһен уҡыһаң да ярҙамы була, иншаллаһ.

**Зәлифә ШАКИРОВА.**
**Әбйәлил районы Аҫҡар ауылы.**

***✓ Ваҡыт беҙҙең хужаға әйләнә. Шулай ҙа уны үҙебеҙгә буйһондорорға һәм унның менән идара итергә өйрәнергә кәрәк. Уны буштан-бушҡа әрәм итергә лә, "ваҡыт етмәй" тигән синдром ҡапҡанына эләгергә лә ярамай.***



үк үҙ милләтем, башҡортлоғом, милләтемде данлаған арҙаҡлы шәхестәребеҙ менән ғорурлыҡ тойғоһо уянды. Ошо тойғо киләсәктә милләтем намыҫына, башҡорт тигән исемгә тап төшөрмәҫлек итеп йәшәүгә этәргес бирҙе...

Шулай, техникумда уҡығанда Ҡаҙағстандың Экибастуз ҡалаһында практика үттем. Ҡаланың Күмерселәр мәҙәниәт һарайында бильярд буйынса беренселек үтә ине. Иптәштәр менән мин дә барҙым. Чемпионат финалы алдынан былтырғы еңеүсе телмәр тотто. Миңә оҙаҡ ҡына текләп торғандан һуң: "Һин ҡаҙаҡ түгел бит, ә ниндәй милләттән?" - тип һораны. Башҡорт, тигән яуапты ишеткәс, "Ә-ә-ә, Салауат Юлаев", тип бильярд уйнарға саҡырҙы. Мин ҙур бильярд уйнап ҡарағаным булмауын белдерҙем. Үҙем өйрәтермен, тип, өсмөйөштө боҙҙо. Унның күрһәтмәләренә таянып, бер-бер артлы ете шарҙы лузаға ебәрҙем. Һигеҙенсеһе инмәне. Ул кийҙы алып, бер шарҙы лузаға һалды, һуңынан "яңылышты", йәнәһе. Мин һигеҙенсеһен индергәс, тамашасыға боролоп, уң ҡулының һуҡ бармағын өҫкә күтәреп, "Салауат Юлаев та бер ҡасан да еңелмәгән!" тине. Һуңынан урындағы халыҡҡа милли батырыбыҙҙың кем икәнен оҙаҡ ваҡыт аңлатырға тура килде миңә...

...Йәш һалдат курсын үткәс, роталарға бүлделәр. Мәскәү ҡалаһы һәм өлкәһенән алынған һап-һары егеттәр араһында бер мин генә ҡара сәсле булыуым менән айырылып тора инем. Иртән иртүк яңы килгән һалдаттарҙы теҙеп ҡуйҙылар. Хәрби округтың төҙөлөш идаралығынан килгән подполковник Дитятковский үҙе менән таныштырып, телмәр тотҡас, һәр беребеҙгә ҡулын биреп, исем-фамилияны һорашып сыҡты. Минең ҡаршыма баҫҡас та үзбәксә, үзбәкме, тип һораны. Мин башҡортсалап: "Башҡорт", - тинем. "Тимәк, Салауат Юлаев".

Ике йыл дауамында мин унның өсөн тик Салауат Юлаев ҡына булдым. Беҙҙең ротаға килгәндә мине күреп ҡалһа, Салауат Юлаев, тип өндәште.

Хеҙмәтемдең аҙағы яҡынлашҡандағы август айҙары ине булһа кәрәк, өйҙән посылка алдым. Әйберҙәр араһында Степан Злобиндың яңы ғына баҫылған урыҫса "Салауат Юлаев" романы ла бар ине. Көн һайын ваҡыт барҙа уҡыйым. Һуңғы битен дә артта ҡалдырып, китапты ябыуым булды, офицерҙар йыйылған вагончикҡа әлеге подполковник Дитятковский килеп инде. Шәмбе 50 йәшлек юбилейын билдәләй икән, шуға хеҙмәттәштәрен ҡунаҡҡа саҡырҙы. Миңә боролоп, "Салауат Юлаев, ғәфү ит, һалдатты саҡырырға ярамай", тип белдерҙе. Мин тиҙ генә әлеге китапҡа "Хөрмәтле Исаак Моисеевичҡа, минең өлкән дуҫым һәм уҡытыусыма 50 йәшлек юбилейы менән ҡотлап, Салауат Юлаев нәҫелдәшенән", - тип яҙҙым да, подполковникҡа һондом. Ул ҡотлауҙы уҡып сыҡҡас, күҙлек өҫтөнән бөтә офицерҙарҙарға ҡарап сыҡты ла, китапты өҫкә күтәреп: "Бындай бүләкте тик Салауат Юлаевтың нәҫелдәштәре генә бирә ала", - тине.

Дүшәмбе көндө Дитятковский иртәнге разводҡа килде:

- Салауат Юлаев!
- Мин!
- Сафтан сығырға!

Сыҡтым. Рота командирына: "Мин уны киске 10-ға тиклем үҙем менән алып китәм", - тине лә, машинаһына ултыртты. Иртәнге аштан һуң Ленинградтағы хәрби тәьминәт конторалары буйлап алып китте.

- Абрам! Таныш бул. Был - башҡорт. Салауат Юлаев. Ярҙам һорап килһә, баш тартма.

- Станислав, был - башҡорт халҡы вәкиле. Бына һин, йәһүд, Моисейҙың биографияһын йүнләп белмәйһең дә. Ә ул милли геройы Салауаттың батырлығын, нисек һуғышҡанын, нисек үлгәнен үҙенең биш бармағы кеүек белә. Беҙ, йәһүдтәр, был мәсьәләлә башҡорттарҙан үрнәк алырға тейеш!

Көнө буйы ҡалалағы йәһүдтәр етәкләгән ойошмалар буйлап йөрөп сыҡтыҡ. Шунда уларҙың ниндәй дуҫ милләт икәнен күреп һоҡландым.

Подполковник вәғәҙә иткән киске 10-да беҙ ҡаланың бер ашханаһында саҡ киске аш ашап ултыра инек. Шулай булғас, минең һуңлап ҡайтыуым билдәле ине инде. Иртән иртүк взвод командиры мине канцелярияға саҡырҙы. Ниңә ваҡытында ҡайтмауымды һорашты. Әрләргә тип ҡыҙып киткән сағында ғына ишек асылып китте һәм бүлмәгә Исаак Моисеевич килеп инде. Нимәгә тауыш сығыуын һорашты. Мин һуңлап ҡайтҡаным өсөн шелтә алыуымды аңлаттым.

- Һалдат, бар сығып тор әле, - тине ул миңә.

Ишекте япҡас, ҡолағыма бына ниҙәр ишетелде:

- Һеҙ - ҡырҡ (украиндар СССР-ҙа 40 миллион ине), беҙ - ике миллионбыҙ (йәһүдтәр - 2 миллион). Минең исемем - Исаак, ул ике "а" аша яҙыла. Иҫеңдә тот. Әгәр бына ошо башҡорттоң башынан һинең иҫәрлегең арҡаһында бер генә бөртөк булһа ла сәсе төшһә, бөтә Ленинградты баштүбән әйләндереп ҡуйырмын, ләкин ике сәғәттән, һин хохол, бында булмаясаҡһың, тине. Взвод командиры унның менән ризалашты һәм хеҙмәт бөткәнсе миңә тауыш күтәрмәне.

Әрмеләге Исаак Мосеевич менән бәйле ошо хәл дә йыш иҫемә төшә. Тап унның тырышлығы менән Ленинград хәрби округының комсомол конференцияһына делегат итеп һайландым. Күптәр ҙур офицер дәрәжәһендә, партия, комсомол хеҙмәткәрҙәре. Бер ваҡыт мандат комиссияһы рәйесе сығыш яһай. Бөтәһе 726 делегат, милли состав буйынса башҡорттарҙан бер үҙем булып сыҡтым.

Әрме мәктәбе бик һәйбәт, бигерәк тә уны ситтән тороп үтһәң, тип аҡланырға тырыша унда бармағандар. Хеҙмәткә алыныуыма ошо араларҙа 40 йыл тула. Аҙ ваҡыт түгел, әммә тормошомдағы был иң яҡшы мәктәпте лайыҡлы үтеүем менән һаман ғорурланам. Әле булһа әрме хеҙмәте йыш төшкә инә. Йә Исаакий соборы, килеп күреп кит, тип үҙенә саҡыра. Йә яңынан хеҙмәткә саҡырылғанмын да карауаттың икенсе ҡатынан урын бирәләр икән, тип күрәм. Һуңғыһы төшкә инһә, мин бит хәҙер өлкән кеше, бер тапҡыр бурысымды үтәнем, тип хәрби билетымды күрһәтәм. Әммә күңелдә армияға барыуҙан ҡурҡыу тойғоһо юҡ. Быға, моғайын, Салауат Юлаев исеме менән бирелгән ҡаҡшамаҫ рух, ышаныс тойғоһо булышлыҡ итәлер. Хеҙмәттәштәрем хәтерендә лә милли геройыбыҙ исеме менән иҫтә ҡалғанмындыр, тип ышанам. Быныһы өсөн иһә йәһүд халҡының ғорур улы Исаак Дитятковскийға рәхмәт белдергем килә.

Шулай итеп, бөгөн үҙен әрме сафына әҙерләгән йәш милләттәштәремә шуны әйтер инем: милли геройыбыҙ Салауат Юлаев, легендар генералыбыҙ Миңлеғәли Шайморатов, үҙен үлемһеҙ данға күмгән ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев, күкрәге менән дошман амбразураһын ҡаплаған Шакирйән Мөхәмәтйәнов, Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин, "ҡара генерал" Даян Мурзин һымаҡ башҡорт халҡының ҡаһарман улдары тормошон, батырлығын өйрәнергә, кәрәк урында башҡаларға еткерергә, уларға тиңләшергә, өлгө алырға, ҡайҙа йөрөһәгеҙ ҙә башҡорт халҡын данларға тырышығыҙ. Ил алдындағы бурысыңды үтәп, сит-ят тарафтарҙа ерһыу күреп ҡайтыу - был донъяла ир-егеттәр өсөн иң мөһимелер. Һәр хәлдә лә мин шулай уйлайым.

**Сәйфулла ӘМИРОВ.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

### Тормошоғоҙ ваҡыты

Бер кемгә лә башҡаларға ҡарағанда артыҡ ваҡыт бирелмәгән. Сәғәттә шунса уҡ минут, тәүлектә шунса уҡ сәғәт. Шуға ҡарамаҫтан, һаман да бер үк фразаны ҡабатлайбыҙ.Һис шикһеҙ, ваҡыт тиҙ үтә. Һәм мәл - ул беҙҙең тормошобоҙҙоң бер өлөшө. Йәшәүебеҙ ваҡытҡа бәйләнгәнлектән, уны аҡыл менән файҙаланырға ла кәрәк. "Мин бушамайым", "Мин ашығам", "Миңә ваҡыт етмәй" - был фразалар бәхет табутын ҡаҙаҡлап ҡуйыуҙың иң ҙур ҡаҙаҡтары. Тормош юлында бер туҡтауһыҙ сабыу матур һәм сәләмәт шәхес үҫтереүгә ваҡыт та ҡалдырмай, уны һоҡланыуҙан һәм романтиканан мәхрүм итә.

Һәр иртән тәҙрә аша ағастар, тауҙар, парктар йәки яландар булған матур күренеш асыла. Әммә беҙ уны бик һирәк кенә күрәбеҙ. Бары тик икенсе яғыбыҙға боролабыҙ һәм одеялды баштан аша ҡаплайбыҙ йәки ырғып тороп, атҡан уҡтай эшкә ашығабыҙ. Ә инде, нимәгә бындай ашығыслыҡ, тип һораһалар, яратҡан эш менән шөғөлләнеү өсөн бер генә буш ваҡытыбыҙ булмауына зарланабыҙ.

Ваҡыт беҙҙең хужаға әйләнә. Шулай ҙа уны үҙебеҙгә буйһондорорға һәм унның менән идара итергә өйрәнергә кәрәк. Беҙ ваҡыттың ҡоло булырға тейеш түгел. Уны буштан-бушҡа әрәм итергә лә, "ваҡыт етмәй" тигән синдром ҡапҡанына эләгергә лә ярамай. Бының урынына ваҡытты контролләргә һәм тормошобоҙҙағы иң мөһим нәмәләргә иғтибар бүлергә өйрәнергә кәрәк. Ваҡыт ҡулынан ашығыу һәм ығы-зығы сыбығын тартып алып, үҙебеҙҙе тынис тота башлаясаҡбыҙ.

### Проблема ваҡыттамы, әллә үҙебеҙҙәме?

Сәғәт телдәренең туҡтауһыҙ алға елеүе беҙгә нимә эшләргә теләгәнбеҙ, шуны тормошҡа ашырырға ваҡыт етмәгәненә ишаралап тора. Сит ил телдәрен өйрәнеү, ҡайҙалыр барыу, хат яҙыу, курстарға яҙылыу, китапты тамамлау һ.б. өсөн ваҡыт етмәй. Әгәр ваҡытыбыҙ күберәк булһа икән! Ләкин һеҙ ысынлап та шул тиклем бушамайһығыҙмы?

Кешеләр ваҡыт менән идара итеү курстарына йөрөй, шул уҡ ваҡытта планлаштырған эштәрен тормошҡа ашырыу өсөн ваҡыт етмәүенә зарлана. Әммә ысынлап та нимәлер эшләргә теләһәгеҙ, мотлаҡ ваҡыт табыр инегеҙ. Һеҙгә ваҡыт менән идара итеүсе белгес кәрәкмәй. Әгәр ҙә ошо мин яҙған китапты сауҙалағы хаҡы буйынса һатырға ҡушһам, һәм 48 сәғәт эсендә һәр һатылған китап өсөн 100 доллар түләйем, тиһәм, тамаҡ ялғап алыуға, телефондан һөйләшеүгә, телевизор ҡарауға, буш хәбәр һатыуға һәм бер нәмә лә эшләмәүгә күпме ваҡыт сарыф итер инегеҙ икән?

Йәиһә һеҙ мәктәптә уҡыйһығыҙ, ти. Һәр бише өсөн 5000 доллар, уртаса өлгәшеүсәнлегегеҙ 4 баллыҡ булһа, өҫтәп тағы ла 100 000 доллар бирәм тиһәм, уҡыу өсөн ваҡыт табыр инегеҙме? Әгәр шундай тәкдим булһа, һеҙ курстарға ла йөрөп тормайынса, күберәк һатырға һәм күберәк китап уҡып, белем кимәлен күтәрергә тырышыр инегеҙ. Бының сере ябай - алда һеҙҙе ымһындырғыс маҡсат көтә, һәм уға нисек тә булһа өлгәшергә теләү алға этәрә. Бына бөтөн сер!

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

## МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ



# ХӨРӘФӘТИ ХИКӘЙӘЛӘР,

## йәки йәнәшәбеҙҙә кемдәр йәшәй?

### Әкиәттәге Мәскәй әбей

Элегерәк, беҙ бәләкәй саҡтарҙа, йыш ҡына мәскәйҙе лә күрә торғайнылар, үҙемдең дә күргәнем булды. Зыяраттан килеп сығып, төндә осоп йөрөр ине. Мәскәйҙе күреү менән бисмилла уҡып, күлдәктең өҫкө төймәһен ысҡындырһаң, сәсрәп китеп, күҙҙән юғала торғайны. Ҡарттар бындай хәлдә шулай эшләргә өйрәтәләр ине. Урамда төндә йөрөргә ҡурҡа инек, сөнки мәскәй йыш осрай ине. Быныһы әле ул тиклем хәүефле түгел. Ә иң ҡурҡынысы шунда: әгәр мәскәй өй башына ҡунһа, был өйҙән, һис шикһеҙ, бер йән эйәһе үлә. Бер ваҡыт мәскәй күрше өйҙөң башына ултырҙы. Атайым, был өйҙән бер йән эйәһе китә икән, тип әйтте. Ысынлап та шулай булды ла. Бергә уйнап үҫкән Зәки исемле малай оҙаҡ та үтмәй донъя ҡуйҙы. Мәскәй өй башына ҡунып, өйҙәге үҙе теләгән берәй кешенең ҡанын һура һәм кеше үлә икән. Дөрөҫмө-юҡмы, белмәйем. Тик хәҙер мәскәйҙәр бик һирәк осрай. Быны мәйетте зыяратта тәрән күмеү менән аңлаталар. Ә элек бик һай күмгәндәр.

**Рауил АСИҒОЛОВ.**
**(Дауамы бар).**



## 21 НОЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.15 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 01.15 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.10, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор". Новый сезон. 9-я и 10-я серии. Криминальный сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
03.00 Новости.
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 01.00 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Черная кошка". 9-я и 10-я серии. Криминальный сериал (12+).
23.00 "Специальный корреспондент" (12+).
24.00 "Расследование Эдуарда Петрова" (16+).
03.10 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Наши годы. Гафури, 9, Уфа"**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж".**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Автограф" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (6+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.15 "Квадратный метр", "Телелавка" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**19.15 "Бай" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Малый бизнес" (12+).**
**22.00 "Спортбар" (12+).**
**23.15 "Блондинка в эфире". Худ. фильм (16+).**
**По окончании Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Бәхетнамә" (6+).**
**02.30 Н.Гаитбаев. "Белые ночи Акмуллы" (12+).**

## 22 НОЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.15 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (12+).
13.20, 14.15, 15.15, 00.25 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 02.15, 03.05 "Мужское/Женское"
17.00, 01.15 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор". 11-я и 12-я, заключительная, серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.10 Ночные новости.
03.00 Новости.
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 01.00 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Черная кошка". 11-я и 12-я серии (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
23.55 "Команда" с Рамзаном Кадыровым" (12+).
03.10 "Дар". Драматический сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Наши годы. Гафури, 9, Уфа" (12+).**
**11.00 "Следопыт" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Малый бизнес" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму" (12+).**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ".**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Дознание" (16+).**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**19.15 "Автограф" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Астронавт Фармер". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15"Бәхетнамә" (6+).**
**02.15 Т.Миннуллин. "Встреча с молодостью" (12+).**

## 23 НОЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 02.15, 03.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Научи меня жить". 1-я и 2-я серии. Детективный сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Время покажет" (16+).
01.15 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.15 "Модный приговор".
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 01.05 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир" (16+).
18.50 "60 минут" (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Черная кошка". 13-я и 14-я серии (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
03.20 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Наши годы. Гафури, 9, Уфа" (12+).**
**11.00 "Наука 102" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Следопыт" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.15 "Квадратный метр", "Телелавка" (12+).**
**17.45 "Это мы!" (12+).**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Витязь" (Московская область).**
**22.00 "Власть отвечает".**
**23.00 "Патруль". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Бәхетнамә" (6+).**
**02.30 Н.Карпенко-Карий. "Бесталанная" (12+).**

## 24 НОЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.15 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 01.20 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.10, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Научи меня жить". 3-я и 4-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "На ночь глядя" (16+).
03.00 Новости.
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.45 "Вести-Башкортостан".
12.00, 01.00 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.45 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Черная кошка". 15-я и 16-я, заключительная, серии (12+).
23.00 "Поединок". Программа Владимира Соловьева (12+).
03.00 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Наши годы. Гафури, 9, Уфа" (12+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Современник" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай бакса" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью"**
**15.00 "Малый бизнес" (12+).**
**15.15 "ДОСААФ: испытано на себе"**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Клио" (12+).**
**19.15, 20.45 "Полезные новости" (12+).**
**19.15 "Башҡорттар" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**22.00 "Уфимское времечко".**
**23.00 "Другой мир". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.45 "Бәхетнамә" (6+).**
**02.45 Ф.Буляков. "Голубушки мои" (12+).**

## 25 НОЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15 "Время покажет"
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым.
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Новый сезон. Музыкальный конкурс (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.25 "Семь морей Ильи Лагутенко"
01.30 "Танцуй отсюда!". Худ. фильм (16+).
03.20 "Последний американский герой". Худ. фильм (16+).
05.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.45 "Вести-Башкортостан".
12.00, 01.10 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.45 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-ПФО".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Петросян-шоу". Юмористическая программа (16+).
23.10 "Последний лепесток". Мелодрама (12+).
03.05 "Дар". Комедийный сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Наши годы. Гафури, 9, Уфа" (12+).**
**11.00 "Это мы!" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Здоровое решение" (12+).**
**12.30 "Автограф" (12+).**
**13.30 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце".**
**16.45 "Власть отвечает" (12+).**
**17.15 "Квадратный метр", "Телелавка"**
**17.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**18.00 "Йома".**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Москва).**
**22.00 "Наука 102" (6+).**
**23.00 Футбол. РФПЛ. ФК "Уфа" (Уфа) - ФК "Оренбург" (Оренбург).**
**00.45 "Другой мир-2: эволюция". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**03.00 Н.Асанбаев. "7 девушек" (12+).**

## 26 НОЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Успех". Худ. фильм (12+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Телебиография. Эпизоды". К юбилею Александра Маслякова (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Идеальный ремонт".
13.10 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Голос". Специальный выпуск
16.40 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым" (12+).
17.50 Вечерние новости (с субтитрами).
18.00 "Ледниковый период". Новый сезон.
20.25 Жеребьевка Кубка конфедераций по футболу-2017. Передача из Казани.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
22.40 "Подари жизнь". Праздничный вечер, посвященный 10-летию Благотворительного фонда.
00.15 "Молодость". Худ. фильм (18+).
02.30 "Маргарет". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
04.55 "Кактус и Елена". Худ. фильм (12+).
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Семейный альбом" (12+).
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Аншлаг и Компания!" (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Дублерша". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Субботний вечер".
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Пластмассовая королева". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.35 "Жизнь после жизни". Мелодрама (12+).
02.40 "Марш Турецкого-3". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Приключения Пикси" (6+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "Наши годы. Гафури, 9, Уфа" (12+).**
**11.00 "Большой чемодан" (6+).**
**11.45 "Клио" (6+).**
**13.00 "Бай бакса" (12+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**17.00 Финал Всероссийского телевизионного конкурса "ТЭФИ-Регион-2016" (12+).**
**19.00 "Бала-сага" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Колесо времени" (12+).**
**21.00 "ДОСААФ: испытано на себе"**
**21.15 "Хочу жилье!" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30, 01.45 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры представляет…"**
**23.45 "Коломбиана". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 Р.Шарт. "Мою жену зовут Морис" (12+).**

## 27 НОЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.40, 06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.40 "Семь нянек". Худ. фильм.
08.10 "Смешарики. ПИН-код".
08.20 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки".
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Открытие Китая".
12.40 "Теория заговора" (16+).
13.40 Юбилейный концерт Вячеслава Добрынина.
15.30"Точь-в-точь". Новый сезон (16+).
18.40 "Клубу Веселых и Находчивых - 55 лет". Юбилейный выпуск (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где? Когда?". Зимняя серия.
23.40 "Хочешь или нет?". Романтическая комедия (16+).
01.15 "Я - Али". Биографическая драма (16+).
03.20 "Модный приговор".
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00 "Черный принц". Худ. фильм.
07.00 "Мультутро "Маша и Медведь".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается".
14.00 "Вести".
14.20 "Мезальянс". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Синяя птица". Всероссийский открытый конкурс юных талантов.
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Георгий Жженов. "Русский крест". Док. фильм (12+).
02.25 "Без следа". Детективный сериал (12+).
03.35 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Приключения Папируса".**
**08.30 "Материнское сердце" (6+).**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.) (12+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Весело живем" (12+).**
**15.45 "Дорога к храму".**
**16.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Локомотив" (Ярославль).**
**19.00 "Бизнес-обзор" (12+).**
**19.30 "Это мы!" (6+).**
**20.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "В краю крови и меда". Худ. фильм (16+).**
**03.15 "Семейный портрет" (12+).**

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

**Ошо көндәрҙә Өфөлә Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге гимназия-интернатта яңы гимназистарҙы тәбрикләнеләр. Быйыл гимназист тигән ғорур исем йөрөү хоҡуғына кемдәр эйә булды икән? Беҙ буласаҡ музыканттар, инде үҙҙәре оло тормошҡа аяҡ баҫырға әҙерләнгән тәжрибәле гимназистар һәм уларҙың уҡытыусылары - остаздары менән яҡынданыраҡ танышырға булдыҡ.**

# БАЛАЛАР...

## илаһи музыка донъяһына инә



"Гимназист сафына бағышлау" тантанаһы, әлбиттә, йыр-моңһоҙ үтмәй. Был көндә йәш музыканттар айырыуса тулҡынланды. Күптәре баш ҡала сәхнәһендә беренсе мәртәбә сығыш яһаны бит. Әйтәйек, Баймаҡ районы Аҡморон ауылынан 5-се класҡа уҡырға килгән Вәсилә Кейекбирҙина үҙ ауылында бер йыл фортепиано класында шөғөлләнгәндән һуң килгән был уҡыу йортона. Әле бик теләп кларнетта уйнарға өйрәнә. Бөгөнгө сарала ул фортепианола ла уйнаны, хорҙа ла йырланы. Музыка донъяһына ышаныслы аҙымдар менән килә Вәсилә. Гимназия тормошона ла өйрәнгән, үҙенә яңы әхирәттәр табырға ла өлгөргән. Уҡыуҙа ҡыйынлыҡ кисермәй: "Бында мин үҙемде ауылыбыҙ мәктәбендә уҡып йөрөгәндәй, яҡшы тоям. Ныҡ аптыратырлыҡ кәртәләргә юлыҡманым", - ти. Быныһы - бик яҡшы. Тимәк, гимназияла яңы мөхиткә килеп эләккән балаға йылы, яҡшы мөнәсәбәт барҙыр. Башланғыс синыф малайҙарына һәм ҡыҙҙарына ҡарап, уларҙың күҙендә бер генә лә һағыш эҙҙәре күрмәнем. Етәкләшеп, гөрләшеп, уйнап-көлөп йөрөп яталар. Эргәләрендә - нурлы йөҙлө ағай-апайҙар күҙ-ҡолаҡ.

Тынлы еҙ музыка ҡоралдары бүлеге мөдире, Өфө дәүләт опера һәм балет театрының симфоник оркестрының беренсе валторнасы-солисы Фларис Хисаметдинов күҙаллауынса, быйыл гимназияға алынған өс синыф "бишенсе"ләрҙең 70 проценты музыкала бик яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтмәксе. Тәжрибәле педагог гимназияға килеүсе балаларҙың әҙерлек кимәле, һаулығы төрлө йылдарҙа төрлөсә булыуын да һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Һуңғы йылдарҙа райондарҙа мәктәптәр һаны ҡыҫҡарыу сәбәпле, күп балаларҙың музыкаль белеме лә юҡ. Улар яп-ябай фортепиано, баян кеүек музыка ҡоралдарын да белмәйҙәр. Шулай ҙа беҙ музыкаль белемде нигеҙенән башлап биргәнгә күрә, музыканттарҙы үҙебеҙ әүәләп алабыҙ. Балалар башланғыс әҙерлек менән килһә, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине, әлбиттә", - тине Фларис Винарис улы. Ул 1990 йылда үҙе лә ошо уҡыу йортон тамамлаған. Быны ул эске кинәнес, ғорурлыҡ менән әйтте. "Гимназияны тамамлағандан һуң Өфө хәрби авиация оркестрында Фәрит Иҙрисов етәкселегендә хеҙмәт иттем. Башҡортостан Республикаһы гимнын ижад итеүгә мин дә үҙ өлөшөмдө индерҙем", - тине ул.

Әйткәндәй, был уҡыу йортон тамамлаған егеттәр барыһы ла хәрби хеҙмәткә атлығып торалар икән. Хәрби оркестрҙарҙа уйнай улар. "Ғәскәргә музыка шуға кәрәк: ул рухландыра, ватанды һаҡлауға ынтылышты көсәйтә. Бөгөн минең тиҫтәнән ашыу уҡыусым Мәскәүҙә хәрби оркестрҙарҙа хеҙмәт итә, бер ыңғай төрлө консерваторияларҙа белемдәрен камиллаштыра", - ти Фларис Винарис улы.

Гимназия-интернатты бер йылдан тамамлайым, тип торған Илнур Фәтҡуллин менән дә һөйләшеп алдыҡ. Ул беҙҙе саф башҡортса һөйләшеүе менән ҡыҙыҡһындырҙы. Белорет районы Асы ауылынан икән. Бында торба класында уҡый. Уның үҙенә бөгөнгө һымаҡ "бағышлау" байрамы тәтемәгән: 6-сы синыфҡа ғына килгән ул бында. Ауылдашы, синыфташы, дуҫы Байегет Мөхәррәмов атлы егет ҡоҙалаған. Бында уҡыуына бер ҙә үкенмәй Илнур, ҡыуана ғына. Режим менән йәшәүгә лә күнегеп бөткән, режимда була торған ҡайһы бер үҙенсәлектәрҙе лә тыныс ҡабул итә. "Йылдан-йыл көсөргәнеш арта барғанға күрә, буш ваҡытыбыҙ ғына юҡ. Юғиһә "Киске Өфө"нө лә йышыраҡ уҡыр инем", - тип әйтеп һалды ул. Был һүҙҙәре беҙҙең, гәзит хеҙмәткәрҙәренең күңеленә май булып яғылды ла ҡуйҙы. Гимназия етәкселегенең "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыуы бушҡа китмәгән, тигән һығымта менән ҡайттыҡ был байрамдан.

**Иҙел РӘХИМОВ.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Ноябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 21 (21) дүшәмбе | 7:31 | 9:01 | 13:30 | 15:32 | 17:02 | 18:32 |
| 22 (22) шишәмбе | 7:33 | 9:03 | 13:30 | 15:31 | 17:01 | 18:31 |
| 23 (23) шаршамбы | 7:35 | 9:05 | 13:30 | 15:30 | 17:00 | 18:30 |
| 24 (24) кесе йома | 7:36 | 9:06 | 13:30 | 15:28 | 16:58 | 18:28 |
| 25 (25) йома | 7:38 | 9:08 | 13:30 | 15:27 | 16:57 | 18:27 |
| 26 (26) шәмбе | 7:40 | 9:10 | 13:30 | 15:26 | 16:56 | 18:26 |
| 27 (27) йәкшәмбе | 7:42 | 9:12 | 13:30 | 15:25 | 16:55 | 18:25 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

## МИҺЫРБАНЛЫ БУЛ

"Иманды, - тигән бәйғәмбәр, ғәлийһис-сәләм, - дүрт төрлө нәмә кәметә: шуның икеһе: ғилемгә таянып эш итмәй, наҙанлыҡты терәк итеп алыу, мин беләмлек. Икеһе - белмәгәнеңде белергә тырышыуҙан ҡыйынһыныу, белергә теләгәндәргә юл ҡуймау. Үҙенең динен әҙәмсә өйрәнергә тырышып бармаған кеше иманын да тейешле дәрәжәлә һаҡлап тота алмай, кемдеңдер юҡ-бар һүҙенә ышанып ул булған иманын да юғалта".

Бәйғәмбәребеҙ, ғәләйһим-сәләм, өйрәткән: "Ғаиләңә һәм ҡәрҙәштәреңә ҡарата булған игелектән дә олораҡ нәмә юҡ", - тигән. Үҙеңдең хәләл көсөң, хәләл кәсебең сәбәпле тапҡан малыңды иң элек ғаиләңде, балаларыңды тәрбиәләү - ашатыу, эсереү, кейендереү өсөн тотон, артып ҡалғанынан зәкәтен бир, унан саҙаҡа өсөн дә өлөш сығар.

Асыуың килгәндә тыйыла бел. Башҡалар ғәйебен күргәндә күҙ йомоп ҡалырға тырыш. Ғаиләңә миһырбанлы бул. Ошо дүрт нәмәне бойомға ашыра алһаң, яҡшы бәндәләрҙән булырһың.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**19 ноябрь "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры 12+
**20 ноябрь "Шәүрәкәй"** (М. Буранғолов), музыкаль комедия 12+
**22 ноябрь "Джут"** (О. Жанайдаров), драма 16+
**23 ноябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия 12+
**24 ноябрь "Ике төш"** (М. Багаев), драма 12+
**25 ноябрь "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим) 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**22 ноябрь "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт..."** (С. Айытматов), драма 12+
**23 ноябрь "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**19 ноябрь "Хыялдар тормошҡа ашыр ер"** (В. Аккерман), комедия 12+
**24 ноябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай), муз. комедия 12+

### Сибай концерт-театр берләшмәһе

**"Башҡортомдоң хазинаһы - йырлы, моңло сибайҙар" концертына саҡыра.**
**21 ноябрь** М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры бинаһында
**22 ноябрь** Дим биҫтәһенең "Орион" мәҙәниәт һарайында

*ХОККЕЙ*

САЛАВАТ ЮЛАЕВ хоккейный клуб

## РӘТТӘН ЕТЕНСЕ ЕҢЕҮ!

**25 ноябрь "Салауат Юлаев" хоккей клубы үҙенең 55 йыллығын билдәләйәсәк. Әйтергә кәрәк, әлеге мәлдә юлаевсылар был датаны лайыҡлы ҡаршыларға бар көстәрен һала. Уларҙың рәттән етенсе еңеү яулауҙары быға асыҡ дәлил булып тора.**

Өфө хоккейсылары Түбәнге Каманың "Нефтехимик" командаһын еңгәндән һуң, Ҡаҙандың "Аҡ барс"ы менән көс һынашты. Был алышта иҫәпте хужалар асты. Ҡунаҡтар иһә икенсе осорҙа алға сығыу яйын тапты - Никлас Сведберг ҡапҡаһына бер-бер артлы ике шайба оҙатты. Һәм уйын аҙағынаса башҡаса уңышҡа өлгәшә алманы. Уның ҡарауы, "Салауат Юлаев" тағы ла өс гол индереп, ышаныслы еңеү яуланы. Уйын һөҙөмтәһе 4:2! Матч һуңынан үткәрелгән матбуғат конференцияһында Игорь Захаркиндың: "Бөгөн Өфөлә хоккей байрамы булды", тиеүе команда көйәрмәндәренең шатлығын асыҡ әйтеп бирҙе.

Ситтәге тәүге уйында юлаевсылар Түбәнге Новгородтың "Торпедо"һы менән осрашты һәм хужаларҙы 2:3 иҫәбе менән еңеүгә өлгәште. "Торпедо" уйынсыларының беренсе булып гол индереүҙәренә Өфө егеттәре уйын барышында өсәү менән яуап бирҙе. Урындағы хоккейсылар иһә матч тамамланыуға 13 секунд ҡалғас, Сведберг ҡапҡаһына тағы ла бер гол оҙатып, ҡунаҡтарҙың кәйефен бер аҙ төшөрҙө, ләкин уйын һөҙөмтәһенә йоғонто яһай алманы. "Салауат Юлаев"тың тағы ла бер ышаныслы еңеүе!

Мәскәүҙә лә юлаевсылар уңышлы сығыш яһаны. Осрашыуҙың тәүге минуттарында уҡ Өфөгә "Спартак"тан күсеүсе Евгений Бодров элекке командаһына бер гол "бүләк" итте. Ләкин ҡунаҡтарҙың был уңышлы һөжүме хужаларҙы албырғатманы - улар йыш һөжүм итте һәм беренсе осорҙа ике гол индереүгә өлгәште. Иҫәпте тигеҙләү өсөн юлаевсыларға тырышырға тура килде. Өсөнсө осорҙоң ахырында ғына "Салауат Юлаев" алға сыҡты, ләкин "Спартак" ҡапҡасыһын алып, уйынсылар һанын арттырҙы һәм үҙ иҫәбенә тағы бер гол яҙып, уйынды өҫтәлмә ваҡытҡа күсерҙе. Овертаймда Өфө командаһы көслөрәк булып сыҡты - Захар Арзамасцевтың голы юлаевсыларға еңеү килтерҙе. Шулай итеп, матч 3:4 (ОТ) иҫәбе менән тамамланды.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ҠАҺЫМ ТҮРӘ САҠЫРҘЫ...



**Стәрлетамаҡ районы Айыусы ауылында билдәле ғалим, тарихсы, этнограф, профессор, тарих фәндәре докторы Рим Зәйнәғәбит улы Йәнгужиндың тыуыуына 75 йыл тулыуға арналған саралар үтте.**

Өфөлә башланған "Кешеләр, мәҙәниәттәр, арауыҡ: Евразия донъяһының социомәҙәни динамикаһы" тип аталған ғилми-ғәмәли конференцияның икенсе көнө Айыусы урта мәктәбендә дауам итте. Фән, мәҙәниәт, әҙәбиәт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре - В. Аҙнаев, Б. Аҙнабаев, Р. Шәйхисламов, Н. Ҡалмантаев, З. Әминев, Р. Ғәзизов, А. Аҡъюлов, Ҡәҙим Аралбаев, А. Йәнгужин бөйөк ғалимдың исемен хәтергә алыу өсөн уның тыуған ауылына йыйылды. Уларҙың барыһы ла Рим Йәнгужинды ғәзел, ярҙамсыл һәм маҡсаттарына тоғро булған шәхес итеп хәтерләүҙәрен һөйләне һәм мәктәп уҡыусыларын яҡташтарының өлгөһөндә йәшәргә саҡырҙы. Конференцияла ғалимдың 75 йыллығына арналған район конкурстары еңеүселәрен бүләкләү булды. Ҡунаҡтар шулай уҡ Ҡаһым түрә стелаһына һәм "Ашҡаҙар" йыры һәйкәленә, ғалимдың ҡәберенә сәскәләр һалыуҙа ҡатнашты, мәктәптә бизәү-ҡулланма ижады күргәҙмәһен ҡараны.

Ошо уҡ сара сиктәрендә "Ҡаһым түрә ҡунаҡҡа саҡыра" тип аталған башҡорт халыҡ тарихи йырҙарын башҡарыусыларҙың төбәк фестивале лә үтте. Фестивалдә Башҡортостандың 15 ҡалаһы һәм районынан 66 йырсы һәм ижади коллектив ҡатнашты. Еңеүселәр өс - башҡорт халыҡ тарихи йыры, солист-ҡурайсы, ҡурайсылар ансамбле һәм бизәү-ҡулланма ижад номинацияларында билдәләнде. I дәрәжә лауреаттары тип Баймаҡ ҡалаһынан Азамат Ғөбәйҙуллин, Ишембайҙан "Мондарья" башҡорт вокал ансамбле, Стәрлетамаҡтан Фәнил Кинйәғолов, Благоваранан Илмир Ҡоҙабаев, Стәрлетамаҡтан Фуат Юнусбаев, Сибайҙан Әнүәр Буранғолов, Ейәнсуранан "Ете таж" ҡурайсылар ансамбле, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты квартеты (ҡурайсылар ансамбле), Мишкәнән Рим Ғәлимов (бизәү-ҡулланыу сәнғәте) танылды. Фестивалдең гран-приһы Ишембайҙан Сулпан Мифтаховаға тапшырылды. Районның мәҙәниәт бүлегенән хәбәр итеүҙәренсә, был фестивалде йыл һайын үткәрергә тип ҡарар ителгән.

# УТ БИРЕР САҒЫҢ...



**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры Артур Кәбиров "Ут бирер торған сағым" тип аталған беренсе концертын үткәрҙе.**

Концертта Артур Кәбиров төрлө авторҙар, шул иҫәптән үҙе яҙған йырҙары башҡарҙы. М. Щепкин исемендәге Юғары театр училищеһын тамамлаған йәш актерҙың әле, ысынлап та, кешеләрҙең күңелдәренә осҡон һала торған ғына сағы. Ул театрҙағы сағыу ролдәре менән дә таныш тамашасыға. Артур шулай уҡ "Ҡош юлы" башҡорт бард йыры фестивале лауреты, Р. Ғарипов исемендәге премия лауреты. Үҙенең тәүге концертын да ул яратҡан шағиры Рәми Ғариповҡа арнаған.

"Был Актер йортонон яңы миҙгелдәге тәүге сараһы. Концерт БР Театр эшмәкәрҙәре берлегенең Йәштәр советы ярҙамында уҙҙы", - ти Йәштәр советы рәйесе Хәрмәтулла Үтәшев. Тиҙҙән бында артистар менән осрашыуҙар ҙа ойоштора башларға ниәтләнәләр.

# ОҘОН КӨЙ ЙЫРЛАМАҺАҢ...

**Туймазыла башҡорт йырын халыҡсан башҡарыу оҫталығын һаҡлау һәм үҫтереү, йәш быуынды урындағы ғөрөф-ғәҙәттәр һәм йолалар нигеҙендә тәрбиәләү, халыҡтың башҡорт халыҡ ижадын өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныуын арттырыу маҡсатында ойошторолған өс көнлөк музыкаль марафон - "Оҙон көй-2016" төбәк-ара башҡорт йырҙарын башҡарыусылар конкурсы тамамланды. Халыҡ ижады байрамын Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге һәм Туймазы районы хакимиәте ойошторҙо.**

Ижади форумда республиканың 20-нән ашыу ҡала һәм районынан, шулай уҡ Татарстандан, Һарытау һәм Силәбе өлкәләренән, Санкт-Петербургтан, Ҡаҙағстандан 6 йәштән 81 йәшкәсә 70-кә яҡын йырсы ҡатнашты. Башҡортостандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Нажиә Аллаярова етәкселегендәге абруйлы жюри бәйгеселәрҙең талантын юғары баһаланы.

Бүләкләү тантанаһы конкурс еңеүселәренең һәм республика сәнғәт оҫталарының сығышы менән үрелеп барҙы. Гала-концертты асып, республиканың мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың сәләмләүен уҡып ишеттерҙе. Байрамдың абруйлы ҡунағы, данлы йырсы һәм ҡурайсы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге республика премияһы дауреаты Абдулла Солтанов дәррәү алҡыштар аҫтында башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарҙы. Был көндә 30-ға яҡын йырсы еңеүсе, дипломант тип иғлан ителде, махсус, шул иҫәптән Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың призына лайыҡ булды. Уны Сәнәғәт, инновация үҫеше һәм эшҡыуарлыҡ буйынса комитет рәйесе Рәшит Хәйруллин Ҡаҙағстан ҡунағы Ләлә Усабаеваға тапшырҙы. "Оҙон көй-2016" төбәк-ара башҡорт йырҙарын башҡарыусылар конкурсының Гран-приһын Юнир Һағынбаев яуланы.

ВИКТОРИНА



# ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР



**Был юлы уҡыусыларыбыҙға Ғәлим Хисамовтың "Өн һәм һан" романы буйынса һорауҙар тәҡдим итәбеҙ.**

1. Йәш математик Уралға, Мәскәүҙәге уҡытыусыһы Якубовский тәҡдиме менән, Фарсы ҡултығындағы ҡайһы илдән эшкә саҡырыу килә?
   а) Ирандан;
   б) Сәғүд Ғәрәбстанынан;
   в) Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренән.

2. Сәсән ғалим "башҡорт" этнонимының килеп сығышына ниндәй аңлатма бирә?
   а) башҡорт - "баш бүре";
   б) башҡорт - яҡшы ҡоралланған ғәскәр;
   в) башҡорт - баш бал ҡорто тотоусы.

3. Йәш математик Урал, үҙенең тикшеренеүҙәренән сығып, тәүтормош кешеләренең телендә яңғыраған тәүге өн-һандың барлыҡҡа килеүенә кем, йәки нимә сәбәпсе булған, тип аңлата?
   а) Юғары көс, Илаһ;
   б) кеше үҙе;
   в) сит планетанан килгән аңлы заттар;

4. Уралдың тикшеренеүе буйынса, кешенең ғүмер оҙайлығы нимәгә бәйле?
   а) кеше буйының оҙонлоғона;
   б) уның сәләмәт тормош алып барыуына;
   в) бәхетле осраҡҡа;

**Ҡәҙерле дуҫтар! Кем дә кем беҙгә 246-03-24 номеры буйынса шылтыратып, ошо һорауҙарға дөрөҫ яуап әйтә, шул уҡыусыбыҙға Ғәлим Хисамовтың автографы ҡуйылған "Өн һәм һан" китабын бүләк итәсәкбеҙ. Үткән уйын йомғаҡтары буйынса Әмир Әминевтың автографлы "Бер кәмәлә" китабын Өфө ҡалаһынан Әлфиә Зәбдинова отто! Йәгеҙ, кем алыҡ?**

**Викторинаны Иҙел РӘХИМОВ алып бара.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДУҪЫҢ КҮП БУЛҺА,

## дошманың үҙе үлер

Бала үҫтерһәң, буйын ғына түгел, аҡылын да үҫтер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Мин киләсәк менән ҡыҙыҡһынам, сөнки үҙемдең ҡалған бар ғүмеремде унда үткәрергә йыйынам.

**(Чарлз Ф. Кеттерлинг).**

Һәр ҡатын-ҡыҙ өсөн ике генә фекер бар: үҙенеке һәм... дөрөҫ булмағаны.

**(Билдәһеҙ автор).**

Бәләгә ҡалғанда иһә ҡурҡыныс ҡарарҙар ҡабул итмәй сараң юҡ.

**(Сенека).**

Тәрбиәләү парадоксы шул: тәрбиәгә уға мохтаж булмағандар тиҙерәк бирелә.

**(Фазил Искәндәр).**

Ысын ял - ул байрам итеү түгел, ә шөғөлдәрҙе генә алыштырыу.

**(И. Сеченов).**

Тарихтан ала алған берҙән-бер һабаҡ шунда: кешеләр тарихтан бер ниндәй һабаҡ та алмай.

**(Бернард Шоу).**

Алда барғандар тураһында насар фекер йөрөтмә, иҫеңдә тот: һинең артыңдан килеүселәр ҙә бар бит.

**(Борис Ручьев).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер көнсығыш байына ҡурҡыныс төш инә, имеш, уның бер-бер артлы бөтә тештәре төшөп бөткән. Бик ныҡ тулҡынланып, ул эргәһенә төш юраусыны саҡырып ала. Тегенеһе уны тыңлағас һуң, шулай ти: "Батшам, мин һинә насар хәбәр әйтергә тейешмен. Һин бер-бер артлы бөтә яҡын кешеләреңде юғалтасаҡһың". Был һүҙҙәр батшаның асыуын килтерә. Ул төш юраусыны төрмәгә ябырға ҡуша һәм үҙенә икенсе бер төш юраусыны саҡырып ала. Быныһы, төш тураһында тыңлағас, шулай ти: "Яҡшы хәбәр, батшам! Һин үҙеңдең барлыҡ яҡын кешеләреңдән дә оҙағыраҡ йәшәйәсәкһең". Батша был хәбәргә ныҡ ҡыуана һәм төш юраусыны йомарт бүләкләй. Батшаның хеҙмәтселәре был хәлгә ғәжәпләнеп икенсе төш юраусынан: "Һеҙ бит хакимға тәүге төш юраусы менән бер үк хәбәрҙе еткерҙегеҙ, ни өсөн ул хөкөм ителде, ә һин бүләкләндең?" - тип һораған. "Эйе, беҙ был төштө бер төрлө юраныҡ. Ләкин хәбәрҙең ниндәй булыуы мөһим түгел, уны нисек итеп еткереүең мөһим бит", - тип яуап ҡайтарған төш юраусы..."**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 18 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4900
Заказ - 2124/11